ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 май (һабанай) 2019
№20 (854)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**АРЗАНҒА ЯҘЫЛЫП ҠАЛЫҒЫҘ! Мөхтәрәм йәмәғәт! 16 майҙан 26 майға тиклем иғлан ителгән ун көнлөктә 2019 йылдың икенсе яртыһына ВО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 560 һум 70 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I-II төркөм инвалидтары - 533 һум 76 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер бүләккә матур китаптар аласаҡ икәнен дә иҫтән сығармағыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Өфө ҡоролтайы...** ил ҡорона сыҡты — 6



**Кире ҡаҡлыҡтырған...** үҙенә осҡан гранатаны — 7



**Төбәккә хас сирҙәр һәм...** ер тетрәүҙәр, шихандар тураһында бер кәлимә — 8-9



**Был беҙ түгел!** — 11

**ТВ-программа** — 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Хаталы яҙыуҙар һәм хаталы телмәрҙәр беҙҙең наҙанлана барыуыбыҙ хаҡында һөйләйме?

*Вәкил ХАЖИН, педагогика фәндәре кандидаты, тел белгесе:*

Хаталы яҙыуҙар ҙа, хаталы телмәрҙәр ҙә наҙанлыҡ билдәһе түгел, ә беҙҙең туған телебеҙгә, үҙ телмәребеҙгә иғтибарһыҙлыҡ, тип әйтергә кәрәктер ул, сөнки, дөйөм алғанда, халыҡ наҙанланмай, киреһенсә, торған һайын белемен, мәғлүмәтлелеген арттыра бара. Шуға күрә, наҙанлана барабыҙ, тип әйтеү дөрөҫ түгел. Хаталар, айырыуса телмәрҙә күҙәтелгәндәре күп йәһәттән ике теллелек арҡаһында килеп тыуа. Ошонан кемде алып ҡараһаҡ та, урыҫ һүҙе ҡыҫтырмай, саф башҡортса ғына һөйләшә алған кеше һирәк. Теләйбеҙме беҙ, юҡмы, ләкин ике теллелек менән бер ни ҙә ҡылып булмай, ул объектив күренеш һәм бының менән килешергә кәрәк. Ләкин был һис кенә лә беҙҙең телмәр хаталарын аҡламай. Айырыуса тел һәм башҡорт телмәре менән эш итеүселәргә ныҡ ҡағыла был, ә халыҡ араһында ниндәйҙер хаталар киткеләгән хәлдә лә улар уны башҡаса ҡабатламаҫҡа тырыша. Бигерәк тә һуңғы ваҡыт күҙәтелә был.

Телебеҙҙең үҙенә генә хас нескәлектәре, үҙенсәлектәре бар, шуны юғалтмаҫҡа тырышыр кәрәк. Ә бына хаталы телмәрҙең меңәрләгән ҡолаҡҡа барып етеүе бер ҙә ғәфү итерлек түгел. Был бигерәк тә сәхнәләрҙә сығыш яһаусы артистарға, йәмәғәт эшмәкәрҙәренә, шулай уҡ журналистарға ҡағыла. Тел һәм телмәр тамаҡ туйҙырған "икмәгең", һөнәрең икән, уға битарафлыҡ күрһәтергә, тел һәм телмәр ҡанундарын боҙоп һөйләргә, яҙырға хаҡың юҡ. Айырыуса юҡлыҡты белдергән ҡылымдарҙың ялғауҙарына баҫым дөрөҫ ҡуйылмай. Был турала электән әйтә киләм: *-ма, -мә* ялғауҙары - баҫымһыҙ. Мәҫәлән, *ила-ма, кил-мә, уҡы-ма* тигәндә баҫым тамыр һүҙгә төшә. Ә инде ошо уҡ юҡлыҡ ҡылымдарҙың икенсе төрлө формаһы - киләсәк заманды белдергәндә баҫым *-ма, -мә* ялғауына төшә: *ила-ма-м, кил-мә-м, уҡы-ма-м.*

Хаталы телмәр, әйтеүемсә, 100 ҡолаҡҡа барып етә икән, башҡалар ҙа шул хаталы форманы ҡабатлай башлай. Бына шунан китә лә инде хаталы телмәр... Унан тағы 3-сө зат ҡылым формаһының хәҙерге заман күплектә әйтелеше лә дөрөҫ яңғырамай. Баҫым бындай ҡылымда ялғауға төшә: *яҙа-лар, бара-лар.* Киләһе төр хаталар йыйыу һәм сағаны белдергән һандар менән ҡулланылған исемдәрҙе күплектә әйтеү менән бәйле. Мәҫәлән, йөҙләгән кеше, ләкин кешеләр түгел! Шулай уҡ дөрөҫ була: йөҙләп кеше, тик кешеләр түгел. Тағы ла: ап-аҡ тигән һүҙҙең дөрөҫ әйтелеше - аппаҡ, йә булмаһа, ҡыр ҡаҙы тигән һүҙ телмәрҙә ҡырғаҙы тип әйтелергә тейешле осраҡтарҙа ла йыш ҡына хата китә. Был йәһәттән дөрөҫ телмәргә баланы өйҙә лә, мәктәптә лә өйрәтеү кәрәк, тимәксемен. Күп нәмә, әлбиттә, мәктәптән килә, сөнки унда баланы һөйләшергә түгел, ә теория өйрәтәләр, ҡатмарлы ҡағиҙәләр менән уҡыусы башын ҡатыралар. Күп дәрестәр ҡараным. Яҙылмаған "ҡағиҙә" буйынса дәрес буйы - сама менән 30 минут тирәһе уҡытыусы үҙе һөйләй, ә уҡыусыға һүҙ бирелмәй. Шулай итеп, уның телмәре үҫешмәй, хаталы һөйләшеүе төҙәтелмәй, был хаҡта балаға бер ни ҙә аңлатылмай...

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# КИЛӘСӘК УТРАУЫНДА




**Баш ҡаланың бихисап балалар баҡсалары араһында башҡорт мөхите булдырылған учреждениелар башҡорт теле, милли рух, халҡыбыҙҙың киләсәге йәшәгән утрау булып айырылып тора. Шундай утрауҙарҙың береһе, Ҡупайлы биҫтәһендә урынлашҡан 308-се башҡорт балалар баҡсаһында ошо көндәрҙә "Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһе үтте. Учреждение хеҙмәткәрҙәре ярышты Башҡортостандың 100 йыллығына арнап ойоштorҙо. Күңел түренән сыҡҡан һүҙҙәрен балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүсе малай-ҡыҙҙар атай-әсәйҙәре, олатай-өләсәйҙәре менән бергәләп һөйләне.**

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**(Башы 1-се биттә).**

# Хаталы яҙыуҙар һәм хаталы телмәрҙәр беҙҙең наҙанлана барыуыбыҙ хаҡында һөйләйме?

***Илзидә ЙОСОПОВА, З.Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте хеҙмәткәре:*** Был һорауға ҡәтғи генә "эйе" йәки "юҡ" тип яуап биреп булмай, сөнки туған телен ҡулланыусылар араһында телде яҡшы белгән, аралашҡанда ла, яҙғанда ла уның нескәлектәрен иҫәпкә алып, хаталарға юл ҡуймаҫҡа тырышҡан оло һәм урта быуын вәкилдәре лә, тел ҡағиҙәләрен төшөнөп бөтмәгән йәштәр ҙә бар. Бер яҡтан, милләттәштәребеҙҙең грамматик, пунктуацион, орфографик һәм телмәр хаталарына юл ҡуйыуын аҡларға ла була, сөнки улар бер нигә ҡарамайынса, барыбер үҙ телендә яҙырға, аралашырға ынтыла, тип уйлайһың. Тик шулай ҙа... Хаталы яҙыу, хаталы телмәр, икенсе яҡтан, кешеләрҙең үҙ теленә ҡарата тейешле ихтирамдың, иғтибарҙың булмауын күрһәтеп тора түгелме? Республикаға исем биргән төп халыҡтың үҙ теленә мөнәсәбәте шулай икән, тимәк, башҡалар ҙа уны һанламаясаҡ. Әлеге күпме тапҡырҙар тәнҡитләнеп тә һаман да Өфө урамдарында аҙым һайын осраған хаталы алтаҡталар, белдереүҙәр, ойошмалар исемдәре һ.б. тап ошо хаҡта һөйләй бит!

Йәштәрҙең телмәрен иһә винегретҡа оҡшатам мин, сөнки башҡортса-русса-сит телдәрҙе ҡушып һөйләүҙе бер нисек тә ҡабул итеп булмай. Шуға күрә беҙ, туған тел менән эш итеүселәр ҙә, бигерәк тә уҡытыусылар, шулай уҡ өлкән быуын вәкилдәре бындай осраҡтарҙа үпкәләтмәйенсә, ипле генә итеп йәштәргә, балаларға уларҙың хаталарына күрһәтеп, дөрөҫө нисек булғанын әйтә килергә тартынмайыҡсы һис тә. Шуның кеүек үк, урамдарҙағы яҙыуҙарҙы, шулай уҡ башҡа төрлө хаталарҙы күргәндә, фотоға төшөрөп алып, уны матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары, йә шул хаталы исемдәге ойошмалар етәкселәре иғтибарына еткерәйек. Һәр беребеҙ ана шундай граждандыҡ әүҙемлеге күрһәткәндә генә наҙанлыҡ осраҡтары менән көрәштә ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин булыр ине. Телмәребеҙҙә, яҙыуыбыҙҙа хаталарҙың күбәйеп китеүе сәбәбен мин әсә телебеҙгә ҡарата үҙебеҙҙең вайымһыҙлыҡта күрәм. Хаталарға ваҡытында төртөп күрһәтә белергә, уларҙы кисекмәҫтән төҙәтә барырға кәрәк, юғиһә, ысынлап та, наҙанлыҡ баҫып алып китеүе бар. Ә уның хәүефле билдәләре әле үк аҙым һайын тормошобоҙҙо йәмһеҙләп, кәйефтәрҙе ҡырып тора ла бит инде.

***Фәтхулла МӨХӘМӘТЙӘНОВ, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:*** Хаталы яҙыуҙар менән хаталы телмәрҙе мин наҙанлыҡ билдәһе тип иҫәпләйем. Бындай ҡәтғилектең сәбәбе, бәлки, был мәсьәләгә уҡытыусы булараҡ ҡарауымдалыр, ләкин ҡайһы яҡтан ҡараһаң да, ниндәй генә һөнәр эйәһе булһаң да хаталы яҙыу һәм һөйләүҙе аҡлауы ҡыйын. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ әле: паспорттағы бер хата нимәгә килтерә? Үҙем шаһит: шул бер хата арҡаһында танышым пенсияға ваҡытында сыға алмай, әллә күпме яфаланып, ишектән-ишеккә йөрөп, белешмә ҡағыҙҙар юллап, бер хата хәрефте саҡ төҙәттереп алды. Бер наҙандың хатаһы арҡаһында күпме ваҡытын, нервыларын сарыф итте. Өтөрҙө дөрөҫ ҡуя белмәгәндәргә "Язаларға ярамай ярлыҡарға" тигән классик миҫалды килтереү ҙә етәлер: йәнәһе, бер өтөр билдәһенең кеше башын "ашау" ихтималлығы ла бар бит, тигәндәй. Нисек кенә тимә, хаталы яҙыу һәм телмәр кешене биҙәмәй инде ул, ундайҙарға ҡарата бер ниндәй ихтирамым да ҡалмай ҙа ҡуя. Әлбиттә, ундай кеше грамматик яҡтан бигүк белемле булмаһа ла, башҡа яҡтан алдыралыр: мәҫәлән, техниканы, электрониканы яҡшы белә йә талантлы рәссам, бейеүсе... Ә шулай ҙа уларҙың хаталы яҙыуы һәм хаталы телмәре янында был һәләттәре тоноҡланып ҡалғандай. Әйткәндәй, беҙҙә пунктуацияны, шулай уҡ рус һәм башҡа сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын белмәгән яҙыусылар, хатта фән кандидаттары ла етерлек. Ләкин кем генә булмаһын, кеше иң тәүҙә үҙенең илһөйәрлеге, телһөйәрлеге менән айырылып тора. Бына әле башҡорт теленән диктант яҙыуҙар булып үтте. Кемдәр генә килмәй унда! Бик мәслихәт, бик яҡшы тәрбиәүи сара, тик... унда наҙандар барыбер килмәйәсәк шул. Ә бит телде насар белеүен танып, уны төҙәтергә, хатаһыҙ итеп яҙырға һәм һөйләшергә өйрәнергә теләүселәр ҙә бар арабыҙҙа һирәкләп булһа ла. Улар өсөн ҡыҫҡа, ләкин тиҙ арала һөҙөмтә бирә ала торған алдынғы методикаларға таянып, махсус курстар ойоштороу отошло булыр ине. Ни тиһәң дә, наҙан, тиеп түпәләүгә ҡарағанда, өйрәтеү, ярҙам итергә тырышыу күпкә яҡшыраҡ.



***Фирҙәүсә ҒӘЗИЗОВА, Өфө ҡалаһы Фәнни мәғлүмәти-методик үҙәктең туған телдәр буйынса методисы:*** XXI быуатта "наҙан" һүҙе минең өсөн ят. Әлеге заманда был һүҙҙе ҡулланыу дөрөҫ булып етмәҫтер. Бөгөнгө осраҡта был наҙанлыҡ түгел, ә иғтибарһыҙлыҡ, белергә теләмәү һәм үҙ өҫтөңдә эшләмәүҙең ҡасафаты тип уйлайым.

Кешегә Хоҙай Тәғәлә күреү һәләтен биргән. Бала шул күҙҙәр ярҙамында донъяны танып белә башлай һәм ғүмере буйы шулай дауам итә. Шуға күрә хаталы яҙыуҙарҙы кеше күҙҙәре күреп, шуға күнегеп китмәһен, тиһәк, беҙгә ҡала урамдарындағы алтаҡталарҙы дөрөҫ яҙыуҙан башларға кәрәктер. Йыл әйләнәһенә Өфө ҡалаһының башҡорт теле уҡытыусылары, планға ярашлы рәүештә, шул алтаҡталарҙы тикшерә, фотоға төшөрә, шунда уҡ дөрөҫ булмаған һүҙҙәрҙе дөрөҫләп, район хакимиәтенә ебәрә. Район хакимиәттәрендә "Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәрен бойомға ашырыу" буйынса комиссия бар. Шул комиссия хаталы алтаҡталарҙың хужаларына хат ебәрә. Улар үҙ сиратында хаталарҙы төҙәтеп, фотоға төшөрөп, хатҡа яуап ебәрәләр. Тик, ҡыҙҡанысҡа күрә, күптәр беренсе тикшереүҙә күрһәтелгән һүҙҙе дөрөҫләһә лә, икенсе берәй һүҙгә хата өҫтәп, тағы элеп ҡуялар. Күпселектә *о-ө, ә-е, ә-э, у-ү, к-ҡ, г-ғ* хәрефтәрендә хаталар күп осрай. Тағы ла алтаҡталарҙың башҡорт исемдәрен татарлаштыралар, мәҫәлән, Сулпан-Чулпан. Ә ни эшләп Сулпан булып ҡалмай ул? Айһылыу-Айслу булып китә. Ә ни өсөн Айхылыу йә Айсылыу тиелмәй икән? Бындай миҫалдар бихисап.

Был хаталарҙы бөтөрөүҙә ике юл күрәм: берҙән, шул алтаҡталарҙы эшләүҙе башҡорт эшҡыуарҙары үҙ ҡулына алһын ине. Бер эшҡыуар тотоноп, шуны селтәрле бизнесҡа әйләндереп ебәрһә лә, был проблема хәл ителер ине. Әлеге ваҡытта башҡорт филологияһын тамамлаған күпме белгестәребеҙ бар. Икенсенән, үҙ телендә дөрөҫ уҡый-яҙа белгән башҡорттар әле етерлек. Шуларҙың барыһы ла күргән хаталарҙы һатыусыға төртөп күрһәтһә, магазиндың йәки дарыухананың, ғөмүмән, шул алтаҡтаны элеп ҡуйған ойошманың хакимиәтенә инеп шелтәләп сыҡһа ла, эш күпкә алға барыр ине. Был ике осраҡта ла башҡорт халҡының үҙенең әүҙемлеге кәрәк. Кемдеңдер нимәлер эшләгәнен көтөп ятырға кәрәкмәй. Үҙебеҙгә тотоп эшләй башларға кәрәк. Әгәр ошо эштәрҙе бөгөндән эшләй башламаһаҡ, бер 20 йылдан, ысынлап та, наҙанлана башлауға юл ҡуясаҡбыҙ, тип уйлайым.

Ошо йәһәттән тағы шуны әйтер инем: халҡыбыҙ башҡорт телендә сығыусы матбуғат баҫмаларына яҙылыу тигәнде, ғөмүмән, онотто. "Киске Өфө", "Башҡортостан", "Йәшлек", балалар өсөн "Йәншишмә" гәзиттәрен, "Ағиҙел", "Ватандаш", "Аманат" журналдарын алдырып, милләтебеҙҙе борсоған мәсьәләләр йә ҡыуандырған ваҡиғалар, яңылыҡтар менән танышып барыу, һәр йәһәттән хәбәрҙар булыуҙан тыш, дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә лә өйрәнергә мөмкин. Һәр хәлдә, уҡыуҙан аҡыл ғына түгел, белем дә артасаҡ: теге йәки был һүҙҙең яҙылышы, тыныш билдәләренең ҡуйылышына һиҙемләү үҫешә. Әсә телебеҙҙәге ваҡытлы матбуғат баҫмаларыбыҙ етерлек, тик уларҙың ҡәҙерен белмәйбеҙ. Үҙ телеңдә рәхәтләнеп гәзит-журнал уҡыу бар халыҡтарға ла тәтемәй ул. Гәзит уҡып та грамотаға өйрәнеп була: шуны онотмайыҡ!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә ҡалдыҡтар менән эш итеү өлкәһендә төбәк операторҙарының III Халыҡ-ара съезы булып үтте. Съезда ҡатнашыусылар 2019 йылдың 1 ғинуарынан башланған ҡалдыҡтар менән эш итеү өлкәһендәге реформаны тормошҡа ашырыуҙың тәүге йомғаҡтарын, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеүҙең яңы системаһына күсеү үҙенсәлектәре һәм проблемалары, ошо өлкәләге проекттарға дәүләт ярҙамы кәрәклеген тикшерҙе. Унда республика етәксеһе Радий Хәбиров та ҡатнашты.

✓Республиканың Илеш һәм Ауырғазы районДары предприятиелары яҡшы һауа торошон тулы кимәлдә файҙаланып ҡалды һәм хәҙер культураларҙың һуңғы гектарҙарын сәсә. Улар ауыл хужалығы предприятиелары майҙандарының 94 процентында сәсеү эштәрен башҡарған, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко, Стәрлебаш һәм Саҡмағош районДарында баҫыуҙарҙың 11-15 процентында сәсергә ҡалған. Дөйөм алғанда, республикала 1 миллион 434 гектарҙа яҙғы сәсеү башҡарылған, был - пландан 72 процент.

✓Республиканың Краснокама районы хакимиәте башлығы Рәзиф Ғилмуллиндың вәкәләттәре ваҡытынан алда туҡтатылды. Район депутаттары Советының сираттан тыш ултырышында ошондай ҡарар ҡабул ителде. Краснокама районы хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп 2015 йылдың февраленән 2019 йылдың 14 майына тиклем Мишкә районы хакимиәте башлығы булып эшләгән Рөстәм Мусин тәғәйенләнде.

✓Министрлыҡтар, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай, сауҙа нөктәләре вәкилдәре ҡатнашлығында алкоголле эсемлектәр ҡулланыуҙы сикләүсе төбәк законы проектын тикшереү булып үтте. Тикшереү үҙәгенә күп фатирлы йорттар һәм студент ятаҡтары ихаталары биләмәһендәге магазиндарҙа һыра һатыуҙы тыйыу тураһындағы пункт эләкте. Ҡатнашыусылар, берҙән, был осраҡта башҡа алкоголле эсемлектәрҙән һыраны айырып ҡарамаҫҡа, барыһын да тыйырға, икенсенән, "ихата биләмәһе" төшөнсәһен аныҡларға кәрәк тигән тәҡдим әйтте.

✓2019 йылдың башынан Башҡортостандың суд приставтары 214 мең самаһы бурыслыға Рәсәй биләмәһенән ситкә сығыуҙы тыйған. Быға кредит һәм алимент, ЮХХДИ штрафтары һәм һалым буйынса бурыстар сәбәпсе. Билдәләнеүенсә, әгәр штраф буйынса бурыс 30 мең һум һәм унан күберәк икән, сәйәхәткә рөхсәт бирелмәй. Ағымдағы йылдың биш айында приставтар сит илгә сығыуҙы сикләү тураһында 110 мең ҡарар сығарған.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ЗАМАН ШАУҠЫМЫ УЛ...

## интернет донъяһына китеп барыуыбыҙ

**Мөнәсәбәт ҡороу, бәйләнештәр булдырыу - оло хеҙмәт, әммә бөгөн улар кәрәк тә түгел кеүек. Ә нимәгә ул? Диңгеҙҙә балыҡтар күп булған кеүек, ерҙә лә кешеләр күп. Береһе менән дуҫлаша, һөйләшә, аралаша алмаһаң, эргә-тирәлә башҡалары етерлек. Ысынында, бөгөн хатта әхирәт булышыуға, серләшеүгә мохтаж тигән ҡатын-ҡыҙҙар араһында ла артыҡ яҡынлыҡ юҡ. Йән дуҫ булыу, тоғролоҡ һаҡлау тигән төшөнсәләр онотола бара. Сөнки хәҙер барыһы менән дә интернет аша аралашабыҙ. Һөйләшеү, фекерләшеү өсөн яҡын танышлыҡ та кәрәкмәй. Интернетҡа инеп, теләгән темаға бәхәс ҡороп, быу сығарып әрләшеп, яңы фекерҙәр ишетеп, мәғлүмәттәр алып була...**

Әбит бөтә ошо мөмкинлектәр кешегә дуҫ һайлауға ла, ишен табыуға ла, башҡалар менән мөнәсәбәт ҡорорға өйрәнеүгә лә тотҡарлыҡ яһай. Интернет донъяһындағы аралашыуҙарға өҫтөнлөк биргән кеше эргәһендә һөйгән йәре йәки дуҫы булғанда ла, улар менән мөрхәтһенмәçкә күнегә. Бына бит, шул сайтта аҡыллыраҡ кеше бар, быныӊ фотоһы һоҡланғыс, быныӊ яҙмалары ҡыҙыҡлы, тип уйлаясаҡ ул. Кемдәрҙеңдер шәхси тормошон, сәйәхәттәрен, шөғөлдәрен ҡарап, күҙәтеп, үҙенеӊ йәшәйешен онотоп ебәрергә лә мөмкин әле. Бына шулай, ноутбук, планшет экрандары аша туҡтауһыҙ тышҡы ҡуҙғытҡыстар атакаһына дусар булабыҙ, бер аяғыбыҙ менән асылдағы йәшәйешебеҙҙә торһаҡ та, икенсеһе менән шул интернеттағы донъяға китеп барғандайбыҙ. Сөнки унда варианттар, мөмкинлектәр күберәк һәм киңерәк кеүек... Тормошобоҙҙоӊ әле нисек икәнен күрмәйбеҙ, ә нисек булмағанын бик яҡшы тоябыҙ, сөнки сағыштырабыҙ...

Шәхси тормошон бөтөн халыҡ күҙе алдына сығарырға ла ғәҙәтләнеп алды бәғзеләр. Ундайҙар нимә эшләһә лә, эшләмәһә лә, барыһын да интернетҡа һалырға ғәҙәтләнде. Кейем алһа ла, аш бешерһә лә, никахлашһа ла, кеше тыуһа ла, үлһә лә. Иғтибарға мохтажмы улар шулай, әллә үҙ-үҙҙәрен раçлап маташыуҙарымы? Асылда, был кешенеӊ шәхси "мин"енеӊ тарҡалыуылыр ул. Уныӊ үҙе бер айырым донъя, тулы, камил бөтөнлөк булыуҙан туҡтауы. Ул хәҙер массаға эшләй, уныӊ марионеткаһына әйләнгән. Шул массаныӊ ысын булған йәки булмаған хуплауы, лайктары, маҡтауҙарына мохтажлыҡ кисерә ул. Ә масса иһә шул тиклем яһалма. Рәхәтләнеп алдай, ҡоторта, ялағайлана...

Интернетҡа шәхси тормошобоҙҙо сығарып, беҙ уны идеал итеп күрһәтергә тырышабыҙ. Йәнәһе, ҡарағыҙ, бына мин иртәнсәк йүгерәм, бына тренажерҙа баçып торам, бына мине һөйгәнем үбеп уята, бына ул сәскә алып ҡайтҡан, бына минеӊ улымдыӊ маҡтау ҡағыҙҙары, бына ҡыҙымдыӊ көндәлегендәге баһалары... Ғәҙәттә,



быларҙы тормоштары ысынында идеаль булмағандар, эске донъялары, ҡаҙаныштары, хеҙмәттәре (һ.б.) менән ҡәнәғәт булмағандар ҡуя һымаҡ. Уларға ошо мәлдәр, ошо күп көс түгеп яһап алған, әллә ниҙә бер өлгәшкән мәлдәре шундай танһыҡ һәм ғәзиз, һәм улар быны барыһына ла күрһәтергә тырыша. Тимәк, улар хистәргә, яҡшы мәлдәргә, бәхеткә һыуһап йәшәй. Ни өсөн берәү ҙә интернетҡа илап ҡыҙарған йөҙөн һалмай? Йәки төнгө сәғәт 3-тә иçерек ире менән ғауғалашыуын тәфсирләп яҙмай? Йәки эш хаҡыныӊ етмәүе, балаларыныӊ ауырыуы, етәксеһен яратмауы тураһында аноним булып ҡына ғына ташлайҙар? Сөнки былар уныӊ тормошонда былай ҙа етерлек. Ул бәхетле мәлдәргә мохтаж, шул мәлдәрен барыһына ла күрһәтеп, яһалма, уйҙырма булһа ла эмоциялар ала. Быныӊ өсөн уны ғәйепләп тә булмай. Ә инде йәшәйештә теләгәненә өлгәшә алғандар йәки үҙ халәттәре менән ҡәнәғәт булған, башҡаларһыҙ ҙа камиллыҡ кисерә алғандар бәхеттәрен, шатлыҡ-ҡыуаныстарын йәшерә, улар менән шым ғына ләззәтләнеүҙе хуп күрә.

Беҙҙең заман лайктар менән һайлау, сағыштырыу, үлсәү заманы булып сыҡты. Быға тиклем бер заман да яҡшы һәм яманды, матур һәм насарҙы, изге һәм яуызды алыçтан тороп, бары ҡарап-уҡып ҡына баһаламаны һәм баһаламаған. Постар ҡуйған һәм комментарийҙар яҙғандарҙыӊ кем икәнен дә, ниндәй йәшәйеш алып барғанын да, психик торошо ҡалай икәнлекте лә белмәйбеҙ. Ә инде ул кешенеӊ әхлаҡи, рухи йөҙө хаҡында һүҙ ҙә юҡ. Һәм беҙ шул билдәһеҙ, ят, алыçта булған йәки таныһаҡ та яҡын аралашмаған кешеләрҙеӊ фекеренә, хуплауына мохтаж. Был - рухи тарҡалыш, йәғни деградация.

Күптән түгел Япония йәштәренең интернет, компьютер донъяһына башкөллө сумып, унан йотолоп, йәмғиәт, кешелек өсөн юҡҡа сығыуҙары хаҡында тапшырыу ҡарағайным. Унда хәҙер үҙ-ара мөнәсәбәт тотоу, парлашыу, ғаилә ҡороу алға ҡуйылмай икән. Мөнәсәбәттәр өҫтөндә эшләргә теләмәгән, аралашыуға, бер-береңде тойоуға күнекмәгән, хатта ул төшөнсәләрҙе онотҡан кешеләр виртуаль донъяла "йәшәй". Улар өсөн махсус программалар булдырылған һәм был мәхлүктәр шул программаларҙы һатып ала. Ундағы донъя шундай идеаль! Тәбиғәте лә матур, кешеләре изге, өйҙәре шәп һәм башҡалар. Унда улар бер насар ҡараш та күрмәй, йә насар һүҙ ишетмәй. Нимә әйтһәләр, йә яҙһалар ҙа теге яҡтағылар (булмаған кешеләр, яһалмалар, фейктар) күтәреп ала, хуплай, маҡтай. Ул донъяла хатта быларҙыӊ парҙары ла бар. Шулай уҡ идеаль төçлө һәм холоҡло ир (ҡатын) был кешенеӊ интернетҡа ингәнен көтөп кенә тора. Был әҙәмгә теге яҡтыӊ бер талаптары ла юҡ, йәғни бындағы мөнәсәбәттәр өсөн аҡса түләүҙән башҡа эмоциональ көс һалырға кәрәкмәй. Көймәйһеӊ дә, ҡайғырмайһыӊ да, көнләшмәйһеӊ дә, бары "яратаһыӊ һәм яратылаһыӊ" ғына.

Япониялағы миçал беҙҙеӊ йәмғиәттә лә юҡ түгел. Интернет аша танышҡан "мөхәббәттәре" менән әллә нисә йылдар яҙышҡан ҡатын-ҡыҙҙар, ир-егеттәр етерлек. Был кешеләрҙеӊ күптәре махсус ошо эш менән шөғөлләнгән вампирҙар менән аралашыуын, үҙҙәренеӊ был кешенеӊ ошондай командаһында унынсы-ун бишенсе булыуын аӊламай ҙа. Әллә күпме ваҡыттарын, тойғоларын әрәм итәләр. Шул донъяға ҡапланып, эргәһендәге тере донъяны күрмәйҙәр, күҙгә элмәйҙәр.

Балаларҙыӊ Бәйләнештәге, Фейсбуктағы, Инстаграмдағы донъяһын алайыҡ. Улар хәҙер бөтөн кәӊәштәрҙе лә интернеттан ала. Әллә ниҙә бер бирелгән һорауҙарына ата-әсәләрҙеӊ дә яуаптары шәп: "Гугли". Бешереү рецептары - шунан, бала ҡарау ысулдары- шунан, ҡул эштәренә өйрәнеү - шунан, дәрес әҙерләү күптән шунан. Бынан тыш, 12-15 йәшкә етһә, беҙ уларҙыӊ интернет тормошон тикшермәйбеҙ ҙә. Сөнки үҙебеҙ балаларыбыҙ өсөн шул интернеттан ҡыҙыҡһыҙыраҡҡа әйләндек йәки әйләнә барабыҙ. Ә тора-бара? Киләсәктә?..

Был хаҡта, беҙҙе йотоп барған интернет донъяһы тураһында күп һөйләргә була. Әммә быны үҙ аҡылы менән тойоп аӊламағанға вәғәз уҡыу стенаға борсаҡ атыу менән бер генә буласаҡ. Әйҙәгеҙ, һынамаҡҡа ғына бер көн интернетҡа инмәй ҡарағыҙ әле. Яҡындарығыҙ менән күҙгә-күҙ ҡарашып ултырып һөйләшегеҙ, балаларығыҙҙыӊ хәбәрен тыӊлағыҙ, ҡунаҡта өҫтәл аçтында телефонға текләп ултырмағыҙ. Үҙегеҙ менән бер өйҙә йәшәгән кешене тыуған көнө менән инстаграм аша ҡотламағыҙ, ә ҡосаҡлап-һөйөп тәбрикләгеҙ. Нимәгәлер ризаһыҙлығығыҙҙы битегеҙҙәге ҡырҡыу, текә постар менән белдермәгеҙ, ә проблеманыӊ үҙегеҙҙә икәнен аӊлап, ысынлап хәл итегеҙ. Йомғаҡлап әйткәндә, бөгөнгөбөҙҙә, реаль донъябыҙҙа йәшәйек, ысын мәғәнәһендә үҙ-ара аралашайыҡ, мөнәсәбәттәр ҡорайыҡ, дуçлашайыҡ. Ә интернетты иһә бары файҙа өсөн генә ҡуллана беләйек.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда эшһеҙлек пособиеһыныӊ уртаса күләме апрелдә 5 909 һум йәки эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы дәүмәленән 63,1 процент булған. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда эшһеҙҙәр һаны 87,1 меӊ кеше тәшкил итә. Уларҙыӊ 24 меңгә яҡыны - рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр. 2018 йылдыӊ ноябрендә - 2019 йылдыӊ февралендә эшсе көстәрҙе һайланма тикшереү мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала иҡтисади яҡтан әүҙем халыҡ һаны - 1,9 миллион кешенән ашыу.

✓Башҡортостанда республика Гигиена һәм эпидемиология үҙәгенә 1250 кеше тәндән алынған талпанда энцефалит һәм боррелиоз вирусы бармы-юҡмы икәнен тикшереүҙе һорап мөрәжәғәт иткән. Бөгөнгә планлаштырылған 4 меӊ гектар биләмәнеӊ 1,8 меӊ гектарында акарицидлы эшкәртеү үткәрелгән, тип хәбәр иттеләр Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау һәм кеше именлеге өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттеӊ республика буйынса идаралығында.

✓Йыл башынан илдә эшләгән һәр кем диспансерлаштырыу үтер өсөн өс йылға бер тапҡыр отпускыһына өҫтәмә көн алырға хоҡуҡлы. Пенсия алды йәшендәгеләр иһә ике көн. 6 майҙа ошо медицина тикшереүен үткәреүҙеӊ яӊы тәртибе үҙ көсөнә инде. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тәҡдименә ярашлы, 40 йәштән өлкәндәр йыл һайын тикшерелергә тейеш. 18-39 йәшлектәр өсөн медицина тикшереүен үтеү ваҡыты әүәлгесә һаҡлана. Рәсәйҙеӊ Хеҙмәт министрлығы диспансерлаштырыу үтеү өсөн йыл һайын отпускыға тағы бер көн өҫтәү тураһында ҡануниәткә төҙәтмә әҙерләй.

✓Ошо арала Башҡортостанда 14 тәбиғәт янғыны теркәлгән. Урман фондыныӊ 104,9 гектар ере уттан зыян күргән. Әле 35,1 гектар майҙан яныуын дауам итә. Уларҙыӊ икәүһе - Белорет районында. Йылайыр районында ут урман фондыныӊ 8 гектар биләмәһен ялмап алған. Янғын миҙгеле башланғандан алып Башҡортостанда бөтәһе 105 тәбиғәт янғыны сыҡҡан, икәүһе - махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләрендә. 1377,76 гектар урман уттан зыян күргән.

✓Республика Хөкүмәте вице-премьеры Артур Әхмәтханов ҡапыл донъя ҡуйҙы. Уҙған йылдыӊ октябрендә ул вице-премьер вазифаһына тәғәйенләнде. Республика Хөкүмәтендә ул хәүефһеҙлек, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы, Юстиция буйынса дәүләт комитеты, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы менән үҙ-ара эш итеү мәсьәләләре өсөн яуаплы ине. Әхмәтханов Артур Фәрүәз улы 1962 йылдыӊ 15 ноябрендә БАССР-ҙыӊ Салауат районында тыуған.

ҠЫҪҠАСА

## ҺАЙЛАУ ҠАСАН?

✓ **Республика Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары 30 майҙағы пленар ултырышта Башҡортостан Башлығын һайлау тураһында ҡарар ҡабул итәсәк. Уны 8 сентябргә тәғәйенләү күҙ уңында тотола.** Һайлау тураһында республика кодексының 10-сы статьяһына ярашлы, республика Башлығы вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатҡан осраҡта, һайлау сентябрҙең икенсе йәкшәмбеһендә уҙғарыла. Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, быйылғы һайлау республика тормошонда мөһим ваҡиға булып тора, сөнки республиканың артабанғы социаль-иҡтисади үҫешен күп осраҡта юғары вазифалы кеше билдәләй. "Башҡортостан Башлығы биш йылға һайлана. Ул 30 йәштән өлкәнерәк Рәсәй Федерацияһы гражданы булырға, федераль законның вазифаға дәғүә иткән кандидаттарға ҡуйған талаптарына тап килергә тейеш. Һайлау йәшерен тауыш биреү юлы менән тиң һәм тура һайлау хоҡуғы нигеҙендә уҙғарыла", - тип билдәләне парламент спикеры.

✓ **Башҡортостанда тәүгә "Йәйләү" башҡорт ҡымыҙы этно-фестивале ойоштороласаҡ. Ул 27-28 июлдә Өфөлә "Аҡбуҙат" ипподромында уҙа. Сараны ойоштороусылар - Башҡортостан Хөкүмәте, Ауыл хужалығы министрлығы, "Аҡбуҙат" ипподромы, UMAY Ethno Production.** Фестивалдең маҡсаты - "Башҡорт ҡымыҙы" брендын популярлаштырыу, этно-сараны бөтөнләй яңы форматта үткәреү. Сараға бөтә республиканан ҡымыҙ бешеүселәр саҡырылған. Ҡымыҙ-фест майҙансығында тирмәләр һәм ихаталар ҡороу, оҫталыҡ дәрестәре, ауыл хужалығы продукцияһы һәм кәсепселәр күргәҙмәләре, "Ашмаркет" аш-һыу фестивале, музыкаль этно-фестиваль, ат сабыштары, балалар өсөн төрлө саралар ойоштороу, ҡымыҙ менән һыйлау күҙаллана. Фестиваль барышында ҡымыҙ бешеүселәрҙең һөнәри съезы уҙғарыла. Ҡыҙыҡһынған кешеләр һәм компаниялар ғаризаны uethno@gmail.com электрон почтаһына ла ебәрергә мөмкин.

✓ **Баш ҡалала "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проекты сиктәрендә "Өфө-Аэропорт" трассаһын ремонтлау дауам итә.** Дөйөм алғанда 252 мең квадрат метрҙа юл ҡырылып, яңы асфальт-бетон ҡатламы һалынасаҡ. Әлеге ваҡытта 8800 тонна ҡатнашма һалынған да инде. Һуңынан юлдарға термопластиктан юл билдәләре төшөрөләсәк. Килеп тыуған уңайһыҙлыҡтарҙы кәметеү маҡсатында, ҡала халҡының фекерен иҫәпкә алып, ремонт графигы төҙөлгән. Ҡайһы бер эштәр төнөн һәм ял көндәрендә башҡарыласаҡ. Процесты тиҙләтеү маҡсатында юл хеҙмәттәре ике сменала эшләй. Шул уҡ ваҡытта, пик сәғәттәрендә Пугачев һәм Затон күперҙәре, шулай уҡ Березовка ауылы һәм Өфө районының Нижегородка ауылы аша альтернатив юлдар менән файҙаланырға мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ҒАИЛӘ, БАЛАЛЫҠ...



**Өфөлә "Бала саҡ векторы-2019" Бөтә Рәсәй конгресы булып үтте. Унда илдең 85 төбәгенән 700-ҙән ашыу кеше ҡатнашты. Ике көн дауамында улар демографик сәйәсәт, һәҙөмтәле төбәк ғаилә сәйәсәтен булдырыу, ғаилә институтына дәүләт ярҙамы сараларын камиллаштырыу, төбәктәрҙә балалыҡтың заманса инфраструктураһын ойоштороу мәсьәләләрен тикшерҙе.**

Конгресс барышында Бала хоҡуҡтары буйынса вәкилдәрҙең 16-сы съезы һәм III Ата-әсәләр форумы уҙғарылды. Конгресс эшен асып, Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Анна Кузнецова Владимир Путиндың сәләмләүен уҡып ишеттерҙе. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров үҙ сығышында: "Хәҙер балаларыбыҙ күп кенә өлкәндәрҙән яҡшыраҡ һәм аҡыллыраҡ, ләкин, ҡыҙғаныска ҡаршы, бөгөн уларға агрессив мәғлүмәт ағымы менән осрашырға тура килә. Бала ҡайһы берҙә виртуаль донъяла, социаль селтәрҙә йәшәй. Был - ҙур проблема, агрессив мәғлүмәт яланы буллинг кеүек күренештәр тыуҙыра. Беҙгә шуға ҡаршы көрәшергә кәрәк. Бөгөн балаларыбыҙҙың күңеле өсөн даими көрәш бара", - тине. Баланың әхлаҡи донъяһы мәктәптә биҙәү сифатына, ундағы стеналарҙың ниндәй булыуына ғына бәйле түгел, тип билдәләне Радий Хәбиров һәм шулай тип дауам итте: "Яңы мәктәптәр төҙөрбөҙ, әлбиттә, ләкин бөгөн идеологик эш, ғаиләлә тәрбиә биреү кәрәк, беҙ балаларыбыҙҙың күңеле өсөн көрәшергә тейешбеҙ. Хәҙер балалар сәләмәтерәк була бара тип тә раҫлай алмайбыҙ. Уҡыусыларҙы диспансерлаштырыу һөҙөмтәле булырға тейеш, беҙ медицина тикшереүен йөкмәткелерәк итеү, беренсе этапта баланың теге йәки был сирен асыҡлау өсөн алымдар эҙләйбеҙ".

Радий Хәбиров фекеренсә, бөгөн төп проблема - тыуым. "Ҡатын-ҡыҙҙар бала тапһын, ғаиләләрҙә балалар күберәк булһын өсөн нисек шарттар булдырыу тураһында төптән уйларға кәрәк. Тыуым һәм күп балалы ғаилә - илебеҙҙең йәшәү нигеҙе. Был мәсьәләне аҡса менән генә хәл итеп булмай. Демографияны яҡшыртыу буйынса өҫтәмә механизмдар өҫтөндә бергәләп уйлау зарур", - тине Радий Хәбиров. Башҡортостан етәксеһе әйтеүенсә, республикала үҫенсәлекле балаларға ҙур иғтибар бүленә, төбәк "Беҙ үҙебеҙҙекеләрҙе ташламайбыҙ" принцибы буйынса йәшәй, төрлө сәбәптәр буйынса сирле булып тыуған, мөмкинлектәре сикләнгән балалар - Башҡортостандың бер өлөшө.

## ПУТИН КИЛӘ

**Июлдә Владимир Путиндың Башҡортостанға сәфәре көтөлә. Президенттың 9-14 июлдә Өфөлә Халыҡ-ара олимпия комитеты булышлығында уҙғарылған 53-сө Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындарына килеүе күҙ уңында тотола.**

Өфөлә дәүләт башлығын "Торатау" геопаркы проектының концепцияһы менән таныштырыу ҙа ҡаралған. Алдан хәбәр ителгәнсә, парк дүрт яҡтан уратып алған районды 3,9 мең квадрат метр территорияһын биләргә, Ғафури районындағы Тоҙйылғаны ("Красноусол" шифаханаһы биләмәһендә урынлашҡан халыҡ-ара әһәмиәттәге объект) һәм Стәрлетамаҡ районындағы Йөрәктау шиханын үҙ эсенә алырға тейеш. Эшкәртелгән Шахтау шиханы ла паркка индерелә. Парк инеү сикләнгән һәм инфраструктура, сервис урынлашҡан рекреацион зоналарға бүленә. Йәйәүлеләр, велосипед һәм автомобиль юлдары паркта төп файҙаланыу объекттары булырға тейеш. Туристарға махсус экскурсия маршруттары тәҡдим ителә. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, геопарк проекты 2020 йылдың көҙөнә әҙер була. Ул саҡта "Торатау"ҙы халыҡ-ара статус алыу өсөн ЮНЕСКО эгидаһына индереүгә ғариза бирергә мөмкин. Әле Башҡортостандың тәүге геопаркы - "Янғантау" ошо процедураны үтә башланы. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров 2018 йылдың 12 декабрендә "Торатау" геопаркын булдырыу тураһындағы указға ҡул ҡуйғайны.

## ИМТИХАНДАР ЕТӘ

**Башҡортостанда дәүләт йомғаҡлау аттестацияһының төп этабында 62 926 сығарылыш уҡыусыһы ҡатнаша. Ошо хаҡта республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә республиканың мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Илдар Мәүлитбирҙин хәбәр итте.**

Сығарылыш уҡыусылары өсөн дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы төп дәүләт имтиханы һәм Берҙәм дәүләт имтиханы формаһында үткәрелә.

"Әле Башҡортостанда Берҙәм һәм төп дәүләт имтихандарын уҙғарыуҙың төп осорҙарына әҙерлек бара. Берҙәм дәүләт имтиханының төп этабы - 27 майҙан 1 июлгә, ә төп дәүләт имтиханы 24 майҙан 2 июлгә тиклем дауам итә. Тәүгеһенә - 19 787 ҡатнашыусы, икенсеһенә 43 139 уҡыусы теркәлгән", - тип хәбәр итте Илдар Мәүлитбирҙин. Уның һүҙҙәренсә, министрлыҡ Башҡортостандың федераль кимәлдәге "йәшел ышаныс зона"һына инеүен тәьмин итергә тейеште "юл картаһы"н әҙерләгән (әле республикабыҙ "һары зона"ла). Мәҫәлән, ағымдағы йылда төбәк йәмәғәт күҙәтеүселәре һанын - 43-тән 100 кешегә, муниципаль йәмәғәт күҙәтеүселәрен - 1500-ҙән 1700 кешегә, ситуация үҙәктәрендә эш урындары һанын 70-тән 150-гә тиклем арттырыу ҡаралған. Берҙәм дәүләт имтиханының төп этабы география һәм әҙәбиәт буйынса тестарҙан башлана. Профилле һәм базалы математика бер көнгә - 29 майға тура килә. Сығарылыш уҡыусылары 3 июндә тағы бер мотлаҡ фәндән - рус теленән һынау тота.

## ПЕНСИЯҒА ӨҪТӘҮ

**Майҙа эшләмәгән пенсионерҙарҙың пенсияһына социаль өҫтәмә яңынан иҫәпләнә, тип хәбәр итә Рәсәй Пенсия фондының төбәк бүлексәһе. Ҡануниәткә ҡабул ителгән төҙәтмәләргә ярашлы, 2019 йылдың 1 ғинуарынан башлап, пенсияларҙың һәм бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләүҙәрҙең бөтә индексациялары пенсияны йәшәү минимумынан арттыра.**

Шулай итеп, пенсионерҙың пенсияны, социаль түләүҙәрҙе һәм башҡа ҡайһы бер дәүләт ярҙамы сараларын үҙ эсенә алған килеме тәүҙә социаль өҫтәмә менән йәшәү минимумына тиклем еткерелә, ә һуңынан үткәрелгән индексацияларҙың суммаһына арттырыла. Закон 2019 йылдың 1 ғинуарынан элек үткәрелгән индексацияларҙың суммаһынан өҫтәмәне күҙ уңында тота: ғинуарҙа эшләмәгән пенсионерҙарҙың страховка пенсияны - 7,05 процентҡа, февралдә айлыҡ аҡсалата түләүҙәр 4,3 процентҡа индексацияланды, апрелдә дәүләт тәьминәте буйынса пенсиялар 2 процентҡа арттырылды. Май пенсияһы менән бергә республиканың 143 мендән ашыу федераль социаль өҫтәмә алыусыларына ҡабаттан иҫәпләнгән пенсия ошо индексацияларҙы иҫәпкә алып түләнә. Өҫтәмәне арттырыу ғаризаһыҙ, Пенсия фонды идарлығына мөрәжәғәтһеҙ тормошҡа ашырыла, тип хәбәр итте Рәсәйҙең Пенсия фонды идараһы ағзаһы, Башҡортостан буйынса идарасы Фоат Хантимеров.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Айгөл Әхмәтшинаның Рәсәйҙәге тәүге концерты аншлаг менән үтте. Донъя опера сәхнәләрендә уңышлы сығыш яһаған "Ковент-Гарден" театрының (Лондон) 22 йәшлек солисы Башҡортостандың симфоник оркестры оҙатыуында тыуған Өфө ҡалаһында йырланы. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры залы шығырым тулы ине. Йырсы һүҙҙәренсә, уның концертынан килгән гонорар үҙе уҡыған Өфө сәнғәт училищеһына музыка ҡоралдары һатып алыу өсөн күсерелә.

✓Рәсәйҙә балалар пособиеһын алыу ҡағиҙәләре үҙгәрҙе. Хәҙер беренсе һәм икенсе балаға пособие алыуға ғаризаны ата-әсәнең даими теркәлгән урынынан тыш, һәр ҡала бирергә мөмкин. Элек пособиелар прописка урыны буйынса ғына түләнә ине. Хәҙер уны алыу өсөн хатта ваҡытлыса теркәлеү ҙә кәрәкмәй. Әле беренсе һәм икенсе бала өсөн пособиеларҙы 400 мең тирәһе ғаилә ала.

✓24-27 августа Өфөлә IV "Көмөш Аҡбуҙат" халыҡ-ара кинофестивале ойоштороласаҡ. Фестивалдә ҡатнашыу өсөн ғариза тултырырға һәм фильмды 2019 йылдың 15 июненән дә һуңға ҡалмайынса тапшырырға кәрәк. Ғариза формаһы һәм ҡатнашыу шарттары кинофестивалдең рәсми сайтында баҫылған.

✓"Башҡортостан Республикаһы әсәләре" йәмәғәт ойошмаһы инициативаһы менән Республика перинаталь үҙәге территорияһында "Әсәләр аллеяһы" барлыҡҡа килде. Был көндө унда социаль тотороҡло һәм актив ғаиләне, ата-әсәлек яуаплылығын, ғаилә ҡиммәттәрен көүҙәләндереүсе емеш ағастары ултыртылды, йөрәк рәүешендәге стела ҡуйылды.

✓Өфөлә, Үҙәк почтамтта, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең 100 йыллығына арналған маркаға мисәт һуғыу тантанаһы булды. Өфөнән тыш, ошондай тантана Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта ла үтте - был ҡалалар өсөн махсус мисәттәр айырым әҙерләнгәйне. Мәскәү менән телекүпер ойошторолдо. Өфө почтамты һәм Мәскәүҙең Әҙәбиәтселәр йорто араһында ҡуйылған телекүпер ярҙамында сарала ҡатнашыусыларҙың бер-береһе менән аралашыу мөмкинлеге булды.

✓Баш ҡаланың "Вечерняя Уфа" гәзите ойошторолоуға 50 йыл тулды. Уның тәүге һаны 1969 йылдың 1 ғинуарында донъя күрә. Ошо күркәм юбилейға арналған мәҙәни сара 20 майҙа Рус дәүләт академия драма театрында үтәсәк. Инеү буштай.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Ниһайәт, оҙайлы булып тойолһа ла, күңелдә иң изге хәтирәләр ҡалдырған май байрамдары ла артта ҡалды. Уларҙың иң тулҡынландырғаны, әлбиттә, Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең сираттағы йыллығы тантанаһы. Өфө ҡала хакимиәтенең кәңәшмәһе лә тап ошо датаның йомғаҡтарын барлауҙан башланды. "Быйыл "Үлемһеҙ полк"та 112 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. Киләһе йыл оло юбилей - Еңеүҙең 75 йыллығы байрам ителәсәк. Уға бөгөндән ныҡлы, ентекле әҙерләнә башларға, әүҙемселәрҙе йәлеп итергә кәрәк", - тип белдерҙе Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин.**

# БАЙРАМДАР ҮТТЕ

## Хәҙер йүгерәбеҙ!

Ошо арала баш ҡалала тағы ла бер нисә киң күләмле сара үткәреү планлаштырыла: 19 майҙа Бөтә Рәсәй "ЗаБег.РФ" Бөтә Рәсәй ярыммарафоны үтәсәк , 25 майҙа "Яҙғы бал" ойоштороласаҡ, 26-һында инде традицион "1000 велосипедсы көнө" фестивале уҙасаҡ, 30 майҙа "Ватан" этнопаркы майҙанында ветерандарҙың "Хәрби бейеклек" патриотик йырҙар фестивале башланасаҡ. Быйыл ул Афғанстандан совет ғәскәрҙәрен сығыуҙың 30 йыллығына арнала. Был сараларҙың барыһын да әҙерләү, ойоштороу һәм үткәреү ҡала райондары хакимиәттәре башлыҡтарына, ҡыҙыҡһыныусы ведомстволар етәкселәренә йөкмәтелде һәм уларҙың шәхси контроленә тапшырылды.

Ҡыҫҡаһы, байрамдар тамам, хәҙер инде йүгерергә лә йүгерергә! Йүгерергә тигәндән, кәңәшмәнең төп темаларының береһе тап ошо темаға ҡағылды. "Өфө марафоны" директоры Владислав Литвинчук белдереүенсә, Бөтә Рәсәй ярым-марафоны бер үк ваҡытта илдең 19 ҡалаһында башлана. Өфөлә ул быйыл икенсе тапҡыр ойошторола, 2018 йылда барлығы 1300 кеше ҡатнашһа, быйыл стартҡа сығыусылар һаны 2 меңдән ашыу булыр, тип көтөлә. Йүгереүселәргә дүрт дистанция тәҡдим ителә: профессионалдарға - 21 километр, һәүәҫкәрҙәргә - 10, яңы башлаусыларға - 5 һәм балаларға - 2. Һәр ҡатнашыусы Өфө ҡалаһы символы төшөрөлгән футболкаға, ә финишта үҙенсәлекле миҙалға эйә буласаҡ. Әйткәндәй, Өлфәт Мансур улы хакимиәт чиновниктарына тамашасы булып барырға ғына түгел, ә йүгерергә тәҡдим итте. Яҡшыраҡ булдырырға теләйбеҙ икән, йүгерергә лә тура киләсәк, сөнки быйыл 19 ҡала араһында тәүге 10-ау иҫәбенә инергә маҡсат ҡуя ойоштороусылар, ә беҙгә беренсе булыу өсөн тырышырға кәрәк.

Кәңәшмәнең икенсе төп темаһы булып хәрби хеҙмәткә саҡырыу мәсьәләһе торҙо. Был хаҡта ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов сығыш яһаны. Әгәр ошоға тиклем төп призыв составы комиссияһы менән республиканың хәрби комиссары үҙе етәкселек итһә, быйылдан башлап, Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың Указына ярашлы, был вәкәләт ҡала хакимиәте башлығына бирелә, ә ҡала райондары башлыҡтары резерв состав өсөн яуаплы буласаҡ. Рөстәм Фәрит улы белдереүенсә, Өфө егеттәре Ҡоралл Көстәрҙең төрлө төрҙәрендә: ҡоро ер ғәскәрҙәрендә, хәрби-диңгеҙ флотында, стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәрендә, һауа-десант ғәскәрҙәрендә, һауа-йыһан көстәрендә хеҙмәт итә. Быйылғы яҙғы кампанияға 897 кешегә наряд төшөрөлгән, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 34 кешегә кәмерәк.

Призыв йәшендәге граждандарға мәғлүмәт еткереү буйынса эш көн һайын алып барыла, мәҫәлән, Йәмәғәт именлеге үҙәге хеҙмәткәрҙәре хәрби комиссариаттар вәкилдәре, эске эштәр хеҙмәткәрҙәре менән берлектә призыв йәшендәге 925 граждандың йәшәгән ерендә булып, 679 повестка тапшырған. Шулай уҡ район хакимиәттәре хеҙмәткәрҙәре лә фатирҙарға барып, повесткалар тапшырыуға йәлеп ителгән.

Ғөмүмән, Башҡортостан егеттәре элек-электән Рәсәй армияһының төп көстәренең билдәле бер өлөшөн алып торған. Улар иң абруйлы ғәскәрҙәргә хеҙмәт иткән, Ватан именлеген ышаныслы һаҡлаған. Бөгөн дә Волга буйы федераль округының башҡа төбәктәре менән сағыштырғанда, республикабыҙҙан хәрби хеҙмәткә саҡырылыусылар күберәк. Улар ҡулында - ил яҙмышы, әммә ил дә уларҙың яҙмышын, ғүмерен һаҡлауға яуаплы ҡараһын ине.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

АФАРИН!

# КИЛӘСӘК УТРАУЫНДА

**(Башы 1-се биттә).**

308-се башҡорт балалар баҡсаһында "Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһе беренсе тапҡыр үткәрелде һәм унда алты команда ике һайлап алыу турында һынау тотто. Тәүҙә ҡатнашыусылар Башҡортостан, тыуған ил, Ватан тураһындағы шиғырҙарҙы яттан һөйләне, һуңынан Мостай Кәрим ижады менән таныштырҙы. Йәмғеһе алты команда ярышты: әсәһе Зөлфиә менән Салауат Абдуллиндар, атаһы Руслан менән Ләйсән Биккининдар, әсәһе Луиза менән Ибраһим Мәзитовтар, өләсәһе Татьяна менән Виктория Виноградовалар, олатаһы Салауат менән Усман Кәримовтар, әсәһе Нурзилә менән Ильяс Кейекҡужиндар. Һәр команда ныҡлы әҙерләнеп килгәйне һәм жюри ағзаларына еңеүселәрҙе билдәләүе еңелдән булманы. Балаларҙың бөтәһе лә дөрөҫ интонация менән хисле, күңелдәргә үтеп инерлек итеп, һис тә хаталанмай һөйләне шиғырҙы. Иң бәләкәй ҡатнашыусы Усман Кәримовҡа 4 йәш, ул бәйгелә олатаһы менән шиғыр һөйләне. "Мин шиғыр һөйләргә яратам, тағы ла машина, конструктор һәм пластилин менән уйнай беләм", - тине малай әңгәмәләшкәндә. Ә бына 5 йәшлек Ләйсән Биккинина, конкурсҡа әҙерләнеүе ауыр булманы, шиғыр һөйләргә атайым өйрәтте, ти. Әйткәндәй, Биккининдар командаһы беренсе урынға лайыҡ тип табылды. Ә бына шиғриәт бәйгеһенең гран-прийын Ильяс Кейекҡужин һәм әсәһе Нурзилә яуланы. Ильясҡа биш йәш, ул шиғыр ҙа һөйләй, бейей ҙә.

"Йөрәк һүҙе"ндә өләсәһе менән килгән Виктория Виноградованың саф башҡортса тасуири итеп шиғыр һөйләүе тағы бер үҙенсәлекле күренеш булды. "Беҙҙә балаларына башҡорт телен өйрәтергә теләгән атай-әсәйҙәр килә. Ҡайһы бер милләттәштәр үҙ туған телен белмәй, әммә балаларының белеүен теләй. Бына бөгөн конкурста ҡатнашыусы өләсәй Татьяна Виноградованың атаһы башҡорт булған, ул үҙе, ҡыҙғаныҫҡа күрә, телде белмәй, әммә ейәнсәре Викторияны беҙгә алып килде, - ти 308-се Башҡорт балалар баҡсаһы мөдире Фәйрүзә Мосабирова. - Баш ҡаланың Октябрь районында башҡорт балалар баҡсаһы берәү генә, бөгөн беҙҙә 11 төркөмгә 425 бала йөрөй. Балаларға башҡорт халҡының йолалары, байрамдары, гөрөф-ғәҙәттәре тураһында өйрәтеп, күрһәтеп үҫтереү ниәтендә төрлө саралар ойоштороп торабыҙ. Ә был "Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһен беренсегә үткәрҙек һәм балаларға нәфис һүҙ оҫталығына эйә булыуҙан тыш, тыуған илгә ҡарата һөйөү тәрбиәләргә лә ярҙам итер, тип ышанабыҙ".

Әйткәндәй, балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре менән ата-әсәләр ҙә фекерҙәш булып сыҡты. "Был сара балалар күңелендә бәләкәйҙән шиғриәткә, туған телгә, тыуған илгә ҡарата һөйөү тыуҙырырға ярҙам итә. Бала менән аралашырға ваҡыт тапмаған атай-әсәйҙәр, олатай-өләсәйҙәргә яҡшы мөмкинлек бирә, ғаилә ағзалары араһында мөнәсәбәттәрҙе лә нығыта. Беҙ ошондай матур байрамдар ойоштороған балалар баҡсаһы етәкселегенә һәм тәрбиәселәргә рәхмәтлебеҙ", - тине Руслан Биккинин. Уның һүҙҙәрен өҫ балаһын да ошо балалар баҡсаһына йөрөткән Луиза Мәзитова ла ҡеүәтләне, балаларҙың талантлары асыуға бында ҙур иғтибар бүленеүенә лә шат ул. Бына шулай, милләтебеҙҙең киләсәге тәрбиәләнгән, күңелдәр ял иткән урын ул 308-се башҡорт балалар баҡсаһы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһе башланырҙан алда был баҡсала тәрбиәләнеүсе алты йәшлектәр Ильяс Ғибаҙуллин, Мөхәмәткәрим Мәзитов, Самира Ғилманова, Миләүшә Иҫәнголова менән ҡыҫҡа ғына әңгәмә ҡороп алдым. Улар бында нимә эшләүҙәре, ни өсөн балалар баҡсаһын яратыуҙары, үҙҙәренең көндәлек мәшәҡәттәре тураһында һөйләне, "Салауат", "Ирәндек" йырҙарын йырлап, "Ебегән" уйынын уйнап, хатта "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсына әҙерләгән сәхнәнән өҙөк күрһәтеп тә өлгөрҙе. Вайымлы атай-әсәйҙәр, олатай-өләсәйҙәр менән тығыҙ бәйләнештә эшләгән яҡшы педагогтар, тәрбиәселәр булғанда, балаларыбыҙ бына шулай талантлы ла, рухлы ла булып үҫә, тиген ышаныс нығынды күңелдә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Аҙ ҡанлылыҡтан

❖ Туҡранбаш (клевер луговой) С витаминына, башҡа матдәләргә лә бай. Уны ябыҡҡанда, аҙ ҡанлылыҡтан эсәләр. Анемия, С витамины етмәгәндә 1-2 ҡалаҡ туҡранбаш сәскәһен 1 стакан һыуҙа сәй кеүек бешерәһең һәм көнөнә 2-3 мәртәбә икешәр ҡалаҡ эсәһең. Был төнәтмә хәтерҙе лә яҡшырта.

## Аллергия

❖ Һалҡынға аллергия булһа, 100 грамм кесерткән (крапива) япрағына 75-әр грамм шинмәҫгөл (бессмертник), лаванда үләндәрен ҡушып болғатып, 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөләккә термоста төнәтергә. Иртән һөҙөргә һәм көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда яртышар стакан эсергә. Дауаланған саҡта 2 ай дауамында иртән ас ҡарынға активлаштырылған күмер ашарға (10 кг ауырлыҡҡа 1 таблетка иҫәбенән).

## Тире ауырыуынан

❖ Ваҡ һыҡты, ҡыҙыл таплы шешектәр барлыҡҡа килеү менән билдәләнгән тире ауырыуы дерматоз тип атала. Ул саҡта тире май биҙҙәрендә талпан була. Әрем (полынь) менән еҙ төймә (пижма) сәскәһен йыйып, иҙеп, һары май ҡушырға. Ҡайнап ултырған һыуҙа төнәтмәне бер аҙ тотҡас, ике ҡат марля аша һөҙөргә һәм артабан һыуытҡыста һаҡларға. Майҙы биттә 1-2 сәғәт торорға, салфетка менән һөртөп алырға. Бынан һуң сөйәл үләне (чистотел), монар көпшәһе (болиголов), алтын мыйыҡ (золотой ус) үләндәре төнәтмәләренең береһе менән битте йыуырға.

❖ Бынан тыш, әрем, еҙ төймә, кәнәфер онтағын ҡушып болғатып, һәр иртә һайын 1-әр балғалаҡ ошо порошокты ашарға һәм сөйәл төнәтмәһе эсеп ҡуйырға. Төнәтмә шулай әҙерләнә: 1 ҡалаҡ үләнгә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөләккә термоста ҡалдырырға. Ошо төнәтмәне иртәнсәк яртышар стакан эсергә лә кәрәк. Өс аҙна дауаланғандан һуң, ике аҙна ял итегеҙ. Ошонан һуң да биткә һыҡтылар сыға икән, ҡалған майға 5 трихопол таблеткаһы өҫтәп, һөртөргә кәрәк булыр. Мендәр тышын көн һайын алыштырып торорға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ Ниһайәт, Зәки Вәлиди урамында "Зәки - башҡорт терәге" тип яҙған Шәйехзада шағирға һәйкәл ҡуйыласағы хәл ителде. Салауат Юлаев эргәһендә. Бабич үҙе яҙған "Салауат ҡандай арыҫлан" янында.



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Һаҡмар йылғаһы үрендә йәшәгән ҡарағай-ҡыпсаҡтарҙа (Баймаҡ районы Билал ауылы) Аҙналыла кеүек үк, ҡыҙыл фон өҫтөнлөк алып тора. Һуғылған буй балаҫ буйлап ике-өс төрлө таҫма үтә.**

Балаҫ өсөн 4 төҫтәге йөн һайлана: төп ҡыҙыл төҫтән тыш, күк, һары, йәшел йәки йәшел, көрән, күк (шәмәхә). Башҡа төрлө варианттар ҙа осрай. Миҫал өсөн ике төҫтәге өлгөнө килтерергә була (балаҫ тар булғанға биҙәктәрҙең ҡабатланыу мөмкинлеге сикле):

*//ҡыҙыл (0,5) - [күк - ҡыҙыл - күк] (0,5) - ҡыҙыл (1,0) - [йәшел - һары - йәшел ] (1,0) - ҡыҙыл (0,5)//

*ҡыҙыл (0,5) - көрән (1,0) - ҡыҙыл (1,0) - йәшел (0,5) - ҡыҙыл (1,0) -[күк (0,5) - көрән (1,0) - күк (0,5)] - ҡыҙыл (0,5)//

Был өлгөләрҙә теш һәм "баҫҡыс" биҙәкле буйҙар һирәк осрай.

Һаҡмар йылғаһының түбәнге яғында, Ҡыуат ауылында йәшәгән түңгәүерҙәрҙә нигеҙ итеп алынған фон юҡ, шулай ҙа ҡайһы бер балаҫтарҙа ҡыҙыл йәки ҡара-көрән буйҙарға өҫтөнлөк бирелгәнлеге күренеп тора. 5-6 төҫтәге йөн, шул иҫәптән йәшел, һары, күк (зәңгәр), алһыу, аҡ төҫ ҡулланыла. Балаҫтың сите ниндәй туҡыма менән ҡаймаланған, шул төҫ төп төҫ булараҡ ҡулланыла. Мәҫәлән, 6 төҫтән торған балаҫта көрән, ҡыҙыл һәм һары төҫтәр ике тапҡыр, йәшел бер тапҡыр осрай. Ә күк төҫ йышыраҡ ҡулланылған, ул йә көрән, йә аҡ менән ҡушарлап килә. Аңлауығыҙса, балаҫтың ҡаймаһы күк төҫтәге туҡыма менән тегелгән. Рапортта:

//аҡ (0,5) - [йәшел/көрән - йәшел - көрән/йәшел - күк] (1,5) - һары (1,0) - ҡыҙыл (1,0) - [күк/аҡ - күк - аҡ/күк] (1,5) - һары (1,0) - ҡыҙыл (0,5)//

Көньяҡтараҡ, үҫәргәндәр ере Һабырҙа (Йылайыр районы) 4-5 төҫтө ҡулланып, матур биҙәктәр барлыҡҡа килтергәндәр. Йышыраҡ ҡыҙыл, күк, һары, йәшел төҫ ҡулланылған. Был яҡта буйҙарҙың киңлеген үҙгәртеү ҙә йыш осрай:

//күк (0,5) - ҡыҙыл (1,0) - йәшел (1,25) - [ҡыҙыл - күк/ҡыҙыл] (1,25) - һары (1,0) - [ҡыҙыл/күк - ҡыҙыл] (1,25) = [күк - ҡыҙыл] (1,0) - йәшел/ҡыҙыл (1,0) - күк (0,5)//





*Баймаҡ (Ҡыуат ауылы) һәм Йылайыр (Һабыр ауылы) райондары балаҫтары. Автор фотоһы. 1971, 1981 йылдар*

**Светлана ШИТОВА. "Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ӨФӨ ҠОРОЛТАЙЫ...

## ил ҡорона сыҡты

**Билдәле булыуынса, ил тормошонда йәмәғәтселек мөһим һәм файҙалы функциялар башҡарып, граждандар йәмғиәте тип аталған ижтимағи күренештең нигеҙен барлыҡҡа килтерә. Ошондай йәмәғәт институттары үсешмәһә, дәүләттең ижтимағи ресурстары ныҡ бүҫкәрәсәк.**



Был дөйөм ҡағиҙә башҡорт милли ойошмаларына ла ҡағыла. Хәҙерге осорҙа халҡыбыҙҙың милли рухын һаҡлау, уны милләт булараҡ нығытып торған барлыҡ билдә-сифаттарын үҫтереү, этник берҙәйлеген юғалтмау, ерле дәүләтселегебеҙҙе яҡлау кеүек көнүҙәк проблемалар йәмәғәтселектән башҡа бер нисек тә хәл ителмәйәсәк. Йәмәғәт ойошмалары ни тиклем күп төрлөрәк һәм ойошҡаныраҡ икән, дәүләткә лә, власть даирәләренә лә, йәмғиәттең үҙенә лә отошло йәшәйеш мөхите урын ала.

Бына баш ҡалабыҙҙа өр-яңы йәмәғәт ойошмаһы - Өфө ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы барлыҡҡа килде. Ошо йылдың 14 майында уҙғарылған ойоштороу йыйынында ойошманың Уставы ҡабул ителде, уның башҡарма комитеты ағзалары һәм етәкселеге һайланды. Иң әүҙем башҡорт йәмәғәтселәренең береһе, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева ойошманың башҡарма комитеты рәйесе вазифаһына иң ҡулай кандидатура итеп табылды һәм бер тауыштан хупланды.

Әлегә тиклем Өфөнөң һәр районында башҡорт ҡоролтайҙары булған хәлдә лә, уларҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштереп, берләштереп, контролдә тотоп тороусы дөйөм ҡала ойошмаһы юҡ ине. Яңы йәмәғәт ойошмаһы ошо юҫыҡта ла ойоштороу эштәрен башҡарыр, тигән өмөт уянды хәҙер.

Ҡала мөхитендә аң-зиһен үҫтереү өсөн, йә иһә мәҙәни, мәғрифәти мөмкинлектәр нисек кенә күп төрлө һәм бай булмаһын, был милли тарҡаулыҡҡа, айырымланып йәшәүгә кәртә була алмай. Ҡыҙғанысҡа күрә, тап ҡала мөхитендә этник ассимиляция күренештәре лә көсәйә бара, был хәл, туған телен бик насар белгән йә бөтөнләйе менән онота барған йәштәрҙең арта барыуын да иҫәпкә алғанда, ҡала башҡорттарының этник берҙәйлеген үтә ныҡ ҡаҡшата. Шуның өсөн баш ҡалабыҙҙа башҡортлоҡ рухын һаҡлау, милләттәштәребеҙ араһында яңы бәйләнештәр булдырып, бер ҡорға туплау Өфө ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайының төп бурыстарының береһе итеп ҡабул ителергә тейештер, тим.

Әлбиттә, ҡала мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу торошон күҙәтә барыу, булған етешһеҙлектәрҙе ваҡытында асыҡлау, тейешле мәғариф органдары менән тығыҙ бәйләнеш булдырыу һымаҡ мәсьәләләрҙең дә йәмәғәтселектең күҙ уңында тороуы фарыз. Бынан бер нисә йылдар элегерәк баш ҡалабыҙҙа Башҡорт теле көнө үҙе бер оло тамаша рәүешендә, матур байрам төҫөн ала ине. Наилә Сәфәрғолова уҙғарған "Йөрәк һүҙе" телевизион конкурсы ла халҡыбыҙ күңеленә хуш килеп, һоҡланғыс тәьҫораттар ҡалдырҙы бит. Ошондай саралаҙы айырым мәктәптәрҙә лә, ҡала кимәлендә лә ойоштороу телебеҙгә ихтирам уятып, милли булмышыбыҙға ла ҡот өҫтәр ине.

Ҡала мөхитендә милләттәштәребеҙгә бергә йыйылып һөйләшер, кәңәш ҡорор, кесе йыйындар, мәҙәни саралар уҙғарыр өсөн махсус тәғәйенләнгән бина булыуы бик тә ҡулай булыр ине. Заманында "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайында даими эшләп килгән "Аҡ тирмә" клубы эшмәкәрлеге үҙе бер тарихи ваҡиға булып урын алды бит. Тимәк, яңы ойошмаға баш ҡала хакимиәте менән дә, республика етәкселеге менән дә ошо хаҡта һүҙ ҡуҙғатыу урынлы булыр. Баш ҡалабыҙҙа милли ихтыяждарыбыҙ төйәге булырҙай Башҡорт йортон төҙөтөү киләсәк быуындар өсөн дә алыштырғыһыҙ бер йәдкәр булып ҡалыр ине.

Баш ҡалабыҙҙың милли йөҙөн билдәләйәсәк монументаль комплекстар, билдәле шәхестәребеҙгә һәйкәлдәр, айырым арт-объекттар төҙөтөү маҡсатында власть даирәләренә мөрәжәғәт итеү кеүек инициативалар ҙа бик кәрәк. Өфө урамдарында башҡорт телендә социаль реклама баннерҙарын элеү, биналарҙың стеналарында милли геройҙарыбыҙҙың граффити-портреттарын төшөрөү кеүек тәҡдимдәр ҙә ошо юҫыҡта урынлы булыр ул.

Ғөмүмән, баш ҡалабыҙҙа йәшәүсе башҡорттар яңы йәмәғәт ойошмаһына теләктәшлек белдереп, ярҙам итешеп, уның эшмәкәрлегенә көс-ҡеүәт өҫтәп торор, тип ышанайыҡ. Һәр кем дөйөм мәнфәғәттәребеҙҙе иҫтә тотоп, үҙ тәҡдимдәрен гәзитебеҙ аша ҡоролтай етәкселегенә еткерә ала. Ә йәмәғәт ойошмаһы халыҡ менән власть араһында аралашсы ролен үтәп, уның талаптарын, теге йәки был күренештәр, хәл-ваҡиғалар, ғәмәлдәр менән килешеүен, йә ризаһыҙлығын ваҡытында етәкселәргә белдереп торасаҡ. Яңы ойошма ла халыҡсан булып, милләттәштәребеҙ араһында танылыу табыр, тигән өмөттә ҡалайыҡ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*ҺӨЙӨНСӨ!*

# БАБИЧ - САЛАУАТ ЯНЫНДА



**Өфөлә башҡорт халҡының йөрәк моңо, ҡеүәтле һәм ҡәҙерле заттарының береһе Шәйехзада Бабичҡа һәйкәл асыла, тигән хәбәр йәшен тиҙлеге менән Ер шарын ураны, ахырыһы! Төрлө ҡитғаларҙа йәшәгән башҡорттар күҙ йәштәре аша шатлығын белдерҙе, Башҡортостанға ҡайтыу менән тап шунда юлланасағын әйтте - сикһеҙ ине ҡыуаныс тойғолары. Урыны ла ниндәй шәп бит әле: "Башҡортостан" концерт залы алдында!**

...Тик бер көн көтмәгәндә һәйкәл урынын А. Матросов паркына күсерергә йыйыныуҙары хаҡында яңылыҡ ишетелде. Улай ғына ла түгел, паркта ағас араһында бер урын ҡарап ҡуйыуҙарын да әйттеләр. Ошонда мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡованың фекерен ишеттерҙеләр: "Шәйехзада Бабич кеүек шәхескә һәйкәл асыу мәсьәләһен бер кеше генә хәл итә алмай, йәмәғәтселек ни әйтер? Улар менән кәңәшләшәйек", - ти ул. Шулай итеп, министрлыҡ һәм Өфө ҡала округы хакимиәте Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаларын, яҙыусыларҙы йыйып алырға ҡарар итә. Тиҙ арала йыйылған оператив кәңәшмәлә йәмәғәтселек вәкилдәре үҙ фекерен әйтте: Ш. Бабич һыны А. Матросов һәйкәле алдына ҡуйылһа, ике шәхес бер-береһен ҡаплаясаҡ, эстетик яҡтан был дөрөҫ булмаясаҡ. Ҡоролтай Башҡарма комитеты рәйесе Данир Ғәйнуллин да ҡарашын өҙөп әйтте: "Һәйкәлде кеше һирәк йөрөгән урынға ҡуйырға хаҡыбыҙ юҡ! Мең ғазаптар кисергән шағирҙы кәмһетергә ярамай!"

Эйе, күпме тантаналар залы, мәғрүр биналар бар, уларҙа меңәрләгән халыҡ йыйыла, тап шундай урында ҡаршы алып торорға тейеш бит Бабич! Ул - Шағир! Һүҙ сәнғәте вәкиле. Ул башҡорт шиғриәте кимәлен билдәләгән шәхес. Уның бейеклегенә етә алғандар бик һирәк. Ул халҡыбыҙҙың рухи юлбашсыһы! 24 йәшендә шәһит китеп, Башҡортостан Автономияһы өсөн үҙен ҡорбан иткән зат! Уның "Ғазазил" әҫәрен уҡып ҡарағыҙ әле! Был бит Фауст философияһы. Бабичтың һәр әҫәренән Аллаһы Тәғәләнең әйтергә теләгәндәре яңғырай. "Башҡортостан - гөлбостан" шиғырын уҡып, уның еренә, халҡына, теленә мөхәббәтенән күҙҙәргә йәш эркелә. Кем Башҡортостанын яратыуын шундай итеп һүҙҙәр аша әйтеп бирә алған! Автономияны үҙ иңдәрендә йөкләп бар иткән ир-егеттең тәрән мөхәббәте, һыҙланыуҙары сағыла юлдарҙа... Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова шунда уҡ бергәләп "Башҡортостан" концерт залы алдын яңынан барып ҡарарға тәҡдим итте. Архитекторҙар ҙа, подрядсылар ҙа бында, рәссамдар ҙа. Урын матур, һүҙ ҙә юҡ! Ниңә икенсе ергә күсерергә? Төҙөүселәр һәйкәлде был урында ҡуйырға мөмкин, әммә биләмә бик ныҡ сикләнәсәк икәнен әйткәс, тағы ла берәй вариант эҙләп ҡарарға кәрәк, тип таралашты йыйылғандар...

Һәм, ниһайәт, Зәки Вәлиди урамында "Зәки - башҡорт терәге" тип яҙған Шәйехзада шағирға һәйкәл ҡуйыласағы хәл ителде. Салауат Юлаев эргәһендә. Бабич үҙе яҙған "Салауат ҡандай арыҫлан" янында. "Торатау" конгресс холына кимәлле ҡунаҡтар киләсәк, бында юғары даирәләр фекер алышасаҡ! Был тап Бабич кимәле. Урамға килеп менеү менән Шәйехзада Бабичтың азатлыҡ рухы ҡаршылап торасаҡ! Был урын - күптән халыҡ яратҡан, ҡибла тиңләшерҙәй ер. Кемдең башына килгәндер һәйкәл урынын алыштырыу уйы, әммә бында, һис шикһеҙ, барыһы ла Башҡортостан, башҡорт, Шағир файҙаһына эшләнде. Күктәрҙең ҡыҫылышы булды бында! Бабич юғарылығын унда ғына хәл итеүҙәре ихтимал! Шәп! Барып баш эйергә, сәскәләр һалырға, шиғыр уҡырға яҙһын!

**Лариса АБДУЛЛИНА.**

✓ ***Лейтенант Ғәлимов батырлығы өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Уның даны бөтә Ҡыҙыл Армияға тарала. Ҡаһарманлығына һоҡланып, хатта композитор А.Новиков "Лейтенант Галимов" тигән йыр яҙа.***



БАТЫРЛЫҠ ӨЛГӨҺӨ

# КИРЕ ҠАҠЛЫҠТЫРҒАН...

## үҙенә осҡан гранатаны

**Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ҡаһарманлыҡ күрһәткән башҡорт батырҙары М. Шайморатов, Т. Кусимов, М.Гәрәев һәм башҡаларҙы яҡшы беләбеҙ. Ә бына 1938 йылда Хәсән күле янында японлар менән һуғышта ҡаһарманлыҡ күрһәткән башҡорт яугиры, рота командиры лейтенант Ғәни Ғәлимов тураһында республика кимәлендә киң билдәле түгел.**








*Подполковник Ғәни Ғәлимовты 2-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән наградлау ҡағыҙы. 1944 йыл.*

*"Лейтенант Ғәлимов" йырының нотаһы.*

Ғәни Ғәлим улы Ғәлимов 1912 йылда Туймазы районының Япрыҡ исемле башҡорт ауылында тыуған. Мәктәпте тамамлағас, Өфөнөң сәнғәт училищеһына уҡырға инә. 1932 йылда 3-сө курста уҡып йөрөгән мәлендә Ғәни хәрби комиссариатҡа барып, үҙен армияға алыуҙарын һорай. Армияға барырға әле йәше лә тулмаған була. Ул тормош юлымды хәрби хеҙмәткә бағышлағым килә, ти. Ғәниҙе хәрби училищеға ебәрәләр. Уны тамамлағас, лейтенант дәрәжәһен алып, хәрби хеҙмәт юлын башлай.

1938 йылда Япония ғәскәрҙәре Монголияға басып инә. Ҡыҙыл Армия күрше илгә ярҙамға килә. Г.К. Жуков етәкселегендәге совет ғәскәрҙәре японлар менән Хәсән күле янында бәрелешә. Лейтенант Ғәни Ғәлимов рота командиры булып 32-се уҡсы дивизияһы сафында ошо һуғыштарҙа ҡатнаша. Йәш командир үҙенең батырлығы, йылғырлығы, ихтыяр көсө менән бөтөн армияны хайран итә. Өлкән политрук М. Дивенко башҡорт командирының ҡаһарманлығы тураһында бына ниндәй хәтирәләр яҙа: "Я встретился с бывшим студентом Галимовым, когда он уже командовал ротой. Встреча произошла на песчаных холмах у озера Хасан 7 августа 1938 года. Батальон, в состав которого входила рота Галимова, после ожесточенных боев с японцами, укрепился на позициях у озера и после обеда должен был возобновить наступление и занять высоту Безымянную, уничтожив засевших там японцев.

По указанию комиссара соединения я пришел в этот батальон, чтобы помочь в руководстве боем. Перед боем мы провели митинг. После моего кратенького выступления попросил слово лейтенант Галимов, раненный в бою 6 августа. Одна рука его была перевязана. Чуть прихрамывая, он вышел на середину, говорил сдержанно, скупо, но в каждом его слове звучали ненависть к врагам, призыв к беспощадной расправе с зарвавшимися захватчиками.

Батальон пошел в наступление. Огонь минометов, пулеметов и артиллерии японцев не мог остановить нашего стремительного продвижения вперед. Когда до вражеских окопов осталось метров пятьдесят, бойцы взялись за гранаты. Галимов со связкой гранат куда-то пополз и скрылся в высокой траве. Вдруг на южном скате высоты Безымянной, там, где стоял японский миномет, мешавший нам овладеть окопом, раздался оглушительный взрыв. Вражеский миномет был выведен из строя. Галимов вернулся назад. Я подполз к нему. Он взял у меня еще одну гранату и бросил ее в окоп.

Бойцы, бросая гранаты, подползали к окопам все ближе и ближе. Японцы в панике разбегались. Секретарь комсомольского бюро товарищ Дмитриев, поднявшись во весь рост, начал стрелять из пистолета. В это время на нас обрушился сильный вражеский огонь со скатов соседней высоты. Дмитриев упал, сраженный пулей насмерть. Мы залегли и укрепились.

Галимов решил пробраться в тыл японцев и забросать гранатами их огневые точки. Он берет с собой больше десятка гранат и исчезает в траве. Галимова не видно, но бойцы следят за ним по взрывам гранат в тылу японцев. Вот японцы выкатывают на позицию пулемет. Из травы летят две гранаты. Пулемет опрокинут, исковеркан. Прислуга уничтожена. Японцы выкатывают второй пулемет. Его постигает та же участь. Обнаружив отважного лейтенанта замаскировавшимся в траве, японцы тоже пускают в ход гранаты. Они летят одна за другой, но, долетев до Галимова, почему-то отскакивают в сторону. В чем дело? Секрет выяснился, когда Галимов невредимый приполз назад. "Я вижу, что она летит прямо на меня, подставляю лопату, и граната отлетает в сторону", - смеясь, рассказывает лейтенант".

Лейтенант Ғәлимов батырлығы өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Башҡорт батырының даны бөтә Ҡыҙыл Армияға тарала. Уның ҡаһарманлығына һоҡланып, хатта композитор А.Новиков "Лейтенант Галимов" тигән йыр яҙа:

*Орудийный гром гремел*
*в долинах,*
*Грохотали танки по лесам,*
*Комсомолец лейтенант*
*Галимов*
*Вел отряд на озеро Хасан...*

Хәсән күлендә һуғышҡан "32-се дивизияның йыры"ның ҡушымтаһында ошондай куплет бар:

*Наш Галимов, он, ребята,*
*Всех отвагой потрясал:*
*На лету ловил гранаты*
*И обратно их бросал!*

Япондарҙы еңгәндән һуң Ғәни Ғәлимовты Мәскәүгә М.В.Фрунзе исемендәге хәрби академияға уҡырға ебәрәләр. Бөйөк Ватан һуғышы башлангас, майор Ғәлимов академиянан тура фронтҡа китә. Уҡсы бригадаһы штабының оператив бүлеге начальнигы булып хеҙмәт итә. 1942 йылдың июлендә - Ҡыҙыл Байраҡ, 1943 йылдың мартында Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары менән бүләкләнә. 1942 йылдың августан 3-сө Удар армияның оператив бүлеге начальнигының өлкән ярҙамсыһы вазифаһына күсерәләр. Подполковник дәрәжәһен ала. Ғәни Ғәлимовҡа армия штабында ғына ултырырға тура килмәй. Уны мөһим бурыстар менән фронт һыҙығындағы ғәскәрҙәргә ебәрәләр. "В январских боях 1944 года тов. Галимов с головным полком 46 гвсд в течение трех суток находился под непрерывным артиллерийско-минометным огнем на полуострове оз. СВИБЛО", тиелә наградалау ҡағыҙында. 1944 йылдың февралендә ул 2-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнә.

Ғәни Ғәлимов тураһында 3-сө удар армияның оператив бүлеге начальнигы Семенов Г.Г. үҙенең "Наступает ударная" исемле хәтирәләр китабында бына нимәләр яҙа: "Начальником холмского направления был майор Г. Г. Галимов, прибывший в штаб армии в конце августа с должности начальника оперативного отделения стрелковой бригады. Башкир по национальности, он имел прямой и горячий характер, к порученному делу относился с большой ответственностью. Гани Галимович Галимов был человеком в какой-то степени легендарным. В 1938 году он командовал ротой в 32-й стрелковой дивизии, принимал участие в боях у озера Хасан. И не просто участвовал, а совершил подвиг, о котором много писали в ту пору. Он уничтожил ручной гранатой вражеский пулемет. А когда в Галимова полетели японские гранаты, ловил их и швырял обратно, в неприятельские окопы. Для этого надо было иметь не только сноровку, расчет, но и огромную силу воли".

Ғәни Ғәлимов һуғышты полковник дәрәжәһендә 130-сы Латыш уҡсы корпусының оператив бүлеге начальнигы сифатында тамамлай. Һуғыштан һуң К.Ворошилов исемендәге хәрби академияла уҡып сыға. Һуңынан Байкал арьяғы хәрби округының штаб начальнигы булып хеҙмәт итә. Ҡанлы һуғыштарҙа алған яралар Ғәни Ғәлим улының һаулығын ҡаҡшата. Ул 60 йәшенә лә етмәй, 1969 йылдың 4 ноябрендә вафат була.

Япрыҡ ауылынан Ғәлимовтар нәҫеле ысын мәғәнәһендә башҡорт батырҙары нәҫеле булып тора. Ғәни Ғәлимовтан тыш, капитан Әхәт Ғәли улы Ғәлимов, өлкән лейтенант Асаф Ғәбдрәхим улы Ғәлимовтар һуғышта ҡатнаша. Улар илде һаҡлап ошо оло яуҙа һәләк булалар. Тағы ла летчик, полковник Рафик Ғәбдрахим улы Ғәлимов ошо нәҫелдең ғорурлығы булып тора.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

---

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН*

# БАШҠОРТ

Ҡаҙан һәм Әстерханды баҫып алғандан һуң рустар Иҙел һәм Яйыҡта 1584 һәм 1586 йылдарҙа яңы ҡалалар төҙөгән һәм иҫкеләрен яңыртҡан (Яйыҡ, Һамар, Бөрө, Өфө). Был ваҡиғаларға Урыҫ мырҙаның ҡаршы булған һәм ул Иван IV батша исеменә ебәргән бер хатында "башҡорт-иҫтәктәрҙең" уға яһаҡ түләүҙәрен, рустар тарафынан уларҙан яһаҡ талап итеүҙе эске эштәренә ҡыҫылыу булыуын яҙған (ҡарағыҙ: П. Пекарский, Когда основаны города Уфа и Самара, 1872, 8-се бит). Рустар башҡорттарҙан йылына бер нисә шәшке тиреһе кеүек бәләкәй яһаҡ алыуға риза булған һәм, уларҙың хан замандарындағы ер хоҡуктарын раҫлап, үҙҙәрен ғәскәргә алырға тырышҡан (1606 йыл). Шул уҡ ваҡытта рустар яйлап һәм тик ҡанлы көрәш менән өлкәне ҡулына ала. Рус идараһы аҫтына ингән башҡорттар 1629 йылда 888 йорт ҡына булһа, 1700 йылдан һуң 7100-гә ҡәҙәр еткән (ҡарағыҙ: Новиков, История уфимского дворянства. 1878, 75-се бит). Рус идараһы аҫтына ингәндән һуң да өлкәнең идара һәм ижтимағи ҡоролошо байтаҡ ваҡыт иҫке рәүештә ҡала. Ул замандарҙа татар һәм монгол аристократтарынан ҡалған "мырҙалар" (русса "князь"), ырыу рәйестәре булған бейҙәр (русса "старшина") һәм тархандар, атанан ҡалған ер хужаһы булған һәм ғәскәрҙә хеҙмәт иткән "аҫаба" (ғәрәп һүҙе, русса "вотчинник"), ғәскәрҙә хеҙмәт иткән "яһаҡлы" йәки "типтәрҙәр" (< дәфтәр), ерһеҙ ауыл халҡы ("бобыль" иҫке төркисә һәм монголса "богул" - әсир) һәм ауылға бәйле күсәбә "туснаҡтар" йәмғиәттең синыфтарын тәшкил иткән.

Юрматы башҡорттары 1649 йылда иң тәү башлап рус идараһы аҫтына ингән ваҡытта мырҙа, бей һәм тархандары дәйөм сәйәси мәсьәләләр буйынса фекер алышыу өсөн хәҙерге Хажи ауылы эргәһендә "Хан түбәһе"ндә үткәргән "йыйынға" (ҡоролтайға) йыйылған. Дәүләт эштәренә ҡараған даирәләргә "дыуан" (ислам термины - диван) тиелгән. Уртаһында Юрматы улысы урынлашҡан аҫаба ырыуҙарҙың ерҙәре дүрт ғәскәри "юлға" бүленгән:

1) Көньяҡҡа һуҙылған Нуғай юлында - мең, меркет, табын, юрматы, һарт, сураш, тамьян, тиләү, ҡатай, ҡыпсаҡ, бөрйән, үҫәргән (ҡанлы);

2) Көнбайышта урынлашҡан Ҡаҙан юлында - ҡаршы, ҡанлы, ҡайлы, елдәт, ғәрәй, йәнәй, байлар, йылан, ҡырғыҙ, бүләр;

3) Көнсығышҡа табан һуҙылған Себер юлында көҙәй, табын, ҡыпсаҡ (һыуын), танып, унлар, мырҙалар, һарт (бохарлыҡ), ҡыуаҡан, барын-табын, ҡара-табын, ҡатай;

4) Төньяҡта ятҡан Уса юлында таҙлар, уран, ирәкте, ғәйнә, салауыш, ҡыркөйлө ҡәбиләләре йәшәгән. Улар рус дәүерендә лә үҙ ерҙәрендә йәшәүен дауам итте.

Рустар был өлкәлә ныҡлап ерләшергә теләгән. Ошо сәбәптән башҡорттар менән уларҙың араһында көрәш туктауһыҙ барған. Башҡорт болаларының һәм баш күтәреүҙәренең күп һәм көслө булыуы рус тарихсыһы Дубровинды (ҡарағыҙ: Н.Дубровин, 1884, I. 253) уларға ҡарата "рус дәүләтенең көнсығыштағы иң ҡурҡыныс дошмандары" тип әйтергә мәжбүр иткән. Был көрәштәр XVIII быуаттың уртаһында, ниһәйәт, ҡаҙаҡ хандарының рус идараһы аҫтына ингәндән һәм рустарҙың Яйыҡ буйына етеп бер буй нығытма төҙөгәндән һуң тамамланған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Тыуған еребеҙҙә йәшәүҙе төрлө ауырыуҙарҙан һаҡланыуҙың бер сараһы итеп ҡарарға мөмкин. Бында һүҙ республика сиктәре тураһында ғына түгел, ә сит илдәргә сығып китеүҙең ниндәй эҙемтәләргә килтереүе хаҡында ла бара.***

# ТӨБӘККӘ ХАС

## ер тетрәүҙәр, шихандар

**Төрлө һөнәр эйәләре араһында тәбиғәткә, ергә иң яҡын кеше, моғайын, геологтыр. Нәҡ геолог ер-әсә тураһында бөтә мәғлүмәтте белеүсе, донъяның яралған ваҡытынан алып бөгөнгөһөнә тиклем бар нескәлегендә аңлаусы, ерҙәге ултырмаларға ҡарап, миллионлаған йылдар эсендә теге йәки был төбәктең нисек үҫеүе тураһында киң мәғлүмәт биреүсе, таштар һәм минералдар тураһында сәғәттәр буйы лекция һөйләй алыусы һөнәр эйәһе. Башҡорт дәүләт университеты география факультетының геология һәм файҙалы ҡаҙылмалар кафедраһы мөдире, геология-минералогия фәндәре кандидаты Исхаҡ ФӘРХЕТДИНОВ үҙ һөнәренең оҫтаһы булып танылған белгес. Ул беҙҙең төбәккә хас ҡайһы бер мәсьәләләргә геолог күҙлегенән сығып аңлатма бирҙе.**

**Исхаҡ Мансур улы, әңгәмәне геология фәне тураһында дөйөм белешмә биреүҙән башлайыҡ.**

- Боронғо грек теленән "Геология" "Ер тураһында тәғлимәт", тип тәржемә ителә. Ябай тел менән әйткәндә, геология ерҙең төҙөлөшөн һәм уның үҫеш тарихын өйрәнеүсе фән. Ер шары һәр ваҡыт үҙгәреш кисерә. Вулкан, һыу баҫыу, цунами һәм башҡа ошондай үҙгәрештәргә беҙ шаһитбыҙ, ләкин беҙгә күренмәгәндәре лә байтаҡ. Мәҫәлән, тауҙар һәр ваҡыт хәрәкәт итә. Әлеге мәлдә Урал тауҙары күтәрелеш осоро кисерә. Беҙҙең төбәк тә, ошо тау эргәһендә урынлашыу сәбәпле, шулай уҡ яйлап өҫкә күтәрелә. Тәбиғи, беҙ быны һиҙмәйбеҙ. Ә күпмелер ваҡыттан тау кире "ултыра" башлаясаҡ. Боронғо ваҡыттарҙа Урал тауҙары биш, ә урыны менән ете мең метрҙан бейегерәк булған. Күпмелер ваҡыттан һуң Урал "ултырған". Ә кайнозой эраһының неоген осоронда тауҙар кире ҡалҡа башлай. Хәҙер Урал тауҙары йылына 5 миллиметрға "үҫә". Шул рәүешле тауҙар һәм улар янындағы ҡоро ерҙәр яңырып тора. Әйтергә кәрәк, был тәбиғи процесс: океан - тау - океан. Әгәр ҙә тәбиғәттә тауҙар барлыҡҡа килеү процесы булмаһа, Ер шары элекке замандарҙағы кеүек бер тигеҙ кимәлдәге һыу менән ҡапланған булыр ине. Йәшәргә яраҡлы ҡоро ер нәҡ тауҙар арҡаһында хасил була.

Үҙгәреш шулай уҡ һыу ятҡылыҡтарына ла ҡағыла. Йылғалар яйлап ҡына ҡитғаларҙы йыуа бара. Аныҡлап әйткәндә, йыл һайын һыу ҡоро ерҙең бер миллиметрын ашай. Был үҙгәреште лә ябай күҙ менән күрмәйбеҙ, ләкин ул процесс туҡтамай. Шуға күрә, күпмелер ваҡыттан һуң бөтә Ер шары кире һыу аҫтында ҡалыуы ихтимал.

Бына ошо һәм башҡа төрлө үҙгәрештәрҙе, шулай уҡ ерҙең барлыҡҡа килеүен, уның составын, ер ҡабығының төҙөлөшөн өйрәнә геология фәне. Ул башҡа фәндәр менән тығыҙ бәйләнештә эшләй һәм үҙе үк әллә нисә төргә бүленә.



**Бөгөнгө көндә геологик эҙләнеүҙәрҙең өс төп йүнәлеше бар, тип билдәләнә. Тасуирлау, динамикалы һәм тарихи геология. Ә һеҙ, белеүемсә, медицина геологияһы йүнәлешендә тикшереүҙәр алып бараһығыҙ...**

- Беҙ Томск политехник университеты менән берлектә геологик мөхиттең төбәктәге халыҡтың һаулығына тәьҫирен өйрәнәбеҙ. Беҙҙең республика төрлө составтағы геологик тоҡомдарға бай һәм уларҙың һәр береһе һаулыҡҡа төрлөсә йоғонто яһай. Мәҫәлән, Өфө халҡы эҙбизташ һәм гипс ҡатламы өҫтөндә йәшәй. Шуға күрә лә баш ҡалала һыу татырлы. Эҙбизташ менән гипс ҡатламы - диңгеҙ ултырмалары һәм химик составтары буйынса улар тигеҙлек һаҡлай.

Ә бына геологтар билдәләүенсә, вулкандан барлыҡҡа килгән әсе иретмә йәки, ябай тел менән әйткәндә, уран өҫтөндә йәшәүселәргә хәүефләнергә урын бар. Вулкан тоҡомонда тимер, магний һәм башҡа минералдарҙың күп булыуы химик составтағы тигеҙһеҙлеккә килтерә. Мәҫәлән, Хәйбулла районында урыны-урыны менән уран ятҡылыҡтары бар. Әлбиттә, белгестәр ундағы күрһәткестәр санитар нормалар буйынса билдәләнгәндән юғары түгел, тип белдерә. Ләкин оҙайлы ваҡыт был төбәктә йәшәүселәрҙең һаулығына зыян килмәй ҡалмай. Уран һәм башҡа ауыр металдарҙың тәьҫире төрлө яман шеш ауырыуҙары барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Был районда бигерәк тә ашҡаҙандың яман шеш ауырыуы көслө. Шулай ҙа был сирҙең барлыҡҡа килеүендә тирә-яҡ мөхиттең тәьҫире, йәғни геологик фактор һуңғы баҫҡысты биләй, тиергә була. Тәүге урында кешенең оҙайлы ваҡыт депрессия хәлендә йөрөүе, борсоулы уйҙарға йыш бирелеүе, төшөнкөлөккә тиҙ бирешеүе тора, тип билдәләр инем. Бындай ваҡытта кеше үҙен эстән "ашай", организмдың иммунитеты кәмей, төрлө ауырыуҙарға, шул иҫәптән, яман шешкә лә тиҙ бирешә. Икенсе фактор - кешенең туҡланыуына бәйле. Өсөнсө урында - йәшәү рәүеше. Артабан - генетика килә.

Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, республиканың төньяҡ райондарында организм өсөн мөһим булған цинк әҙ. Ул организмда инсулин эшләп сығарыу өсөн кәрәк. Шулай уҡ Башҡортостан ҙур һыу ятҡылыҡтарынан, йәғни океандарҙан алыҫ булыу сәбәпле, беҙҙә йода әҙ. Бигерәк тә таулы райондарҙа уның етешмәүе күҙгә бәрелә. Ә бына нефть сыҡҡан райондарҙа йод күберәк.

Диабет сиренең барлыҡҡа килеүе, геологик күҙлектән сығып ҡарағанда, теге йәки был төбәктә тимерҙең әҙ булыуына бәйле. Мәҫәлән, Урал аръяғы райондарында был ауырыуға дусар булыусылар һаны әҙерәк, сөнки унда тимер күп. Ә көнбайыш райондарҙа был сир буйынса күрһәткес юғары.

Әлеге эҙләнеүҙәр һәм тикшеренеүҙәр тағы ла бер ҡыҙыҡлы нәмәне асыҡларға булышлыҡ итте. Әгәр ҙә ерле халыҡ урындағы геологик факторҙар тәьҫирен оҙайлы ваҡыттан һуң ғына тойһа, ситтән күсеп килеүсе өсөн был процесс тиҙерәк бара, сөнки уның организмы әлеге мөхит геологияһына яраҡлашмаған. Тимәк, тыуған еребеҙҙә йәшәүҙе төрлө ауырыуҙарҙан һаҡланыуҙың бер сараһы итеп ҡарарға мөмкин. Бында һүҙ республика сиктәре тураһында ғына түгел, ә сит илдәргә сығып китеүҙең ниндәй эҙемтәләргә килтереүе хаҡында ла бара. Шулай уҡ ғалимдар сит илдә үҫкән һәм етештерелгән аҙыҡ-түлекте ашау ҙа кеше организмына насар тәьҫир итеүе тураһында белдерә.

Әлеге һығымталар эшмәкәрлегебеҙҙең һуңғы һөҙөмтәһе түгел, сөнки тикшеренеүҙәр әле дауам итә. Бөгөнгө көндә төрлө райондарҙан алынған ҡан, сәс, тырнаҡ һәм башҡа биологик материалдарҙы Томск университетында тикшерәләр. Был эҙләнеүҙәрҙең үҙ иҫәбебеҙгә уҙғарылыуы һәм алыҫ Томск ҡалаһында үтеүе эште оҙаҡҡа һуҙа. Яҡын киләсәктә әлеге йүнәлеш республикабыҙ тарафынан яҡлау табыр, тип өмөт итәм. Тикшеренеүҙәр үткәреү өсөн кәрәкле аппараттың БДУ-ла булыуы ла эште күпкә еңелләштерер һәм һөҙөмтәлерәк итер ине.

**Стәрлетамаҡ шихандары тирәләй барған шау-шыу бер аҙ һүрелһә лә, һүнмәне. Фәнни күҙлектән сығып һүҙ йөрөткәндә, әлеге шихандарҙың әһәмиәте тураһында фекерегеҙҙе белергә ине.**

- Шихандарға ҡағылышлы терминологик буталыш күптәрҙе яңылыштыра. Уларҙы ҡәҙимге тауҙар рәтенә ҡуйыу төптө хата. Уларҙың тәүге үҙенсәлеге шунда - беҙҙең шихандар түбәнге пермь осорона (палеозойҙың һуңғы арауығына) ҡараған риф массивтары, йәғни һыу бассейны төбөндә барлыҡҡа килеп, ер өҫтөнә ҡалҡып сыҡҡан тауҙар. Ә башҡа яҡтарҙағы рифтар былай ныҡ асылмаған йәки һуңғы осорҙарҙағы ултырмаларҙың ҡалын ҡатламы менән ҡапланған. Стәрлетамаҡ шихандарының ошо рәүешле күтәрелеп тороуы ғалимдарға рифтарҙы өйрәнеүҙә ҙур мөмкинлектәр аса. Мәҫәлән, Торатауҙа таш күмере осоронан (карбон) түбәнге пермь осорона тиклемге дәүерҙе күрһәтеп тороусы геологик киҫелештәр бар. Шуға күрә Стәрлетамаҡ шихандарының киҫелештәре бөтә донъя фәнни әҙәбиәтенә индерелгән һәм Халыҡ-ара стратиграфик шкалала сағылдырылған. Элек бындай тау массивтары күп булған, ләкин беҙҙең көндәргә тиклем Башҡортостандағы шихандар ғына яҡшы һаҡланып ҡалған.

Икенсенән, әлегеләй шихандар донъяла йыш осрай, тигән фекер бар. Төрөк теле-

***Тауҙар һәр ваҡыт хәрәкәт итә. Әлеге мәлдә Урал тауҙары күтәрелеш осоро кисерә. Беҙҙең төбәк тә, ошо тау эргәһендә урынлашыу сәбәпле, шулай уҡ яйлап өҫкә күтәрелә. Тәбиғи, беҙ быны һиҙмәйбеҙ. Ә күпмелер ваҡыттан тау кире "ултыра" башлаясаҡ. Боронғо ваҡыттарҙа Урал тауҙары биш, ә урыны менән ете мең метрҙан бейегерәк булған. Күпмелер ваҡыттан һуң Урал "ултырған". Ә кайнозой эраһының неоген осоронда тауҙар кире ҡалҡа башлай. Хәҙер Урал тауҙары йылына 5 миллиметрға "үҫә". Шул рәүешле тауҙар һәм улар янындағы ҡоро ерҙәр яңырып тора. Әйтергә кәрәк, был тәбиғи процесс: океан - тау - океан. Әгәр ҙә тәбиғәттә тауҙар барлыҡҡа килеү процесы булмаһа, Ер шары элекке замандарҙағы кеүек бер тигеҙ кимәлдәге һыу менән ҡапланған булыр ине.***

***✓ Беҙҙә булып ҡайтҡан сит ил кешеһе тағы ла Башҡортостанға килергә атлығып торорлоҡ, үҙенең дуҫтарына һәм туғандарына бында барырға кәңәш итерлек шарттар тыуҙырыу мөһим.***

# СИРҘӘР ҺӘМ...

## тураһында бер кәлимә

нән "шихан" һүҙе яңғыҙ уба, тигәнде аңлата. Бындай түмәләстәрҙе, ысынлап та, төрлө урындарҙа осратырға була, ләкин беҙҙең башҡорт шихандары үҙенең үҙенсәлекле составы, йәғни тик гипс һәм тоҙҙан тороуы менән башҡа бер шиханға ла оҡшамаған. Уның нисек барлыҡҡа килеүен аңлар өсөн ябай миҫал ҡарап үтәйек. Һыулы стаканға тоҙ һалып, быуға әйләндергәндә, унда тоҙҙоң ултырмаһы ҡала. Шихандар ҙа ошондай уҡ юл үткән. Йәғни 290-280 миллион йыл элек океан төбөндә нигеҙ "һалынған" шихандар тирәләй һыуҙың яйлап ҡына быуға әйләнә башлауы уларҙы өҫкә ҡалҡыта, ә составындағы гипс менән тоҙҙоң бик йомшаҡ минерал булыуы һөҙөмтәһендә бөгөнгө торошта һаҡланып ҡалырға булышлыҡ итә. Ә, мәҫәлән, Силәбе өлкәһендәге "Шихан" йәки Әлшәй районындағы "Сусаҡтау" шулай уҡ яңғыҙ убалар, ләкин уларҙың беренсеһе граниттан, ә икенсеһе ябай ҡомташтан тора.

Өсөнсөнән, шихандар геологик йәһәттән генә түгел, биологик яҡтан да уникаль тәбиғәт ҡомартҡылары. Унда үҫкән һәм башҡа бер ҡайҙа ла осрамаған үҫемлектәр Ҡыҙыл китапҡа индерелгән. Ғалимдар билдәләүенсә, әлеге үҫемлектәрҙең тамырҙары ныҡ төптә булыуы уларҙы икенсе урынға күсереп ултыртыу мөмкинлеге бирмәй. Тимәк, уларҙың ер йөҙөндә һаҡланып ҡалыуы шихандарҙың урынында ҡалыуына бәйле.

"Торатау" геопаркын булдырыу тураһындағы ҡарарҙың бик урынлы һәм кәрәкле булыуын билдәләгем килә. Киләсәктә уның составында шулай уҡ Ҡуштау ҙа булыр тип ышанам.

**▸ Республикала шихандарға теймәйенсә, Башҡортостан "Сода" компанияһын сеймал менән тәьмин итеү мөмкинлеге бармы? Әллә уның эшмәкәрлеге тик әлеге шихандарға ғына бәйлеме?**

-Төбәктә сода етештереү өсөн кәрәк булған эзбизташ ятҡылыҡтары күп һәм заводтың артабан да өҙлөкһөҙ эшләүен тик шихандарға ғына ҡайтарып ҡалдырыу урынһыҙ, сөнки башҡа урындан да сеймал алырға мөмкин. Ләкин беҙҙең БСК-ны башҡа ятҡылыҡтарҙағы эзбизташтың составы ҡәнәғәтләндермәй. Бөтә донъяла сода етештереү өсөн алынған эзбизташҡа ҡуйылған талапҡа ярашлы, ундағы кварцтың миҡдары 2,5 процентҡа тиклем булырға тейеш. Ә Стәрлетамак заводы ни өсөндөр был һанды 1 процентҡа ҡәҙәр төшөргән һәм геологтар тәҡдим иткән башҡа ятҡылыҡтарҙы эшкәртеүҙән баш тарта, сөнки уларҙа кварц күләме 1 һәм унан саҡ ҡына күберәк. Әгәр ҙә ошо ятҡылыҡтарҙы сода етештереүсе башҡа берәй компанияға тәҡдим иткәндә, улар ҡуш ҡуллап эшкә тотонор ине. Дөрөҫөн әйткәндә, донъяла бер ошондай завод та беҙҙең БСК кеүек сеймал өҫтөндә "ултырмай", ә эзбиташты әллә ҡайҙарҙан ташый.

БСК, мәҫәлән, Сибай карьерындағы сеймалды ҡуллана ала. Был аҙым, үҙ сиратында, Сибайҙа өҫтәмә эш урындары барлыҡҡа килтерәсәк һәм шулай уҡ заводтың эшмәкәрлегенә туҡталып ҡалмаҫҡа мөмкинлек бирәсәк. Ләкин унан сеймал ташып эшкәртеү финанс мәсьәләгә барып тоташа. Әлеге мәлдә заводтың йыллыҡ килеме 10 миллиард һум самаһы тәшкил итә. Әгәр ҙә сеймалды Сибайҙан ташығанда, юл төҙөү һәм башҡа сығымдарҙы иҫәпкә алғанда, ошо сумманың 200-300 миллион һумы сарыф ителәсәк. Шулай итеп, үлсәүҙең бер яғында 300 миллион һум аҡса, ә икенсеһендә - шихандар.

Аҙыҡ-түлек өсөн генә тәғәйенләнгән соданы күҙ алдына килтереп, ул ни өсөн шул тиклем күп кәрәк һуң, тигән һорау йыш яңғырай. Көндәлек тормошта ҡулланылған сода етештерелгән бөтә күләмдең 10 процент тирәһен генә алып тора, ә ҡалғаны - кальцинирланған сода. Уның химик атамаһы - натрий карбонаты. Ул металлургияла, быяла эшләүҙә, нефтте таҙартыуҙа, бокситтан алюминий етештереүҙә һәм башҡа өлкәләрҙә ҡулланылған, сәнәғәт өсөн кәрәкле компоненттарҙың береһе. Шуға күрә уны етештереү ошондай масштаблы рәүештә алып барыла ла инде.

**▸ Былтыр "Янғантау" геопаркы булдырылып, уны ЮНЕСКО исемлегенә индереү эше тураһында мәғлүмәт булғайны. Әлеге ваҡытта был эш нисек бара һәм ошо исемлеккә инеү төбәк өсөн нимә бирә?**

- "Янғантау" геопаркы 2017 йылдың көҙөндә булдырылды. 2018 йылдың июль айында ЮНЕСКО эксперттары килеп, геопарк менән танышып ҡайтты. Ә шул уҡ йылдың сентябрендә Италияла "Янғантау" геопаркын ЮНЕСКО объекттары исемлегенә индереү тураһында кәңәшмә уҙҙы. Был исемлеккә инергә теләгән геопарктар үҙ эшмәкәрлеген, кәмендә, бер йыл дауамында алып барған булырға тейеш. Ә "Янғантау" геопаркының ЮНЕСКО вәкилдәре килгән ваҡытта тик туғыҙ ай ғына эшләүе әлеге исемлеккә инеүгә кәртә булды. Шулай уҡ геопарк етәкселегенә комиссия ағзалары билдәләгән тағы ла бер нисә ваҡ иҫкәрмәне төҙәтергә кәрәк ине. Ул иҫкәрмәләр, башлыса, геопаркты мәғлүмәти яҡтан тулыландырыуға ҡайтып ҡалды. Быйыл беҙҙең геопарк тарафынан бирелгән заявка тағы ла ҡаралаcаҡ һәм ул ыңғай хәл ителер, тип уйлайым. "Янғантау" геопаркы Рәсәйҙә ЮНЕСКО исемлегенә инергә тырышҡан беренсе парк түгел. Алтайҙа ошондай геопарк бар, шулай уҡ Краснодар өлкәһендә һәм Дағстанда геопарк булдырырға тырышып ҡаранылар. Ләкин Башҡортостан ЮНЕСКО комиссияһы геопаркта эшләһен өсөн бөтә шарттар булдырған берҙән-бер төбәк булды.

ЮНЕСКО исемлегенә инеү "Янғантау" геопаркына халыҡ-ара статус бирә. Ә был, үҙ сиратында, төбәккә сит ил туристарын йәлеп итеүҙең бер ысулы. Беҙҙең өсөн экзотика итеп ҡабул ителгән Төркиә, Ғәрәп Эмираттары һәм башҡа илдәрҙә ял итеп "арыған" сит ил халҡына быға тиклем күрмәгән-белмәгән урындар кәрәк. Ләкин уларҙы төбәктең тәбиғәтен һәм урындағы халыҡтың йәшәйешен ҡарап ҡайтыу ғына хушландырмай. Сәфәр мотлаҡ фәнни, мәҙәни, тарихи һәм башҡа өлкәләр буйынса ҡыҙыҡлы булырға тейеш. Һәм әлеге исемлеккә эләгеү төбәккә ошо йәһәттән үҫергә этәргес буласаҡ. Рәсәйҙән генә түгел, ә тотош донъянан килеүсе туристар төбәктәге бәләкәй эшҡыуарлыҡтың үҫешенә булышлыҡ итеп, "Янғантау" шифаханаһына яңы һулыш биреп, республика иҡтисадына ла ыңғай йоғонто яһаясаҡ.

Шулай уҡ ЮНЕСКО исеме аҫтында эшләүсе геопарк ышаныс һәм хәүефһеҙлек билдәһе. Үҙ именлеген беренсе урынға ҡуйған сит ил турисы өсөн был бик мөһим һәм сәйәхәт урынын һайлауҙа тәүге шарттарҙың береһе булып тора.

**▸ Туризм тураһында һүҙҙе дауам иткәндә...**

- Һуңғы ваҡытта был йәһәттән республикала эштәрҙең әүҙемләшеүен күреү ҡыуаныслы. Беҙҙең төбәк үҙенең матурлығы, тәбиғи байлығы, күп милләтле халҡы, мәҙәниәте, тарихы менән айырылып тора. Шулай уҡ геологик яҡтан алып ҡарағанда ла Башҡортостан кеүек ерҙең миллионлаған йылдар дауамындағы үҫешен асыҡ күрһәтеүсе төбәктәр яҡын-тирәлә юҡ. Республиканың һәр районында ла нәҡ шул ерҙәрҙә ниндәй үҙгәрештәр булыуын күрһәтеүсе урындар бар. Шул уҡ "Янғантау" геопаркындағы бынан 60 миллион йыл элек бөгөнгө Салауат районы биләмәһенең ниндәй булыуын, шул ваҡытта йәшәгән тере организмдар, үҫкән үҫемлектәр тураһында мәғлүмәт биреүсе киҫелеште телгә алырға була. Шулай уҡ Әбйәлил районында мәрмәр сығарғандан һуң ҡалған карьерҙар бар. Уларҙы мәғлүмәти сығанаҡ булараҡ ҡулланырға мөмкин. Шулай уҡ башҡа карьерҙар янында ла тейешле кимәлдә стендтар эшләп, мәғлүмәтле геогидтар әҙерләп, геологик туризм маршруттары эшләргә һәм туристарҙы йәлеп итергә була. Әлегә тиклем беҙ үҙ төбәгебеҙҙе, туристик потенциалыбыҙҙы күрһәтә белмәнек. Бынан ары боҙ ҡуҙғалыр, тип өмөтләнәм.

Гидтарға килгәндә, улар, ғөмүмән, бөтә яҡлап та белемле, мәғлүмәтле булырға тейеш. Төбәктең геологияһы, тарихы, бөгөнгөһө тураһында, мәҙәниәте һәм халҡы хаҡында тулы һәм ҡыҙыҡлы итеп һөйләй белгән гидтар уңышлы туризмдың бер терәүе. Мәҫәлән, башҡорт ырыуҙары, ундағы билдәле шәхестәр һәм уларҙың башҡарған эштәре тураһында, йыйындар, милли байрамдар хаҡында төплө һәм, иң мөһиме, төрлө телдә мәғлүмәт бирә белгән сос, белемле, итәғәтле гидтар әҙерләү мөһим беҙгә. Беҙ, мәҫәлән, гидтарҙы геологик яҡтан әҙерләүҙә хеҙмәттәшлеккә әҙербеҙ.

Билдәле "Шүлгәнташ" мәмерйәһе хаҡында иҫ китерлек бай һәм йөкмәткеле итеп һөйләргә була. Мәмерйә нисек, ҡасан барлыҡҡа килгән, борон унда ниндәй тормош булған һәм башҡа ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән тулыландырыу тик файҙаға ғына булыр ине. Боронғо һүрәттәрҙе ҡарау һәм "Мәмерйә хужаһының кәүҙәләнеше" һәм башҡа ошондай телмәрҙәр фәнни-танып белеү туризмына өҫтөнлөк биргән сит ил турисын артыҡ ҡыҙыҡһындыра алмай. Беҙҙә булып ҡайтҡан сит ил кешеһе тағы ла Башҡортостанға килергә атлығып торорлоҡ, үҙенең дуҫтарына һәм туғандарына бында барырға кәңәш итерлек шарттар тыуҙырыу мөһим.

Беҙҙә әлегә тиклем ҡырағай туризм өҫтөнлөклө урын алып торҙо. Бынан ары ла бындай туризм үҙ актуаллеген юғалтмаясаҡ. Ләкин ҡырағай туризм да яҡшы шарттар менән булырға тейеш. Миҫал өсөн алғанда, Өфөнән Бөрйәнгә тиклем арауыҡта туҡтап алырлыҡ бер нисә генә урын бар. Инйәрҙән һуң бөтөнләй шарттар юҡ. Шулай уҡ интернет селтәрендә юлда осраясаҡ ҡунаҡханалар тураһында ла мәғлүмәт табып булмай. ГУГЛ картаға ышанып юлға сығыу мөмкин түгел, башҡа яҡтан килгән кеше түгел, үҙебеҙ аҙашып ҡалырға мөмкинбеҙ. Шулай уҡ ГУГЛ картала турист өсөн ҡыҙыҡ булырлыҡ урындар тураһында ла хәбәр юҡ. Мәҫәлән, шул уҡ Бөрйән районында ҡымыҙсылыҡ фермаһы бар. Ләкин уға илткән юлды күрһәтеүсе алтаҡта бөтөнләй күҙгә эленмәй. Ошо урында ферма барлығын белмәгән кеше уны күрмәй үтеп китә. Ә тәүлегенә, кәмендә, бер төркөм туристар инеп сыҡҡанда ла, ферма хужалары күпмелер килем алыр ине. Ғөмүмән, күрһәткестәргә килгәндә башҡараһы эштәр ифрат ҙур. Бөгөнгө көндә инглиз, урыҫ телендә генә түгел, хатта башҡорт телендәге күрһәткестәр юҡ кимәлендә. Әлеге етешһеҙлекте бөтөрөү ҙә туризм өлкәһендә эшләүселәрҙең үҙ алдарына ҡуйған тәүбурыстары булыр, тип ышанам.

Туризмды үҫтереүҙә шулай уҡ автомобиль ҡуйыу өсөн һаҡланған махсус майҙансыҡтарҙың етерлек булыуы ла мөһим роль уйнауын билдәләп үткем килә.

**▸ Былтыр көҙ ер тетрәүҙәренә шаһит булдыҡ. Емергес көскә эйә булмаһа ла, халыҡты ярайһы ғына ҡурҡыуға һалды улар. Беҙҙә лә сит илдәге кеүек көслө ер тетрәүҙәр булырға мөмкинме?**

- Ундай хәүеф беҙгә янамай. Әлеге тетрәүҙәрҙең сәбәбе - Урал тауҙарының күтәрелеүендә. Ләкин был күтәрелеш, мәҫәлән, Кавказ тауҙарына ҡарағанда, бик яй бара һәм шуға күрә ер тетрәүенең көсө беҙҙә 5-6 балл булһа, ул яҡтарҙа 8-10 балға тиклем етергә мөмкин, сөнки унда тауҙар йылына 10-15 миллиметрға "үҫә". Ә бына Камчатка, Курил утрауҙары сейсмологик йәһәттән хәүефле биләмәләр, сөнки улар урынлашҡан урында Тымыҡ океан плитаһы ҡоро ер плитаһы аҫтына бата бара. Әгәр ҙә ниндәйҙер ҡаршылыҡҡа осрап, әлеге шылыу тотҡарланһа һәм ниндәйҙер арауыҡтан һуң ҡапыл ғына ҙур араға күсһә, ҙур ер тетрәүҙәр була ла инде. Шуға күрә йыл һайын ҡабатланып торған әҙ баллы ер тетрәүҙәрҙең булып тороуы тик яҡшыға ғына, сөнки бындай осраҡта ҙур ҡыйралыштар булмай.

Беҙҙең төбәктә ағымдағы ер тетрәү, ғалимдар билдәләүенсә, яҡынса 100 йылдан һуң ҡабатланырға мөмкин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Киң мәғлүмәтле кеше менән аралашыу һәр ваҡыт ҡыҙыҡлы. Ә уның тәрән белеме илһөйәрлек менән тулыландырылған булһа, һөйләшеү үҙенән-үҙе ялғанып, бер ауырлыҡһыҙ үтә. Бөгөнгө әңгәмәсем нәҡ ошондай кешеләрҙең береһе булды. Төбәктең геологияһын өйрәнеүҙә әһәмиәтле эшмәкәрлек алып барыусы йәш ғалимға артабан тик уңыштар юлдаш булыуын теләргә генә ҡала.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ **"Самауырҙарҙы" алып йөрөтөү өсөн аранан бер оҫта яр буйҙарын ҡыҙырып үҫкән нәҙек ҡамыштарҙан кәрзин "оялар" үрә башланы ла, әле ул мәхлүктәрҙе шул кәрзин һаптарынан ағасҡа элеп китәләр ине. Торалар тегеләр бәүелешеп.**



Фронтовиктар табипҡа ниндәйҙер эске хөрмәт менән ҡарайҙар һәм уны бүлдерергә ҡыймайҙар ине.

- Һеҙҙең бөгөн күптәрегеҙ ҡарауһыҙ. Медицина ярҙамы тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Күптәрегеҙҙә гангрена! Күптәрегеҙгә ҡабаттан операция кәрәк! Былай хәлдә һеҙ оҙаҡ йөрөй алаҫаҡһығыҙмы?

Баштар эйелде, ҡараштар түбән төштө, устар йоҙороҡҡа төйнәлде.

- Ярай, бында ашарға килеүселәр хәрәкәт итә ала. Ә әлеге ваҡыт палаталарҙа ҡалғандар: һуҡырҙар, аяҡ-ҡулһыҙҙар һәм башҡалар, улар кемдән ярҙам көтә ала? Был пансионат ғәрип фронтовиктарға ярҙам йөҙөнән асылды! Беҙ һеҙгә дошман түгел! Әммә тәртиптәр ҡаты буласаҡ! Эсеү, һуғышыу тыйыла! Санитарҙар ҡушҡанды һис ҡарышыуһыҙ үтәргә!

-Ә бынан китергә... буламы?

-Юҡ! - ошо тәңгәлдән хәбәрҙе капитан ялғаны. - Пансионат утрауҙа урынлашҡан, дүрт тарафта ла оло күл һыуы. Ҡайҙалыр йөҙөп китеү мөмкин түгел. Һәм онотмағыҙ, табип ҡулы аҫтында хәрби һаҡ бар. Тәртипкә буйһонмаусыларға яза ла буласаҡ. Хәҙер ашағандан һуң палаталар буйлап комиссия үтә, исемлектәр төҙөлә...

* * *

Начальник нимә генә тип ҡурҡытһала, тәүге көндәр генә түгел, әле аҙна тигәндә лә ҡуйылған талаптарҙы үтәргә теләмәй, буйһонмай ҡаршылашыусылар, ҡолас ташлап һуғышыусылар, ҡасырға теләп сығып олағыусылар булып торҙо. Уларҙы йә өҫтөрәп индереп урынына һелтәнеләр, йә бәйләп һалдылар, бик булмаһа, подвалдағы ҡараңғы бүлмәгә бикләп тотоп алдылар. Хеҙмәтләндереү командаһына ҡаршы ғына түгел, үҙ- ара ла әләгеште фронтовиктар. Берәүгә берәүҙең ҡарашы оҡшаманы, берәү икенсеһенең һүҙен күтәрмәне, йәнәш йәшәргә, ултырып ашарға теләмәне. Ашханала өҫтәл-эскәмйәләрҙе ауҙарып, төркөмдәргә бүленешеп, бысаҡҡа бысаҡ килеп тә бәрелештеләр. Унан, язаһын алып, көндәр буйына бәйле килеш аҫ яттылар. Подвалда бикле ултырҙылар. Был "тәрбиә" тәрҙәре уларҙы йыуашайта, баҫалҡыраҡ, һағыраҡ итте. Шулай аҙмы-күпме тәртип урынлаша төштө пансионатта...

## 9 май

Утрауҙы ер менән бәйләгән берҙән-бер пароход айына бер килеп әйләнә. Аҙыҡ-түлек, почта, медикаменттар алып килә. Медперсонал һәм башҡа хеҙмәтләндереүселәр, һаҡсылар алмашына. Утрауҙа ҡайҙалыр урман эсендә бер ике утар бар тиҙәр, шунда йәшәүселәрҙең дә тышҡы донъя менән берҙән-бер бәйләнеше, күрәһең, ошо пароход.

Ай самаһы йәшәп ташлағандар, күрәһең, бер көн күл өҫтөндә пароход пәйҙә булды ла, утрау менән тәңгәлләшкәс, һуҙып-һуҙып гудок бирҙе. Тап был мәл пансионатта йыйыштырыу, елләтеү һәм яткан ғәриптәрҙе тышта йөрөтеп алыу саралары үткәрелеп ята ине. Санитарҙар йөрөй алғандарҙы ҡыуып тигәндәй сығарып, казарма тәҙрәләрен шарран асып, түшәк-юрғандарын ҡарауат баштарына элеп ташлағайны. "Самауырҙарҙы" алып йөрөтөү өсөн аранан бер оҫта яр буйҙарын ҡыҙырып үҫкән нәҙек ҡамыштарҙан кәрзин "оялар" үрә башланы ла, әле ул мәхлүктәрҙе шул кәрзин һаптарынан ағасҡа йә ҡоймаға элеп китәләр ине. Торалар тегеләр бәүелешеп. Яҙғы ҡояшҡа биттәрен ҡуйып, йәшәүҙәренән ошо хәлтәнән дә рәхәтлек таба белеүҙәреме, әллә барынан ваз кисеп, күрмәҫкә теләп, күҙҙәрен йомоуҙарымы?..

Пароход гудогынан барыһының башы бер юлы күл яғына бороллдо. Кәрзиндәрҙәгеләр ҙә ҡыбырлашты. Ашхана бинаһынан ашнаҡсылар, казармаларҙан санитарҙар йүгерешеп сыҡты.

-О-о! Пароход!

-Ниһайәт, пароход!

-Аҙыҡ килә, аҙыҡ!

-Утрауҙа бикләп, астан интектерәләр, сволочтар! Был хаҡта иптәш Сталинға яҙырға кәрәк! - папирос төтәтеп ултырған бер төркөм араһынан сыҡҡан әр ҙә ҡушылды был ауаздарға.

-Бөгөн туя ашап ятабыҙ икән.

-Фронтовиктарҙы лагерҙа тоталар! Мин Мәскәү вокзалында туғыраҡ йәшәй инем, ы-ых, автомат ҡына юҡ...

Серый ҡушаматлы Сергей тигән әҙәм тәмләп-тәмләп төтән һура ла, һәр саҡ эргәһендә өйкөлөшкән әшнәләренә тағы ла оҙаҡ итеп нимәләрҙер һөйләп ултыра. Һаман шул һуғышҡа тиклемге "батырлыҡтары" тураһындалыр инде, тип уйланы уларҙы ситтән күҙәткән Рамаҙан. Аңлауҙарынса, Серый һуғышҡа тиклем атаҡлы бур булған, маҡтаныуы дөрөҫ булһа, Мәскәү милицияһы уны йылдар буйына эләктерә алмай йонсоған. Ул иһә эҙләүселәрҙең танау төбөнән үтеп китеп, ун минутта тотош фатирҙарҙы "таҙалап" сығып юғала алған. Әле бала сағынан уҡ төрмәләрҙең һәр төрлөһөн үтеп бөткән дә, һуғышҡа штрафбат сафтарында барып ингән. Унда ла үҙе теләп, ҡат-ҡат һорап яҙып киткән. Бындағы ғауғаларҙа ла ул эре генә: " Беҙ - штрафбаттар, һеҙгә миналы юлдарҙы таҙалап бирҙек! Беҙ алғы рәттә ҡырылдыҡ!" - тип күкрәк кирә. Уның хаҡлы икәнен дә белә Рамаҙан. Бындағыларҙың барыһы ла белә инде, берәү ҙә "юҡ, улай булманы" тип әйтә алмай. Сөнки штрафбаттарҙың ниндәй маҡсат менән яуға ҡыуылғаны хәҙер инде береһенә лә сер түгел. Шулай ҙа уның һаман төрмәләгесә тәртип урынлаштырып маташыуын өнәп етмәй егет. Казармаһында ла хан булып алған, үҙенә оҡшамағандарҙы тәүге аҙнала уҡ ҡыуып сығарып, йомошон үтәп ярағандарҙы ғына ҡалдырҙы. Ашханала ла түр башынан урын алды. Хатта санитарҙар ҙа унан һағая биргәндәй. Бары тик баш табип Тарас Соломонович, бындағы ҡушаматы буйынса "доктор Соломон" менән пансионат начальнигы Федор Васильевичтың ғына артыҡ иҫтәре китмәй. Улар уны ла бары тик һыңар ботло ғәрип фронтовик, яҙмышына үпкәле бәхетһеҙ әҙәм балаһы итеп ҡабул итә.

Оҡшатмай ғына түгел Серыйҙы, уның шайкаһы менән әләгешеп тә өлгөрҙө инде Рамаҙан. Ашханала ашнаҡсы ҡатындан өҫтәмә икмәк таптырып, икмәк ала алмағас, ҡатынға ҡултыҡ таяғы менән киҙәнгәнендә, уның артынан килеп торған егет таяғын эләктереп алғайны. Серый һау аяғына терәлә биреп, икенсе таяғын да һелтәне лә, Рамаҙан уныһын да аҫтан тотоп тартҡас, бер аяҡта ғына тигеҙлек һаҡлай алмай, шатыр-шотор ҡолап киткәйне. Был хәлдән ашап ултырыусылар ҙа, сиратта тороусылар ҙа шымып ҡалды. Һағайышып, нимә булырын көттө.

Рамаҙан таяҡтарҙы тырмашып тороп маташыусыға ырғытты:

-Һин нимә ашнаҡсыға бәйләнәһең? Ҡайҙан алһын ул һиңә булмаған икмәкте?

-Ах, һин, сссу...! Кемгә ҡул күтәрәһең әле? - тип йөһәтләп ҡалҡынып, егеткә килә лә башланы тегеһе. Рамаҙан да ҡулдарын алға һуҙып, һөжүм ҡабул итергә әҙерләнде.

-Бөтәһенә лә норма менән бирелгән икмәк нишләп һиңә өҫтәмә булырға тейеш?

-Һин, фраер, минең кем икәнде белеп етмәйһең, ахыры...

-Етәрегеҙ! Етәр һиңә, Сергей! Ҡайҙа һаҡсылар? - тип сарылданы ашнаҡсы ҡатын, тик уның тауышын башҡа шауышыу күмде. Халыҡты йыра-йыра Рамаҙандың йөнәшенә Вася килеп торҙо, тағы ла өс-дүрт казармалашы артына баҫты. Серыйҙың да шайкаһы йыйыла һалды. Тик бәрелеш башланып өлгөрмәне, һаҡсылар пәйҙә булып, айырып ебәрҙеләр.

-Осрашырбыҙ әле, герой, - тип бармаҡ янап китте Серый.

Бүлмәләренә ҡайтҡас, Вася уны ҡыҙҙырып та маташты:

-Эт менән эт булаһың, былай барһа, көн дә һуғышырға тура киләсәк. Һиңә шундай тормош кәрәкме ни, Ромка?

-Кәрәк түгел, әммә мин ҡарап тороп берәүҙе лә ҡыйырһыттыра алмайым. Күрмәненме ни ҡатындың ҡалай ҡурҡҡанын?

-Серый юрамал ойоштора ошондайҙы. Үҙенең хакимлығын күрһәтеү өсөн.

-Ниндәй хакимлыҡ? Мине әллә шул шайканан ҡурҡып торор тиһеңме? Әллә һин ҡурҡаһыңмы, Вася?

-Юҡ, ҡурҡмайым. Мин инде хәҙер бер нәмәнән дә ҡурҡмайым, Ромка. Бөгөн кәрәкһә, бөгөн үлә алам. Бары йәшәрен йәшәгәс, аҡылһыҙ булырға ла ярамай.

Уның был һүҙҙәренән ҡабаттан ҡыҙып барған Рамаҙан да яҙылды. Уны яҡлашырға тип йәнәшәһенә килеп баҫҡан дуҫын тағы ла нимәләрҙер тип ғәйепләп тороу урынһыҙ ҙа ине.

* * *

Пароход үтеп китеп күп тә торманы, пансионат урынлашҡан ҡалҡыулыҡҡа йөк машиналары үрмәләп менде. Талғын ғына сайҡалып килеүҙәренән уларҙың ауыр тейәлгәне күренеп тора. Өс машина бер-бер артлы ҡапҡа эсенә үтеп, ашхана тәңгәлендә туҡтаны. Кабиналарҙан һалдат формаһындағы водителдәр ҙә, берәр ҡоралы һаҡ сыҡты. Уларҙы бындағы хеҙмәтләндереү командаһы ҡаршы алып, аҙыҡ-түлек һәм башҡа кәрәк-яраҡ эскә ташылды. Был күренеште тамшанып күҙәткән ғәриптәрҙең дә кәйефе күтәрелде. Улар үҙ-ара шаярышып һөйләште, көр тауыш менән хахылдап көлөштө. Халыҡ бер ниндәй командаһыҙ ҙа эскә эркелде. Хәлдәренән килгәндәр санитарҙарға ярҙамлашып, йөрөй алмағандарҙы эскә ташышты. Рамаҙан менән Вася ла үҙ казармаһындағыларҙы кәрзиндәренең ҡолаҡтарынан ике яҡлап тотоп алып китте. "Танкистар" бер үҙҙәре һикереп, бер "самауырҙы" һикертеп йөрөп, иптәштәрен урынлаштырышты шулай.

Киске ашты саҡ көтөп алды егеттәр. Һуңғы көндәрҙә аҙыҡ ныҡ наҡыҫайып, өйрәгә лә берәр телем икмәккә генә ҡалғайнылар. Аҫҡаҡһып, һурылып киттеләр. Шунлыҡтан, алдарындағы ҡуйы бутҡаны ла, ҡалындан өсәр телем ҡара икмәкте лә ләззәтләнеп ашанылар. Унан шәкәрле ҡаты сәй күпме теләйһең шулай бирелде. Папирос та таратылғайны, күптәр сығып төтәтеп инде лә, ҡабаттан сәй шөрпөлдәтте. Был теремеклектең тағы ла бер сәбәбе бар: иртәгә 9 май! Еңеү байрамы хөрмәтенә мәжлес яһаласаҡ, хатта артист та килгән, тигән хәбәр йүкә телефон аша барыһының да ҡолағына һуғылып үткәйне инде. Ашхана ябылғас та әле йоҡларға ашыҡмай тышҡа эркелде халыҡ. Яҙғы йылы кистең йомшаҡ һауаһын еҫкәп, әллә ниндәй хәтирәләренә бирелеп, үҙ-ара гәпләшеп ултыра бирҙеләр.

* * *

-Урра! Еңеү! Еңеү көнө!

"Самауыр" Антоша күҙҙәрен асыу менән шулай һөрәнләне. Үҙе, былар мине ишетәме, тигәндәй, муйынын һуҙып, ян-ягына баҡты. Ҙур зәңгәр күҙҙәрендәге балаларса ҡыуаныс уның был аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ағас киҫәге һымаҡ булып ҡалған кәүҙәһенән ҙур бер бөпәй яһай ине. Һәм бындай "бөпәйҙәр" ошо казармала ғына ла алтау. Уларҙы йөрөй алыусылар ҡарашһын һәм йомош-фәләненә ярҙамлашһын өсөн ошолай аралаштырып һалғандар. Антоша шуларҙың иң йәше. Ул 1945 йылда ғына ун һигеҙе тулып һуғышҡа алына ла, март-апрель айҙарында Берлинды алғандағы яуҙарҙа ғәрип булып ҡала. Берлинды штурмлау, асылда, уның кеүек меңәрләгән һалдатты аяҡ-ҡулһыҙ итә. Сөнки Жуков танкыларҙы атаканың икенсе өлөшөнә һаҡлап ҡалдырырға теләп, миналы ҡырҙарға, ҡала урамдарына беренсе итеп пехотаны ебәрә. Миналар өҫтөндә ҡыҙған табала атылған борсаҡ шикелле булып өҙгөләнеп сәселеп бөтә һалдаттар. Исән ҡалғандары ла "самауыр" ҙа "танкист" хәлендә генә. Был хаҡта, әлбиттә, Антоша ла, уның кеүек башҡалар ҙа белмәй. Тарихта күпкә алға китеп әйткәндә, был хаҡта иптәш Жуков Американың хәрби башлығы Эйзенхауэрға һөйләй һәм американлы әлеге "хәрби тактиканы" ҡот осҡос хәл булараҡ көндәлегендә яҙып ҡалдыра...

-Эйе, Енеү, Антоша туғанҡайым, Еңеү... - Василий күптән уянған, хатта йыуынып та ингән, күрәһең, килеп Антошаны торғоҙоп ултыртты. Карауат аҫтынынан шешә алып, егетте кесе ярау иттерҙе, тас менән һыу килтереп, битен сайҙырҙы. Унан сумаҙанынан гимнастеркаһын сығарып ҡаҡҡыланы ла, еңдәрен эскә тығып, керле майкаһы өҫтөнән кейҙереп ҡуйҙы.

-Быҙа бит, егет булдың!

Ҡул-аяғы үҫеп сыҡҡандай булып ҡыуанып ултыра егетең.

-Ҡана, Василий Егорович, көҙгө бирегеҙ әле?

Ҙур булмаған түңәрәк көҙгөнө егеттең битенә һәм миҙаллы түшенә генә терәне иптәше. Унда май ҡояшы кеүек нурлы йөҙлө, зәңгәр саткылар сәскән шаян ҡарашлы һөләктәй йәш кеше йылмая ине. Был күренештән тағы ла илһамлана төштө Антоша һәм ҡысҡырып көлөп ебәрҙе:

-Эх, Василий Егорович, ҡыҙҙар ғына юҡ!

Уның был хәбәренән шулай уҡ тороп, кейенеп-яһанып маташҡандар ҙа көлдө. Әсенеү, һыҙланыуҙарын енеп, ғорурлыҡтарын баҫып, үҙ хәлдәренән үҙҙәре көлә алды улар.

Рамаҙан ҡайтып ингәндә казармала әлеге дәррәү көлөү тора ине. ...Көндә-



✓ Шундай картиналар аҙ түгел. "Башкирский эскадрон" тигән картинала өс Тарас Бульба тора. Тимәк, был рәссам да картинаһындағы кешеләргә үҙенә хас булған йөҙ-төҫтәрҙе биргән. Башҡорттоң төҫөн күргәне лә булмаған.



гесә, яр башындағы концертын тамамлап, күңелен бушатып инеп килгән егет был шатлыҡтың сәбәбен белмәһә лә, быҒаса бер ҙә сырайҙары яҙылмаған иптәштәренең дә һығылып шарҡылдағанынан ҡәнәғәтлек кисерҙе.

Иртәнге аш ваҡытында артыҡ үҙгәрештәр булмаһа ла, һәр береһе эсендә ниндәйҙер тантана йөрөтөүе һиҙелеп тора ине. Төшкө ашты иһә пансионат ихатаһында, ер өҫтөндә ашаттылар. Һәр кем үҙ казармаһы менән өйкөм-өйкөм булып ултырҙы. Аҫтарына одеялдарын алып сығып түшәнеләр, ашъяулыҡ урынына кем нимә таба, шуны йәйҙе лә, лагерь начальнигының, унан баш табиптың ҡотлауҙарын тыңлап, йөҙәр грамм күтәрҙеләр. Байрам табынына бында эшләгән хеҙмәткәрҙәр ҙә ҡушылғайны. Бигерәк тә медсестра, ашнаҡсы, санитарка ҡатын-ҡыҙҙар йәм өҫтәне. Аҙаҡ телдәр асылды, ҡалаҡтар шаҡылданы, уйын-көлкө китте. Артист саҡырылған, тигәндәре генә буш булып сыҡты, әммә аныһына артыҡ мохтажлыҡ та булманы. Сөнки самаһына етеүгә ҡарап, һәр төркөм йыр башланы ла, аҙаҡ барыһы ла күтәреп алып, билдәле булған бөтөн хәрби йырҙарҙы башҡарып сыҡтылар. Моңлораҡтар халыҡ йырҙарын да һуҙҙы, башҡалары әсәрләнеп тыңлап ултырҙы. Унан ҡул сабып тағы һоранылар. Тағы йырлаттылар...

Байрам табыны үтте лә, ауыҙҙарына бер эләккән ир-егеттәргә был ғына аҙ булды. Ҡайһылар темеҫкенешеп йөрөп, санитарҙарҙан спирт һорап ҡаңғырта башланы. Шул ваҡыт Серый казармаһынан берәү бүлмәләр буйлап йөрөп, шыпырт ҡына хәбәр таратып сыҡты: уларҙа самогон һатыла, имеш. Һәм, ысынлап, кемдәрҙер ул бүлмәнән аҡ шыйыҡса тултырылған эсемлек алып сыға башланы. Хаҡына кемдең нимәһе бар, шуны бирҙе. Кемдер аҡсаға, кемдер миҙалға, йылы кейемгә, хатта ябынып ятҡан одеялына алыштырып алғандар ҙа булды. Рамаҙандарҙың бүлмәләштәрендә лә күренде шешәләр.

-Ҡайҙан алған икән самогонды Серый? - Рамаҙандың быға башы етмәй, Васянан һорап ҡуйҙы.

-Утарға барып йөрөйҙәр, ти, бит. Унда самогон һатҡан ҡатын йәшәй икән. Шуның тауарын осора инде бында ла.

-Лагерҙан ситкә сығып булмай тиҙәр ҙә инде. Улар нисек сыға һуң?

-Тимәк, юлын тапҡандар. Йәки һаҡ, йәки берәй санитар менән әшнәләштеләр, күрәһең.

-Дәә... былай булһа, мәхшәр ҡубасаҡ...

Һәм кискә ысынлап та мәхшәр ҡупты ла. Халыҡ тотоп алғыһыҙға, аңлатып тыйғыһыҙға, ҡурҡытып баҫтырғыһыҙға әйләнде. Казармаларҙа әле ҡубып һуғыштылар ҙа, әле ҡосаҡлашып үбешттеләр. Берәүҙәр ҡайтырға булып, ҡапҡаларҙы штурмланы. Һаҡсылар уларҙы аяҡ аҫтына атып ҡына ҡыуып ебәрә алды. Ниндәйҙер аңлатмалар талап итеп, медчастың, начальник йәшәгән яҡтың ишеген туҡманылар, тик асыусы булманы. Рамаҙан менән Василий һәм тағы ла бер нисә айыҡ ҡалғандарға ҡатын-ҡыҙ персонал торған яҡты ҡарап торорға ҡушылғайны. Ишектәре ныҡ, эстә ҡоралы һаҡсылары бар, шулай ҙа башын юғалтҡан иҫеректәрҙең нимә уйлап сығарырын белеп булмай. Егеттәр алмаш-тилмәш шул яҡта йөрөп әйләнде, яҡынлаусыларҙы йә ҡыуып ебәрҙе, йә икенсе хәбәргә әүрәтеп алып китте. Төнө буйы шулайтып берәүҙәре эсеп йөрөп, берәүҙәре күҙ-ҡолаҡ булып йөрөп таң аттырҙы. Яҡтырыуға, инде шешәләр бушап иҙән буйлап тәгәрәп йөрөй башлағас, кеме ҡайҙа ауған-ҡолаған ерҙәрҙә ҡырылышып йоҡлап бөттөләр. Ғәрип ветерандар пансионатындағы тәүге 9 май байрамы шулай үтте...

**(Дауамы бар).**

БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...

# БЫЛ БЕҘ ТҮГЕЛ!




**Күҙемә П.П. Свиньиндың "Башҡорт кибеткәһе (тирмәһе) эсе" тигән картина салынды һәм мин ундағы ят күренештәргә оҙаҡ итеп текләп ултырҙым.**

"П.П. Свиньиндың Рәсәй буйлап сәйәхәте" тигән альбомынан икән, 1820 йылғы һүрәт. Унда тирмә уртаһында, йәнәһе лә, башҡорт ире оҙон һаплы төрөпкә тартып ултыра, ер өҫтөндә усаҡ яғылған да, уның янында ике шәрә бала төтөн туҙҙырып ут менән уйнай, усаҡ өҫтөндә көршәк ҡайнай. Ситтәрәк шаршау артындағы ҡатындың асыҡ йөҙө һәм муйыны күренеп тора. Шулай уҡ уртаға оҙон ботло, нәфис муйынлы ҡомған ҡуйылған. Тирмә ситтәрендә ҡаралты һәм аңлайышһыҙыраҡ мебель йыһаздары ла бар.

Аптырап ҡараным мин был картинаға. Күпме генә ҡараһам да, ундағы милли һыҙаттарҙы таный алманым. Тапманым мин бында башҡорт мөхитен. Был көнсығыш стилендәге аңлайышһыҙ халыҡтарҙы төшөргән һүрәт ине. Беренсенән, ир кешенең башында әллә ниндәй нәмә? Хатта индеецтарҙың һалам, йөн һәм тауарҙан ҡушып яһалған баш кейемәнә лә оҡшап китә. Ә ҡулындағы төрөпкәһенә ҡарап, башта ҡурай микән был, тип уйлағайным, ныҡлабыраҡ ҡараһам, ул төрөпкә булып сыҡты. Былыны ла иран, пакистан ир-егеттәренең оҙон төрөпкә тартып, төтөн эсендә ултырыуына оҡшаш. Эргәһендәге ҡувшин да тик шул яҡтарҙа ғына һүрәтләнә, көнсығыш музейҙарында күҙгә салына торған әйбер. Шаршау ситендә күренә биреп торған ҡатын да көнсығыш ҡатын-ҡыҙҙары стилендә төшөрөлгән, хатта ҡаралтылар ҙа, башҡа ваҡ деталдәр ҙә беҙҙең халыҡҡа хас түгел. Кемдәр һуң улайһа был картинала? "Башҡорт тирмә эсе" тип яҙып ҡуйылған бит!

Ошо урында мин бер ҡыҙыҡ хәлде иҫләнем. Ноғайҙар шундай уҡ бер уҡ рәссамының ноғай яугирҙарын усаҡ янында төшөргән картинаһын үҙҙәре хаҡында түгел икәнен иҫбатлаған. Улар яҙыуынса, унда бөтөнләй ят кейемдәге һәм ят ҡорал тотҡан әллә кемдәр ултыра икән. Шундай уҡ боронғо картина. Ни өсөн улай булып сыҡҡанын тикшерә башлағандар икән, бәхтиһән, был урыҫ рәссамы бер ваҡытта ла ноғай илендә булмаған, уларҙың яугирҙарын да, ҡоралдарын да яҡшылап белмәгән. Бары башҡаларҙан ишеткәнен, сәйәхәтселәр һөйләгәнен һәм уйҙырмаларға таянып ҡына төшөргән был картинаны...

Ошо тәңгәлдә әлеге беҙгә ҡағылышлы картина тураһында ла "П.П. Свиньин тигән рәссам башҡорттар араһында булдымы ла, уларҙың тирмәһендә ултырҙымы икән?" тигән һорау тыуа. Әллә ул да башҡортто яҡынса күҙ алдына килтереп, имеш-мимештәргә таянып, көнсығыш халҡы һымағыраҡтыр тип уйлап яһаны микән? Борон бит башҡорттоң тарихын, көнкүрешен, фольклорын да күп осраҡта конторалардан сыҡмаған белемселәр яҙған, белгәндәрен дә төрләсә үҙгәртеп, яһалмаландырып бөтөргән.

Әйткәндәй, шундай картиналар аҙ түгел. "Башкирский эскадрон" тигән картинала өс Тарас Бульба тора. Тимәк, был рәссам да картинаһындағы кешеләргә үҙе белгән һәм үҙенә хас булған йөҙ-төҫтәрҙе биргән. Башҡорттоң төҫөн күргәне лә булмаған, тимәк. Нисек итергә икән бындай сәнғәт өлгөләре менән? Белгәнбелмәгән бар, кемдәрҙер ысынлап ошолай икән тип ҡарай. Бына шундай күҙәтеүҙәрем бар...

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

БАЛАҢА УҠЫ!

# БАТЫРҘАР ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТТӘР

### Мәргән менән Маянһылыу

Борон Урал буйында йәшәгән Нәҙерша ҡарт менән әбейенең бик матур ҡыҙҙары булған. Исеме Маянһылыу икән. Маянһылыуҙың сәсе ебәк кеүек ялтырап тора, ә биле бал ҡортоноҡо һымаҡ нескә генә, ҡашы ҡыйғас айҙай, тауышы ҡырсынташҡа һибелгән көмөштәй зыңғырлаҡ ҡына икән. Маянһылыу буй еткергәс, берҙән-бер көндө уны Нуғай тигән илдең ханы күреп ҡалған да яратҡан да ҡуйған. Маянһылыуы алам тип, илгә яу аҫҡан хан.

- Ни эшләргә һуң? - тип аптыраған Маянһылыуҙың атаһы Нәҙерша. - Мин бит көслө инем, батыр инем. Хәҙер йөҙ йәш тулды. Атҡа атлана алмайым, уҡ-һаҙаҡ тотоп, ата ла алмайым, - тип ҡайғырған Нәҙерша ҡарт. Маянһылыу атаһының бойоҡ йөҙөн күргән дә:

- Атай, сереӊ йәшереп балаңдан, бойоғоп торма улай, - тигән.

- Илде яу баҫты, балам. Ә йортомда бер батыр ҙа юҡ...
- Илде яуҙар баҫҡанда,
Барыһы атҡа менгәндә,
Мин дә атҡа менәйем,
Яу сабайым, атаҡай, - тигән Маянһылыу, быны ишеткәс.

Атаһы Маянһылыуының саялығын белһә лә был һүҙҙәргә аптырап киткән.

-Яуға барам тиһәң дә,
Дошманыңа яу асып,
Илдең ҡонон алырҙай,
Яуға батыр түгелһен, - тип ризалыҡ бирмәгән. Маянһылыу ҙа үҙ һүҙендә ныҡ торған.

- Алпамышаны ҡойонан Барсын алған түгелме? Данлы аҡбуҙ толпарын Нәркәс алған түгелме ?- тигән. Ҡыҙының ныҡышмал булыуын белгән атаһы:

- Йортомдан берәү ат менеп,
Яуға ҡаршы сыҡмаһа,
Минә хурлыҡ, балаҡай, - тип ризалығын биргән.

Маян, ғәскәр туплап, Мәргән тигән йәш батырға килеп ҡушылған. Мәргән ғәскәре ишәйгәнгә бик ныҡ ҡыуанған. Егеттәрҙе ерен-һыуын һаҡларға яуға саҡырып, тағы көс тупларға тип, оран һалып, Урал буйлап сығып киткән. Уға Тамъян, Бөрйән, Ҡыпсаҡ һәм башҡа ырыуҙарҙан бихисап батырҙар ҡушылған. Дошман да көслө булған. Саң-туҙан туҙҙырып, ауыһыҙ ныҡ һуғышҡандар. Мәргән үҙенә ярҙамға килгән Маянһылыуҙы ят ҡулына ҡалдырмаҫ өсөн айырылыуға ныҡ алышҡан.

"Тапаттырмабыҙ ерҙе дошмандан. Әсәй килен булған, атай кейәү булған тыуған илде, көләс йөҙлө Урал һылыуҙарынятҡа бирмәбеҙ", тип алышҡан башҡорт яугирҙары.

Бер ваҡыт һуғыш ҡапыл тынып ҡалған. Бәхтиһән, Нуғай ханы ҡалған ғына ғәскәрен эйәртеп, ҡасып киткән икән. Яуҙа һәләк булғандарҙы ҡәҙерләп ерләп, бәхилләшкәндәр. Иҫән ҡалғандары ырыу батыры исеме алып, тыуған төйәктәренә таралған. Ә Мәргән батыр туп-тура Нәҙерша ҡарт янына, Маянһылыуын һоратырға киткән.

Нуғай хандың ханлығы бына шулай ҡолатылған.

***✓ Алла үҙе барлыҡҡа килтергән бер нәмәне лә мәрхәмәтенән айырмай. Әммә кешеләр үҙҙәренә тәғәйенләнгән ризыҡҡа эйә булыу өсөн айырым көс түгергә кәрәклеген һәм уны бүлгәндә айырмалыҡтар булыуын белергә тейеш.***



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРҘӘРГӘ - ТОМАТ

■ Оҙаҡ йоҡлау - насар, ти ғалимдар. Аҙна буйына йыйылған йоҡоно туйҙырам, тип уйлаусылар ҙа хаталана, ти улар. Ялдарын өйрәнгән ваҡытта тороуҙан да яҡшыһы юҡ, шул саҡта дүшәмбе иртәһе һеҙҙең өсөн стресс тыуҙырмаясаҡ. Оҙаҡ йоҡлаусының йөрәге хәлһеҙ була. Тәүлегенә 11 сәғәткә тиклем йоҡлаусы ҡатын-ҡыҙҙар балаға уҙа алмай яфалана икән. Тик иртә тороу кешенең психик сәләмәтлегенә зыян итә икән. Ул тиҙ арый, ярһып бара, ти ғалимдар. Хатта психик ауырыуҙар барлыҡҡа килеүе бар. Йоҡола ла алтын урталыҡты табыу хәйерлелер, күрәһең.

■ Томат ир-егеттәрҙе инсульттан һаҡлай, ти Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары. 12 йыл барған тикшеренеүҙәрҙә меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан, уларҙың иң йәшенә - 46, иң олоһона 65 йәш булған. Ошо мәл эсендә 67 ир инсульт кисереп өлгөргән. Ғалимдар ҡан составындағы ликопен күләме буйынса ир-егеттәрҙе дүрт төркөмгә бүлгән. Инсульт иң түбән ликопенлы төркөмдә иң күбе булып сыҡҡан. Ликопен - йәшелсә һәм емештәргә ҡыҙыл төҫ бирә торған матдә. Ул томаттарҙа, дөрөҫөрәге, томат һутында һәм пастаһында күп.

■ Һәйбәт итеп ашайым, тигәндә һеҙ нимәне күҙ уңында тотаһығыҙ? Күптәр өсөн был: "Ашар өсөн аҡса йәлләмәйем", - тигәнерәк булып яңғырағаны шик тыуҙырмай. Магазин кәштәләре ризыҡтан һығылып торғанда шулай була инде ул. Әммә ғалимдар ябайыраҡ туҡланырға кәңәш итә. Мәҫәлән, Британияла ҡыҙыл сөгөлдөрҙө тикшереп, уның һуты кешенең сыҙамлылығын 16 процентҡа арттыра, тигән фекергә килгәндәр ғалимдар. Баҡтиһәң, ҡыҙыл сөгөлдөрҙә организмды кислород менән байытыусы тоҙҙар бар икән. Шуға ла был йәшелсә спортсыларға, йөрәк-ҡан тамырҙары менән ауырыусыларға ярҙам итә. Сөгөлдөр һуты юғары ҡан баҫымын түбәнәйтә, 24 сәғәт буйына был һөҙөмтә һаҡлана. Стресс мәлендә йоҡлай алмағандар, хәтере насарайыусылар сөгөлдөр һутын төнгөләккә эсһен. Шулай уҡ өлкән кеше өсөн тәүлегенә 200 мл кишер һуты эсеү кәрәк. Ә гел дөрөҫ туҡланмау һимереүгә генә түгел, хроник арыу һәм ялҡаулыҡҡа алып килә.

■ Психик яҡтан тотороҡло булған кешеләр үҙҙәренең тормошо әлеге мәлдә үткәнгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ, ә киләсәк тағы ла яҡтыраҡ буласағына ышана. Депрессия мәлендә был инаныс тулыһынса юҡҡа сыға, ти белгестәр. Канада ғалимдары раҫлауынса, үткәндәргә ҡарағанда бөгөнгө яҡшыраҡ тип иҫәпләүселәр ун йылдан да ошондай уйҙа була. Ә кем үткәне менән бөгөнгөһө араһында айырма күрмәй, киләсәген дә төҫмөрләй алмай. Тап улар яйлап депрессияға килә лә инде. Депрессия хәлендәге кеше киләсәге тураһында уйлауҙан бөтөнләй баш тарта. Шуға ла уларҙы дауалаған саҡта ошоно иҫәпкә алырға һәм яҡшы үҙгәрештәргә көйләргә кәрәк, ти ғалимдар.

■ Һыуҙы күп эскәндән һуң мейе эшмәкәрлеге боҙолоуы ихтимал. Бөйөрҙәр сәғәтенә 800-1000 мл һыу эшкәртә ала. Ошо күләм артып китһә, кеше организмында натрий балансы боҙола. Кемдең бөйөрө сирле, улар өсөн һыуҙы саҡ ҡына артыҡ эсеү ҙә хәүефле. Эксперттар билдәләүенсә, һыуҙы күп эсеү бөтөнләй һыу эсмәү кеүек үк берҙәй насар. Уртаса күрһәткестәр буйынса, кеше тәүлегенә 3-4 литр шыйыҡлыҡ эсергә тейеш.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЙӘН САФЛЫҒЫ

## саф аҙыҡтан



**Ислам дине раҫлауынса, ерҙәге бөтөн йән эйәһенә туҡланыу алдан уҡ билдәләнә. Сабый ҙа әсә ҡарынында уҡ туҡлана башлай һәм донъяға килгәс, ғүмеренең аҙағына тиклем, үҙенә тәғәйенләнгән ризыҡты ашай.**

Ғәжәйеп күренештәр менән тулы серле был донъяла һәр кемгә тәғәйен ризыҡ билдәләнеүе Алланың ни тиклем Ҡөҙрәтле һәм Ҡеүәтле булыуы тураһында һөйләй. Күктә осоусымы, ерҙә йөрөүсеме йә һыуҙа йәшәүсе йәнлек булһынмы, барыһына ла көн һайын ерҙә бына тигән ризыҡ-ниғмәт бар. Бер кем дә башҡаға тәғәйенләнгән аҙыҡ менән туҡланмай. Бында тәрән мәғәнә бар. Ҡөрьәндең бер аятында шулай тиелә: "Ер йөҙөндә ризығы Алла ҡулында булмаған бер генә йән эйәһе лә юҡ, һәм ул уның ҡайҙа туҡталырын һәм ҡайҙа тороуын белә. Алланың мәрхәмәте киң. Үҙенә ризыҡ табырлыҡ хәле булмаған сирлеләр, яралылар, ҡарыуы ҡайтҡан ҡарттар - барыһы ла Алла яҡлауында. Ҡөрьәндә: "Үҙҙәренә ризыҡ таба алмаған күпме хайуандар бар - Алла уларҙы ла, һеҙҙе лә ризыҡландыра, берәүҙе лә ризыҡтан мәхрүм итмәй. Ул ишетә, белә!" (Әл-Ғәнкәбут сүрәһе).

Ҡырмыҫҡа кеүек үҙенә ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ әҙерләүсе йән эйәләре һирәк. Ашарына әҙерләү сараһын күрмәһә лә, күбеһе һалҡын ҡышты имен-аман үткәрә, сөнки Алла үҙе барлыҡҡа килтергән бер нәмәне лә мәрхәмәтенән айырмай. Әммә кешеләр үҙҙәренә тәғәйенләнгән ризыҡҡа эйә булыу өсөн айырым көс түгергә кәрәклеген һәм уны бүлгәндә айырмалыҡтар булыуын белергә тейеш. Әгәр кешеләр, Алла ҡушҡанса, бер-береһен ихтирам итеп, үҙ-ара ярҙамлашып, аңлашып йәшәһә, айырмалыҡтар булмаясаҡ. Ҡөрьәндә, бөтөн хазина Алла ҡулында һәм яҙмыш ҡушыуы менән барса нәмә алдан билдәләнгән, тип әйтелгән. Ләкин байлыҡты - дәрәжә, ә ярлылыҡты кәмһетеү, тип ҡабул итергә ярамай, сөнки икеһен дә Алла бүлгән. Ҡөрьәндә: "Беҙ бүлдек, һәм бәғзеләре икенселәрен хеҙмәткә алһын өсөн уларҙың береһенең дәрәжәһен икенсеһенән юғарыраҡ итеп ҡылдыҡ. Ә Раббыңдың рәхмәте улар йыйған нәмәгә ҡарағанда яҡшыраҡ!" - тиелә. Хөкөм көнөндә байға байлығын ниндәй юлдар аша йыйыуы, уны нисек тотоноуы һәм мохтаждарға ярҙам итәме-юҡмы - шулар тураһында яуап бирергә тура киләсәк. Кешене рәнйетмәй, өҫтөнән хакимлыҡ итмәй, донъялыҡта тотонолған, рөхсәт ителгән юл менән эшләп йыйған байлыҡтың ғына файҙаһы була. Алдаҡ юл менән йыйылған байлыҡ иһә, күңел тыныслығына, ыҙа сигеүҙәргә алып киләсәк. Ярлынан иһә, нужа күргәндә зарланғанмы, фәҡирлегенән башҡалар зыян күргәнме, кәрәгенән артыҡ нәмәләр булдырырға теләгәнме, көнсөл, яуыҙ булғанмы һәм намыҫ, әхлаҡ, ғорурлыҡ төшөнсәләрен һаҡлап ҡала алғанмы, шулар хаҡында һораясаҡтар. Киң күңелле бай кеүек сабыр, түҙемле ярлы ла халыҡ араһында ихтирамлы һәм Алла уларҙан ҡәнәғәт. Әгәр был кешеләр Аллаға рәхмәтле икән, Ул хазиналарын икеләтә арттырып бирә: "Әгәр шөкөр ҡылһағыҙ, Мин һеҙгә арттырырмын", ти.

Ислам динендә байҙарҙың ярлыларға зәкәт биреүе мотлаҡ һанала. Бер мәл бәйғәмбәр Әбү Бәкр, Үмәр, Усман һәм Әли үҙҙәренә оҡшаған өс нәмәне һанаған. Уларға Бәйғәмбәр ҡушыуы буйынса Ябраил да ҡушылған. Ябраил: "Әгәр мин һеҙҙең донъялағы ерҙә йәшәгән булһам, өс нәмәне эшләргә, мәҫәлән, юлдан аҙыусыларға юл күрһәтергә, фәҡирлегенә ҡарамай, ғибәҙәт ҡылыусыларҙы ҡурсаларға, күп балалыларға ярҙам итергә яратыр инем..." тигән. Донъяла Алланың ризыҡты ғәҙел бүлеүенә шикләнмәй, барына шөкөр итеп йәшәүселәр һәм, киреһенсә, Хоҙай биргәндәрҙең барыһы ла үҙе өсөн генә ебәрелгән байлыҡ тип маһайып йәшәүселәр бар. Фәҡирлектән ҡотолоу юлдарын эҙләгәндә ыҙа сигеүҙәрен сабыр үткәреүселәрҙең һуңынан ожмахҡа әләгеүе билдәле. Ә бәғзе берәүҙәр байлыҡта-муллыҡта бер хәсрәтһеҙ йәшәй һымаҡ тойолһа ла, һуңынан уларҙың бәлә-ҡазаларға юлығыуы ихтимал, сөнки башҡаларҙы ҡан-йәш түктереп йыйған байлыҡтың бер ваҡытта ла файҙаһы булмай.

Кешегә күпме ғүмер бирелеүе, күпме ризыҡ ашары - барыһы ла яҙмышына яҙылған. Алла үҙенең бәндәләрен эшһә-

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

# АФӘТТЕҢ БАШЫ...

## ғаилә табындары



*"Беҙ - ҡунаҡсыл", тигән һүҙҙәр,*
*"Беҙ - ҡол", тиеп ишетелә!..*
*Салауат Әбүзәр.*

**Гөрләп-шаулап торған байрам табындары артында урғылып мәле еткән вулкан кеүек ултырған хәлемде рус яҙыусыһы, фәһемле афоризмдар авторы Аркадий Давидович ҡыҫҡа ғына итеп аңлатҡан: "Для непьющих праздники хуже будней".**

Иманым камил, хужалары ни тиклем генә ихлас булмаһын, туктауһыҙ рюмка артынан рюмка йөрөтөлгән табындарҙы, байрамдарҙы йәне һөймәгәндәр бер мин генә түгелдер. Ҡымыҙ, буҙа эсеп ҡунаҡ булып, осрашып, хәл-әхүәл һөйләшеп, рәхәтләнеп йырлап-бейеп күңел ас ине ул ихтирамға лайыҡ хужа хөрмәтенә... Әммә иҫерткес эсемлектәр менән "сағыуландырылған" байрамдар, табындар, ай-һай, күп уҙғарыла шул беҙҙә. Ә бит күпселек кеше, өнәмәһә лә, ҡунаҡҡа саҡырған хужаны ихтирам итеп шундай байрамдарға барырға, шешә тулы табын артында риза булып ултырырға мәжбүр. Шул табындарҙа баштшалыҡ иткән "төмһөрәймәй, күңеллерәк ултырыр өсөн" берике рюмка эсергә кәрәк, тигән уйлап сығарылған ҡағиҙәгә буйһоноп, кемдәрҙер "бөтәһе кеүек булыр өсөн" рюмкаһындағын йотоп ҡуя. Шулай башлана ла инде ыуыҙ кеүек йәш кенә ҡатындарҙы, ирҙәрҙе һиҙҙермәй генә араҡы ҡоллоғона төшөрөүҙәр. Ә был кемдәрҙер өсөн тик файҙаға ғына. Үҙҙәре эсергә яратып, башҡаларҙың да үҙенә әшнә булыуын, һис юғында, эскелек ойоштороуына ҡаршы төшмәүен, ғәйепләп өндәшмәүен теләгән кешеләр тоҙағына эләгә лә ҡуя инде бәғзеләр. Һыйлы табындан табынға йөрөүҙең аяныс эҙемтәһен аңлағанда, һуң булып ҡуйыуы ла бар. Ярай ҙа, рух, аҡыл көсө еңеп, шул тоҙаҡты урап үтә, өҙөп ырғыта алһаң. Бөгөнгө көндә шау-шыулы ҡунаҡ йыйыуҙарға маһир бик күп ҡунаҡсылдар әкрен генә ошо тоҙаҡҡа эләккән, һәм унан ысҡынырға бик үк теләп тә бармаған кешеләр. Сөнки эсергә теләгәндән генә эсһәң, ғәйепләүҙәре бар, ә былай - сәбәп бар, ҡунаҡ йыймайынса мөмкин түгел! Ә ҡунаҡ йыйырға сәбәп күп: балаһына 10 йәш, ейәненә бер йәш тулған, улы армиянан ҡайтҡан, ҡыҙы уҡыуҙы тамамлаған һ.б. - нисек итеп "йыуҙырмайһың" инде?

Эскелекте бөтөнләй өнәмәгән ғаиләлә тыуып үҫтем. Атайымдың туйҙарҙа, оло ҡунаҡтарҙа ла "Йә, бөтөргәнсә эс, нимә, әллә мине хөрмәт итмәйһеңме?" тиеп ҡунаҡ һыйлағанын бер ваҡытта ла күргәнем дә, ишеткәнем дә булманы. "Эсеү - тормош нормаһы" тигән йәшерен идеология алып барылған илдә йәшәгәс, улар ҙа табынға араҡы ултыртырҙар ине. Ҡунаҡтарының сама белеп кенә эсеп ултырырға теләүҙәрен телдәре менән әйтмәһәләр ҙә, бөтә фиғелдәре менән аңлатырға тырышырҙар ине. Ҡунаҡ "күңелле" үтһен өсөн хаттинлашып китеүселәрҙе лә ипләп кенә тыйырҙар ине. Шундай шаулы табындар уҙғандан һуң икенсе көнөнә балалары алдында ҙур уңайһыҙланыу кисереп, эскелектең бер ваҡытта ла яҡшыға алып бармауы тураһында иҫкәртерҙәр ине. Табын ойошторған, ниндәйҙер ғүмер байрамын билдәләп, ҡунаҡ йыйған хужаға хөрмәт күрһәтеүҙең башҡа саралары ла барлығы тураһында фәһемле, күңелгә һеңдергес һөйләшеүҙәр алып барырҙар ине. Алкоголде күрә алмаусанлыҡ беҙҙә ана шулай асыҡтан-асыҡ матур һөйләшеүҙәрҙә тәрбиәләнде. Әсәйем иһә бынан 28- 30 йылдар элек илдә "ҡоро закон" индерелгәс, ауыл советында айыҡлыҡ комиссияһы рәйесе булып та, оҙаҡ йылдар ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе булып та "йәшел йылан"ға ҡаршы бик ҡыйыу саралар үткәргән

йәр, яуаплы, тырыш, аҡыллы һәм әҙәпле итеп күрергә теләй. Әгәр кеше рәхсәт ителгәндең сигенән сыға икән, тимәк, ул Аллаға ҡарыша. Кешеләр Алла ҡушыуы менән үҙенә ашар ризыҡ табырға тырыша. Үҙендә аслыҡтан һаҡлау инстинкты - ул организмдың сиргә ҡаршы көрәшкә тәьҫир итеүе менән бер. Тәғәм ризыҡ табыу хәстәре - үҙеңде тормош ауырлыҡтары алдында яҡлау, хатта аҙға ғына булһа ла көн итмешеңдә етеш итеп тойоу көрәклегенән килә. Бер мәл бәҙүән ғәрәп Бәйғәмбәр янына килә лә, үҙенең ауыр хәлдә ҡалыуын һөйләп, унан ярҙам һорай. Бәйғәмбәр һаулығы шап-шаҡтай, мыҡты бәндәгә ҡарай ҙа:

- Мөлкәтеңдән нимәләрең бар?- тип һорай.

- Бер тоғом һәм һауытым бар.

- Уларҙы балтаға алмаштыр; утын әҙерләп һатһаң, тамағың да туҡ булыр, өҫ-башыңды ла бөтәйтерһең.

Бер аҙҙан теге йәнә Бәйғәмбәр янына килә һәм уның кәңәшен тотоп эшләгәс, өйөндә бәрәкәт артыуын һәм Алланың фәкирлектән арындырыуын бәйән итә.

Шулай итеп, нимәне булһа ла һорарға Ислам дине рәхсәт итә, ләкин бик тә мохтаж булғанда ғына рәхсәт итә, һораныуҙы хупламай. Ризыкты теләһә ниндәй юлдар менән түгел, ә мотлаҡ намыҫлы юл менән табыу мөһим, һәм йотҡан бер телем ризығың физик һәм рухи яҡтан да саф, таҙа булыуы мотлаҡ. Ғәҙел юл менән тапҡан ризыҡ рухи үҫешкә ярҙам итә, күңел тыныслығын нығыта һәм иман килтереүҙә йән рәхәтлеге бирә. Саф аҙыҡ - ул тән һәм йән сафлығы, тормош мәғәнәһен аңлау, белемгә эйә булыу һәм Алланы ысын йөрәгеңдән яратыу, тиғән һүҙ. Ә хәрәм аҙыҡ - ул күңел тыныслыҡһыҙлығы, шик-шөбһәләр, йәрәк хафаланыуы һәм көсөргәнешле уйҙар шауҡымында йәшәүгә алып килеүсе ағыу. Ул ике донъяла ла мәңгелек хурлыҡҡа, бәхетһеҙлектәргә һәм ыҙа сигеүҙәргә алып килә...

Булғанына ҡәнәғәт булған, шөкөр итә белгән һәр кеше бай. Күңеле тар кешене иһә йыйған байлығы ҡотҡармай, ә кемдең күңеле бай, Алла уны муллыҡынан айырмаҫ. Ундай кешенең бер йылмайыуы ла саҙаҡа...

# ТӘН САФЛЫҒЫ

## йыуыныуҙан

**Бәйғәмбәр ир-атҡа: "Тәбиғәттән биш нәмәне: сөннәтләү, сат тирәһендәге сәс төксәләрен ҡырыу, тырнаҡ ҡырҡыу, ҡултыҡ аҫтын таҙартыу, мыйыкты тигеҙләп киҫеү" кәрәклегенең үтә мөһим булыуын белдергән. Икенсе бер хәҙистә ун нәмә тураһында бәйән ителә. Шул хәҙистәргә таянып, кешенең тәбиғи талаптарын һанап сығайыҡ:**

1. Сөннәтләү - ул кешенең Ислам диненә ҡарауының мөһим билдәһе. Ир баланы ете көнлөк сағынан һәм бәлиғ булыу йәшенә еткәнгә тиклемге арауыкта сөннәткә ултырталар. Сөннәтләү - ул бик тә кәрәкле процедура, сөнки ул кешенең һаулығына яҡшы йоғонто яһай, ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттең гармониялы үҫешенә булышлыҡ итә. Бөгөн сөннәтләүҙең кәрәклеген бөтөн донъя танып, хатта христиан динле илдәрҙә лә ир баланы сөннәткә ултыртыу йышая.

2. Тырнаҡтар тигеҙ итеп, бармаҡтарҙы яраламай ҡырҡылырға тейеш. Уны аныҡ бер көндә ҡырҡыу кәрәклеге билдәләнмәһә лә, Бәйғәмбәрҙең тырнаҡтарын йома көнөндә генә ҡырҡырға яратыуы билдәле. Оҙон тырнаҡлы ҡатын-ҡыҙҙың ашарға бешереүен Ислам дине хупламай, сөнки ундай тырнаҡтар аҫтына һаулыҡ өсөн зарарлы бысраҡ йыйылыуы һәр кемгә билдәле.

3. Ҡултыҡ аҫтын таҙартыу иһә, ундағы сәс төксәләрен ҡырып, йә махсус эскәктәр ярҙамында йолҡоп ташлауҙан башлана. Иң тәүҙә уң ҡулдың ҡултыҡ аҫтын таҙартыуҙан башлау фарыз.

4. Ислам дине тәндә таҙа тотоуға һәм һаулыҡты һаҡлауға айырыуса ҙур иғтибар бирә. Тәндең енси урындарындағы сәс төксәләрен таҙартмау шелтәләнә.

5. Мыйыкты өҫкө иренгә тиклем ҡыҫҡартып, тигеҙләп ҡырҡып тороу фарыз, сөнки мыйыктың өҫкө ирендән аҫҡа һәленеп төшөүе иң йәмһеҙ күренеш һанала. Иң мөһиме: ашағанда мыйыҡ ризыкҡа тейергә тейеш түгел.

6. Ғалимдар, мәзхәбкә нигеҙ һалыусы Хәнәфи, Мәликә һәм Ханбаланың фекеренсә, мосолман ирҙәренә һаҡалдарын бөтөнләй ҡырып ташлау тыйыла. Мәзхәб Шәфи әйтеүенсә, һаҡалды ҡырып ташлау мәкрухлыҡҡа тиң. Муйындан башлап бөтөн сикәлә үҫкән оҙон һаҡалды һәр саҡ ҡырҡып, тигеҙләү мөһим. Һаҡалдың оҙонлоғо бер тотамдан артмаҫҡа тейеш.

7. Уртты һәм тештәрҙе таҙартҡанда йомшаҡ ҡабыҡлы эрак ағасы ботаҡтарын, йәғни мисуаҡты (сиуаҡ) файҙаланырға мөмкин. Бәйғәмбәрҙең мисуаҡты файҙаланыу тураһындағы байтаҡ кәңәштәре бар. Ул: "Әгәр мин өммәтем өсөн ҡатмарлылыҡтарҙан ҡурҡмаһам, хатта һәр намаҙ алдынан мисуаҡты файҙаланырға ҡушыр инем", - тиғән. Уның көрәштәше Хөзәйфә былай ти: "Бәйғәмбәр иртәнсәк тороу менән иң тәүҙә мисуаҡ менән тешен таҙарта". Ғәйшәнең һүҙҙәренә ҡарағанда, улар Бәйғәмбәргә кистән үк мисуаҡ һәм һыу әҙерләп ҡуйған, сөнки Алла Бәйғәмбәрҙе ҡасан теләһә, шунда уятҡан.

8. Танау ҡыуыслыҡын һыу менән (ғөсөлдә - мотлаҡ) йыуып таҙартырға кәрәк.

9. Кер тиҙ йыйылған урындарҙы (бармаҡ аралары, ҡолаҡ һ.б ) таҙартып тороу фарыз.

10. Теште таҙартҡанда, уртты яҡшылап сайҡатып, уны яҡшы итеп сафландырыу - иң төп ғәмәлдәрҙең береһе ул.

кеше. Ауылдағы ғына түгел, Башҡортостандағы иң тәүге айыҡ туйҙы ла уның етәкселегендә үткәрҙеләр, Өфөнән телевидение килеп төшөрҙө хатта.

Мин дә йыш ҡына яҡындарым, таныштарым араһында: "Туҡтатығыҙ ошо араҡыға табыныпı йәшәүҙе, ғүмерегеҙҙе әрәм итеүҙе! Айығырға, эсмәҫкә кәрәк бит!" - тип һүҙ башлай торғайным. Ләкин улар араһында: "Һинең атаңды ла 70 йыл элек иҫерек күргәйнем, һинең әсәң дә 65 йыл элек мейес башында өс литрлыҡ банкаға бал ҡойған кеше әле, так что, артыңды ҡыҫ, үҙеңде бел!"- тиеп, минең ауыҙҙы ябырға маташыусылар табылып ҡына торор ине. Һарыҡтың ҡойроғо ҡүтәрелде, тип көлгән күҙә шикелле, үҙҙәре рәтендә күрергә теләүселәр хөрмәтле кешегә лә бысраҡ ягырға ғына тора бит инде ул.

"Үҙеңде бел" тиғәндән. Әгәр ҙә яҡындарың араһында, үҙ туғаныңмы ул, иреңдең туғанымы, эсергә яратыусылар, байрамса тормошҡа өҫтөнлөк биреүселәр бар икән, халыҡ араһында айыҡ йәшәү рәүешен пропагандалау бик ҡыйын. Ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе булып, ауыл советына ҡараған ауылдарҙа араҡы һәм көмөшкә һатыусыларҙы фашлаусы рейдтар ойошторғанда, эскелектән аралаусы һөйләшеүҙәр алып барғанда шуға инандым. Уларҙың ауыҙынан бер ваҡытта ла "Юҡ, башҡаса самогон менән һатыу итмәм, рәхмәт аңлатып әйткәнеңә", - тиғән һүҙҙәр ишетелмәне. Ә рейд ағзаларына ярһып-ярһып: "Үҙеңде бел, үҙеңдекен бел", - тиеп, хәтер янсығыңдағы әллә ниндәй булған-булмаған хәлдәрҙе һөйләп, бер ғәйепһеҙ кешеләргә яла ягыуҙар ғәҙәти күренеш ине. Эскелекте хуплап, иҫерткес эсемлектәр һатып ятыусы намыҫһыҙ кешеләр үҙҙәренең бысраҡ шөғөлөн аҡлар өсөн бөтә зәһәрләктәрен ҡулланыусан була. Үҙҙәрен төшөмлә көсеп менән шөғөлләнеүсе, һәр кемдең дә ҡулынан килмәгән бик кәрәкле эш менән булышыусы итеп күрһәтергә теләп, шапырынырға ла күп һорап тормай ундайҙар. "Һин "Һатмағыҙ!" тиһәң дә, ана, кисә шул-шул кеше лә килеп алып китте әле, рәхмәт әйтте", тип, ауылдың дәрәжәле, хөрмәтле кешеләренең исемен атап, аҫтыртын ҡәнәғәт йылмайып торор ул. Көрәште кемдән башлап, кем менән тамамларға белмәй, илар сиккә етеп ҡайтыла инее шундай саҡтарҙа. Ә инде шул хаиндарҙың тоҙағына ныҡ уралған кеше һиненең өйөңдә үк йәшәй икән, был айыҡлыҡҡа ынтылған кеше өсөн икеләтә, өсләтә ауыр көрәш. "Эргәмдәге яҡын кешемде лә иҫерткес эсемлек ҡоллоғонан йолоп ала алмайым икән, тотош халыҡты нисек аралай алам мин?"- тиғән икеләнеүҙәр һәр кемде лә төшөнкөлөккә килтерә. Араҡы ауы өҙөп сығы алмаҫлыҡ арҡан, араҡы яратыусылар ҡара яу булып, тирә-яҡты баҫҡан еңелмәҫ дошман булып күренә, рухты, һаулыҡты, яҡты киләсәкте ышаныслы көмертә. Бик күптәр ошо төшөнкөлөктән сығыу юлын күрмәгәнгә генә лә үҙ-үҙенә, үҙ балаларына, ғаиләһенә дошман булып, эскеселәр рәтен тулыландыра.

Эсергә ятаҡан кеше бер ваҡытта ла үҙен "Мин эскесе" тип әйтмәй. Үҙен араҡынан араларға маташыуҙы ла ҙур ҡәнәғәтһеҙлек менән ҡабул итә улар. "Мин эскесе түгел", тиҙәр. Үҙҙәренең эсергә әүәҫләнеүендә лә йә кемделәр башҡа берәүҙе, йә ауыр тормош шарттарын, йә тормошҡа ашмаған хыялдарын ғәйепләйҙәр. Һәм һинең изгелек уйлап әйткән тыйыу һүҙҙәрен дә ғәҙәл булмаған тәнҡит тип ҡабул итәләр. Был яҙмамды ла мин ишеттерергә теләгән, аҡылдарына килергә өндәгән кешеләр уҡымаҫ. Уҡыһалар ҙа "Эй, яҙған булған шунда!" тиерҙәр. Һәм тағы ла өҫтәл тултырып табын йыйырҙар, осрашыу хөрмәтенә, байрам хөрмәтенә бер-бер артлы рюмкалар түңкәрелер - ҡунаҡсыл бит беҙҙең халыҡ.

Эйе, араҡы аҡыллы юйыусы бик көслө ағыу. Уны һатыусылар инде иң гонаһлы эш башҡарыусылар, ғаиләләрҙе, яҙмыштарҙы ҡыйратыусылар. Ә инде уларҙың оятһыҙ шөғөлө арҡаһында бер ғәйепһеҙ балаларҙың яфа сигеүе - бер нисек тә аҡлап булмаҫлыҡ енәйәт. Күптәр быны ҙур афәт икәнен аңлай, килешә. Тик яңғыҙ-ярпы ғына көрәшеү эскелек ҡоллоғона эләккәндәрҙе тиҙ генә ҡотҡара алмаҫ шул. Әйҙәгеҙ, берҙәм ҡуҙғалайыҡ эскелек һаҙлығына бата барыусы, эсереүселәр ҡоллоғона эләгеүсе милләттәштәребеҙҙе ҡотҡарыуға. Аңлатыу эше генә алып барыуҙың һөҙөмтәһе бик аҙ булыр. Аныҡ эштәр эшләргә, ҡаты саралар ҡулланырға кәрәк алкоголле эсемлектәр һатыусыларға һәм ҡулланыусыларға ҡаршы. Баймаҡ, Әбйәлил һәм башҡа райондарҙың ир-егеттәре ошо көрәште башланы, ҡушылайыҡ улар сафына.

**Миләүшә ҠЫҘРАСОВА.**

## СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Тағы бер кәңәш: телевизорҙы экрандан түгел, ә уның шкафтың быялаһындағы сағылышынан ҡарарға тырышығыҙ. Сағылыштағы һүрәт артыҡ сағыу булмай, күҙ менән сағылыш араһындағы ара алыҫая. Ә инде дөрөҫ мөйөш һайлаһағыҙ, экрандан төшкән нурҙың быялала полярләшеүе күҙҙәр өсөн файҙалы. Әлбиттә, һәр саҡ телевизорҙы быялалағы сағылыш аша ҡарап булмай, сөнки яҙыуҙарҙы уҡый алмаясаҡһығыҙ. Шуға күрә был ысулды күнекмә булараҡ ҡына тәҡдим итәбеҙ.

### Компьютерҙа нисек эшләргә?

Күҙҙәрегеҙ оҙаҡ хеҙмәт итһен өсөн уның мускулдарын көсөргәнештә тоторға ғына түгел, уларҙы көсөргәнештән арындырып та өйрәнергә кәрәк. Шуны ҡағиҙә итеп алығыҙ: уҡығанда йәки компьютерҙа эшләгәндә бер үк арауыкта хәрефтәр менән сыбарланған биткә күҙегеҙҙе лә алмайынса оҙаҡ ҡарамағыҙ. Исмаһам, бер нисә секундҡа булһа ла эшегеҙҙән айырылып тирә-яғығыҙға, алыҫҡа ҡарап алығыҙ. Бының өсөн һәр 45 минут һайын тәҙрә эргәһенә килеп күңелһеҙ пейзаж күҙәтергә тимәгән. Сәғәтенә кәм тигәндә бер тапҡыр күҙҙәрҙе китаптан йәки эштән айырырға кәрәк. Уҡыусыларға һәм студенттарға бындай мөмкинлек бирелгән - дәрестәр һәм лекциялар араһында тәнәфестәр бар. Ә өлкәндәр үҙҙәре хәл итә, шуға күрә эш өҫтәлегеҙҙең ҡаршы яҡ стенаһына матур берәй картина элек ҡуйығыҙ ҙа, уға сәғәт һайын ҡарағыҙ. Ул төҫлө һәм сағыу булһа бигерәк тә яҡшы. Ҡыҙыҡһыныу юғалмаһын өсөн картиналарҙы алыштырып торорға мөмкин. Әгәр өйөгөҙҙә балалар булһа, был кәңәш бигерәк тә көнүҙәк. Яратҡан йәнһүрәттәр геройҙары кескәйҙәрҙең күҙен көсөргәнештән арындырып ҡына ҡалмай, уларҙың психикаһын да тынысландыра, өйгә бирелгән эште эшләгәндә килеп тыуған стрессты еңергә ярҙам итә.

Тағы ла: әгәр өс аҙна күҙлек киймәйенсә был ваҡытты дингеҙ буйында, армыттары әллә ҡайҙан күренгән тауҙарҙа үткәрһәгеҙ һәм китап уҡымаһағыҙ, экранға ҡарамаһағыҙ, күҙҙәрегеҙҙең күреүе 1 диоптрийға яҡшырыуы мөмкин. Эшләп ҡарағыҙ!

### Күҙҙәр өсөн массаж һәм ванна

Күҙгә массажды һаҡ ҡына, йомшаҡ ҡына ҡағылып эшләргә кәрәк, сөнки күҙҙәр тирәһендәге нервҡа тәьҫир итеү организмдың башҡа ағзаларына ла йоғонто яһай. Мәҫәлән, күҙ алмаларына баҫҡылағанда пульс әкеренәйеүе мөмкин. Бындай алымды табиптар тахикардия (пульстың йыш булыуы) менән интеккән пациенттарға тәҡдим итә. Брадикардиялы пациенттарға, киреһенсә, бындай ысул зыян килтереүе мөмкин. Күҙ тирәләй массаж түбәндәгесә эшләнә. Ябыҡ күҙ ҡабаҡтарын бармаҡтар менән һыйпау, вибрация, саҡ ҡына баҫҡылау уларға ыңғай йоғонто яһай һәм ҡан әйләнешен яҡшырта. Күҙ эргәһендәге өлкәне түңәрәкләп массажлау күҙ нервын тонуста тота. Бындай массажды ике - һуҡ һәм урта бармаҡ менән эшләгеҙ. Тәүҙә күҙҙең аҫҡы яғынан - сикәнән танауға ҡарай, артабан өҫкө ҡабаҡтан ҡаштар аҫтынан сикәгә табан эшләгеҙ. Бындай хәрәкәтте 8-16 тапҡыр ҡабатлағыҙ. Үс менән башҡарырға ла мөмкин.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



## 20 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.20 "Сегодня 20 мая. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.30 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Мама Лора". [16+]
23.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
0.30 "Познер". [16+]
1.30, 3.05 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]
4.15 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Всё могло быть иначе". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**18.00 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**19.00, 22.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00, 5.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Х/ф "Упакованные". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 VII Международный фестиваль тюркоязычных театров "Туганлык". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 21 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.20 "Сегодня 21 мая. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 4.10 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.15 Т/с Премьера. "Мама Лора". [16+]
22.15 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.15 Чемпионат мира по хоккею-2019. Сборная России - сборная Швеции. Прямой эфир из Словакии.
1.30 "Вечерний Ургант". [16+]
2.05, 3.05 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Всё могло быть иначе". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 С мотором... [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 "Честно говоря". [12+]**
**23.15 Күстәнәс. [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Х/ф "Золото Кольджата". [16+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 VII Международный фестиваль тюркоязычных театров "Туганлык". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 22 МАЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.20 "Сегодня 22 мая. День начинается". [6+]
9.55, 2.00 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 3.40 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 2.50, 3.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Мама Лора". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]
4.20 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Всё могло быть иначе". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 23.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00, 5.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мужчина в доме". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 VII Международный фестиваль тюркоязычных театров "Туганлык". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 23 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.20 "Сегодня 23 мая. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 3.50 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Мама Лора". [16+]
23.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.00 Т/с "Агент национальной безопасности". [16+]
4.30 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Всё могло быть иначе". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.45 С мотором... [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**23.15 "Песня года". [12+]**
**23.45 Современник. [12+]**
**0.00 Х/ф "Любовь из прошлого". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 VII Международный фестиваль тюркоязычных театров "Туганлык". [12+]**
**5.00 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 24 МАЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.20 "Сегодня 24 мая. День начинается". [6+]
9.55, 2.25 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 4.00 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Три аккорда". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.25 Х/ф Премьера. "Киллер поневоле". [18+]
4.40 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Х/ф "Мои дорогие". [12+]
1.15 Х/ф "Ненавижу и люблю". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 Весело живем. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета Башкортостан". [12+]**
**18.00 У дачи. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**23.15 Дневник VII Международного фестиваля тюркоязычных театров "Туганлык". [12+]**
**23.30, 3.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.15 Х/ф "Вероника больше не придет". [16+]**
**2.15 VII Международный фестиваль тюркоязычных театров "Туганлык". [12+]**
**3.45 Х/ф "Любовь из прошлого". [16+]**
**5.30 Д/с "Равная величайшим битвам". [12+]**

## 25 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30, 6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.30 Х/ф "Приказано взять живым". [0+]
8.10 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10 Д/ф Премьера. "Охотник за головами. В объективе - звезды". [16+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Идеальный ремонт". [6+]
13.20 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.30, 21.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
23.00 Х/ф Премьера. "Довлатов". [16+]
1.20 Д/ф "Rolling Stone: История на страницах журнала". [18+]
3.25 "Модный приговор". [6+]
4.20 "Мужское / Женское". [16+]
5.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Кузнец моего счастья". [12+]
13.40 Х/ф "Огонь, вода и ржавые трубы". [12+]
17.30 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
0.20 Х/ф "Когда его совсем не ждёшь".

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Чичиленд". [0+]**
**8.45 "Большой чемодан. [6+]**
**9.30 С мотором... [12+]**
**9.45 "Физра". [6+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Книга сказок". [0+]**
**10.30 "МузКәрәҙ". [0+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [0+]**
**11.00 Күстәнәс. [12+]**
**11.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**12.00 Первый турнир Терра Башкирия по конному спорту в честь 100-летия Республики Башкортостан. [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Рустема Шагбалова. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Д/ф "Смерть - точка или начало". [12+]**
**22.30, 2.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 Дневник VII Международного фестиваля тюркоязычных театров "Туганлык". [12+]**
**23.30 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.15 Х/ф "Лев".**
**2.45 VII Международный фестиваль тюркоязычных театров "Туганлык". [12+]**
**4.45 Х/ф "Вероника больше не придет". [16+]**

## 26 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.50, 6.10 Х/ф "Проект "Альфа". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь других". [12+]
11.05 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.20 Д/ф "Марина Неелова. "Я умею летать". [12+]
13.30 Х/ф "Ты у меня одна". [16+]
15.25 Д/ф Премьера. "Стас Михайлов. Все слезы женщин". [12+]
16.35 Премьера. "Все для тебя". Концерт Стаса Михайлова. [12+]
18.50 Премьера. "Ледниковый период. Дети". Новый сезон. [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
0.45 Д/ф "Rolling Stone: История на страницах журнала". [18+]
2.55 "Модный приговор". [6+]
3.50 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

4.20 Т/с "Сваты". [12+]
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
14.05, 1.30 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
15.40 Х/ф "Синее озеро". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.05 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Курай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "Песня года". [12+]**
**10.00 Бирешмә. Профи. [6+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [0+]**
**12.00 Бай баҡса. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.15 Башҡорттар. [6+]**
**15.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Гала-концерт Открытого Республиканского конкурса башкирских красавиц "Һылыуҡай-2019". [12+]**
**18.30 Полезные новости. [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00 Республика Live. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 Дневник VII Международного фестиваля тюркоязычных театров "Туганлык". [12+]**
**23.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.30 Х/ф "Два дня, одна ночь". [16+]**
**2.00 VII Международный фестиваль тюркоязычных театров "Туганлык". [12+]**
**3.15 Х/ф "Лев". [16+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Май (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (15) дүшәмбе | 3:04 | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 19:51 | 21:21 | 22:51 |
| 21 (16) шишәмбе | 3:03 | 3:33 | 5:03 | 13:30 | 19:53 | 21:23 | 22:53 |
| 22 (17) шаршамбы | 3:01 | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 19:55 | 21:25 | 22:55 |
| 23 (18) кесе йома | 2:58 | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 19:56 | 21:26 | 22:56 |
| 24 (19) йома | 2:57 | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 19:58 | 21:28 | 22:58 |
| 25 (20) шәмбе | 2:56 | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 19:59 | 21:29 | 22:59 |
| 26 (21) йәкшәмбе | 2:55 | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 20:01 | 21:31 | 23:01 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

**Май айында бик күп шифалы үләндәрҙе йыйып алып ҡалырға мөмкин. Был осорҙа һары умырзая, май ландышы, тиле шалҡан (сурепка), бәпембә, юл япрағы, ала миләүшә, сөйәл үләне, кәкүк баш (медуница лекарственная), бесәй тәпәйе, ҡырҡбыуын үләндәрен; һаҙанаҡтың (багульник болотный) япраҡһыҙ ботаҡтарын; һалбыр ҡайын, ҡыҙыл көртмәле, тайтояҡ, кесерткән, үгәй инә үләне, кәкүк емеше (первоцвет весенний), ҡара ҡарағат, талҡанемеш япраҡтарын; ҡайын, аҡ шыршы, күк тирәк бөрөһөн; сирень, муйыл, алмағас, сейә, ҡыҙыл энәлек; айыу ҡурайы, дегәнәк, шифалы бәпембә, цикорий, керән, ҡырҡколас тамырын; балан, этмуйыл, имән ҡайырыһы, аҡтамыр тамырһабағын йыялар. Быларҙың барыһын да төрлө сирҙәрҙән дауаланыу өсөн ҡулланырға була, халыҡта дарыу үләндәре булараҡ киң таралған ҡайһы берҙәре буйынса төрлө сығанаҡтарҙан алынған кәңәштәрҙе еткерәбеҙ.**

# МАЙ АЙЫНЫҢ...

## шифалы үләндәре

### Май ландышы



Ландыш төнәтмәһе астма, өйәнәк, көҙән йыйырыу, паралич, инсульт, Базедов ауырыуы, баш һәм ашҡаҙан ауыртҡанда ҡулланыла.

**Йөрәк ауырыуҙары.** Банканың 3/4 өлөшөн тәшкил иткән ландыш сәскәләрен спиртта 2-3 аҙна төнәтергә, һөҙөргә. Һыу ҡатыштырып, көнөнә 2-3 тапҡыр 10-15 тамсы төнәтмә эсергә.

**Көҙән йыйырыу, Базедов ауырыуы.** 4 грамм ландыш сәскәһен 1 стакан ҡайнар һыуға һалырға. Һыуынғас, һөҙөп алырға. Һәр ике сәғәт һайын 1 ҡалаҡ миҡдарында эсергә.

**Мейегә ҡан һауыу ҡурҡынысы янағанда** шул уҡ төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Глаукома.** 1 балғалаҡ ландыш сәскәһе һәм ярты стакан кесерткән япраҡтарына бер ҡалаҡ ҡайнар һыу ҡойорға. Ҡараңғы урында 8-9 сәғәт төнәткәндән һуң, ярты балғалаҡ сәй содаһы ҡушырға. Килеп сыҡҡан массаны күҙҙәргә ябырға.

**Конъюнктивит.** Ландыш сәскәһе төнәтмәһенең 10 тамсыһын алдан ҡайнатып алынған 90 тамсы йылы һыу менән ҡатыштырырға. Марля тампонын сылатып, күҙҙәргә ябырға.

***Иҫкәртеү:*** *ландыш төнәтмәләрен бөйөр һәм бауыр ауырыуҙарының ҡаты формаһы осрағында ҡулланырға ярамай. Ландыштың бешкән ҡыҙыл емештәре ағыулы. Ландыш менән ағыуланыу һәм кәрәктән артыҡ ҡулланыуҙың төп билдәләре: күңел болғана, уҡшыу, диарея, төрлө аритмия төрҙәре, парасистолия, йөрәк ҡарынсығы тахикардияһы, мускулдарҙың көсһөҙлөгө, баш ауырта, тирегә аллергия сыға, үтә ярһыуланыу, күҙҙең күреү һәм төҫтәрҙе айырыу һәләте боҙола.*

### Ала миләүшә



Ала миләүшәнең (анютины глазки) үләнен сәскә атҡан мәлендә йыйып алалар һәм яҡшы елләтелгән бүлмәлә йоҡа ғына итеп йәйеп киптерәләр. Уның составында флавоноидтар (рутин, витексин, ориентин), антоциандар, салицил кислотаһы бар. Ала миләүшә төнәтмәһен ҡаҡырыҡ сығарыу өсөн ҡулланалар, күкрәк һәм һейҙек ҡыуҙырыусы үләндәр йыйылмаһына инә. Ҡырҙа үҫкән ала миләүшә традицион һәм халыҡ медицинаһында ҡылауыр, йүтәл, бүҫер, теш һыҙлауын һәм башҡа ауырыуҙарҙы дауалағанда ҡулланыла. Уның шифаһы составында сапонин, инулин, виолин һәм башҡа төр гликозидтар булыуы менән аңлатыла.

**Ҡоро йүтәл.** 5-6 ҡалаҡ үләнгә 5 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 12 сәғәт төнәтеп, һөҙөп алырға. Төнәтмәгә 5-6 ҡалаҡ шәкәр ҡушып яй ғына утта ҡуйырғансы ҡайнатырға, әҙер булыуға 3-5 минут ҡалғанда лимон һуты өҫтәргә. Был төнәтмәне эҫе сәй менән бер ҡалаҡ ҡушып эсергә кәрәк.

**Үт ҡыуығында таш булғанда.** Ала миләүшә, күгүлән, сөйәл үләне, һары мәтрүшкә, кукуруздың емешлек ауыҙы, бәпембә тамыры, әнис һәм кориандр емештәрен тигеҙ өлөштә алалар. Бер ҡалаҡ ҡатышмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтеп, көнөнә 100 мл эсәләр.

**Тымау тейгәндә.** Ала миләүшә тамыры, ваҡланған меңъяпраҡ, мәтрүшкә үләне, балан ҡайыры һәм шалфей тамыры тигеҙ өлөштә алына. Ҡалаҡ ярым үлән йыйымын һыуыҡ һыу ҡойоп төнәтеп, 5-7 минут ҡайнатып һөҙөргә. Ҡайнатманы быулы ингаляторҙа ҡулланалар, йәки танауға тамыҙалар.

***Иҫкәртеү:*** *ала миләүшә төнәтмәләрен йыш ҡулланыу эсәктәр ауырыуын ҡуҙғытыуы бар, шуға дауаланыуҙы туҡтатып-туҡтатып торорға кәрәк. Гепатит ауырыуҙары, бөйөрҙөң "гломерулонефрит" тигән ауырыуы булғанда был үләнде ҡулланыу тыйыла.*

### Сирень сәскәһе



Сирень сәскәһен ҡулланыуға әҙерләү өсөн бөрөләнгән саҡта ипләп кенә ҡырҡып алып, 3-5-әүһен бергә йыйнап, ҡоро, яҡшы елләтелгән һәм саңһыҙ урында элеп ҡуялар. Сирень сәскәһе 1-2 аҙна тирәһе эсендә кибә, һуңынан уны ҡапҡасы ябыҡ быяла һауытта йәки махсус моҡсайҙа һаҡлағанда 1,5-2 йыл ҡулланырға ярай.

Сирень сәскәһенең араҡыға һалып эшләнгән төнәтмәһе шифалы һанала. Уны әҙерләү өсөн ҡыуаҡтың сәскәләрен һәм бер аҙ япраҡтарын быяла банкаға һалырға, дөйөм ауырлығы 95-100 грамм тартырға тейеш. Сеймалға 900 миллиметр спирт, араҡы ҡойорға һәм капрон ҡапҡас менән ныҡлы ябып, ҡараңғы һәм һалҡынырaҡ урынға 9-11 тәүлеккә ултыртырға. Төнәтмәне һөҙөп алырға кәрәкмәй, ҡараңғы һәм һалҡын урында тотҡанда 1 йыл тирәһе файҙаһы һаҡлана. Был рәүешле әҙерләнгән төнәтмә бөйөрҙә таш булғанда, йүтәл, үпкә туберкулезы, тапма ауырыуы, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, баш ауыртыу, быуын шеше, подагра, ревматизм, остеохондроз, төрлө бәшмәк ауырыуҙары, вируслы, бактериаль ауырыуҙарҙы дауалауҙа файҙалы. Һыҙлаған урынды сирень төнәтмәһе менән көнөнә ике тапҡыр ыуыныу ярҙам итә. Ҡайһы бер сирҙәрҙән дауаланыу тиҙерәк булһын өсөн үрҙә килтерелгән рецепт саҡ ҡына үҙгәртелергә мөмкин.

**Ҡан тамырҙарының варикозлы киңәйеүе.** 0,5 литрлыҡ банкыға сирень сәскәһен һалып, өҫтөнә араҡы ҡойоп, ай ярым төнәтергә. Шунан һөҙөп алып, тәндең зыян күргән урынын көнөнә 1-2 тапҡыр сылатырға кәрәк, ыуаламаҫҡа.

***Иҫкәртеү:*** *ашҡаҙан-эсәк юлы көслө ауырыуҙары, аменорея, гломерулонефрит, бөйөрҙөң хроник ауырыуы булғанда 16 йәшкә тиклем сирень төнәтмәһен ҡулланыу тыйыла.*

### Сөйәл үләне



Сөйәл үләнен (чистотел) йыл әйләнәһенә дауаланыуҙа ҡулланырға мөмкин. Ҡышҡыға әҙерләү өсөн сөйәл үләне сәскә атҡан май-июль айҙарында ҡоро һәм ҡояшлы көндәрҙе көтәбеҙ. Сағыу йәшел япраҡлы, бер ниндәй ҙә ауырыуы булмаған матур үләндәрҙе генә һайлап, һабағын ерҙән 10 см өҫтән ҡырҡабыҙ. Ҡул менән дә йолҡорға була, ләкин тирегә һәм кейемгә һутын тамыҙырға ярамай, бигерәк тә күҙгә тейҙереүҙән һаҡ булығыҙ. Сөйәл үләнен өй башында, һарайҙа йәки башҡа яҡшы елләтелгән, ҡоро һәм йылы урында йоҡа ғына итеп һалып киптерергә кәрәк. Күләгәле урында элеп тә киптерергә була. Кипкән үләнде сепрәк йәки ҡағыҙ моҡсайға һалып, ҡараңғы урында һаҡлағанда, ике йыл файҙалы сифаттары юғалмай. Тамыры менән ҡаҙып алынған сөйәл үләнен ҡалын ҡағыҙға йәки киндер сепрәккә төрөп элеп ҡуйғанда, ул 5 йылға яҡын файҙалы сифаттарын һаҡлай.

**Сөйәл үләне һуты.** Йәш, һау үҫентеләрҙе һайлап тамыры менән ҡаҙып алып, яҡшылап таҙартып йыуырға. Тамырын, һабағын, япрағын, сәскәһен ваҡ өлөштәргә киҫеп, ит турағыс аша үткәрәбеҙ. Килеп сыҡҡан массаны марляға һалып һығып, аҡҡан һутын борма ҡапҡаслы шешәгә, банкаларға ҡоябыҙ. Һутлы һауытты һалҡынға ҡуябыҙ, әммә һыуытҡысҡа түгел. Ул 4-5 көндән әсей башлай, шуға ҡапҡасын асып, газын сығырғандан һуң ныҡлап кире ябып ҡуябыҙ. Шул рәүешле әсеү процесы тамамлағансы газын сығарып, ныҡлап ябып торорға кәрәк. Әҙер һут һалҡын урында яҡшы ябылған хәлдә һаҡланһа, 2-3 йыл файҙаһын юғалтмай.

**Сөйәлдән мазь.** 1 ҡалаҡ яңы йәки әҙер сөйәл һутын 4 ҡалаҡ вазелин менән бутарға, 1/4 ҡалаҡ карбол кислотаһы ҡушырға. Һуты урынына онтаҡланған кипкән үләнде лә ҡулланырға була. Май сөйәл, һипкел һәм пигмент таптарын бөтөрөргә лә ярҙам итә.

**Төнәтмә.** 1 ҡалаҡ сөйәл үләне, 1 ҡалаҡ юл япрағы, 2 ҡалаҡ шифалы мелисса, 2 ҡалаҡ ике өйлө кесерткән, 2 ҡалаҡ баҫыу ҡырҡбыуыны үләне, 1 ҡалаҡ бәпембә. Ҡатнашманы яҡшы бутарға һәм 2 ҡалағын эмалле кәстрүлгә һалып, 3 стакан һыуыҡ һыу ҡойоп ҡайнатырға. Ҡайнап сыҡҡас та утты һүндереп, бүлмә температураһында һыуытырға. Төнәтмә һыуынғас, һөҙөп алырға, һыуытҡыста ике көн һаҡлана. Төнәтмәне стакандың өҫтән бер өлөшө миҡдарында көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда эсергә.

## ИҒТИБАР: ФЕСТИВАЛЬ!



# СӘСМӘҮЕРЕМ, СЕЛТӘРЕМ

**Сибай ҡала хакимиәте һәм хакимиәттең мәғариф һәм мәҙәниәт бүлектәре, Сибай сәнғәт колледжы, "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе, ҡаланың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы быйыл дүртенсе тапҡыр "Сәсмәүерем, селтәрем - 2019" Төбәк-ара башҡорт милли костюмы фестивале уҙғара. Ул Сибайҙа 30 майҙа уҙасаҡ.**

Башҡорт милли костюмын өйрәнеү, һаҡлау, үҫтереү, шулай уҡ был өлкәлә эшләүсе оҫталарҙы туплап, уларға тәжрибә уртаҡлашыу майҙаны булдырыуҙан тыш, фестиваль баш кейемдәре, түшкә, сәскә, ҡулға тағыла торған биҙәнеү әйберҙәре, кейеҙ, тире әйберҙәр яһау буйынса оҫталыҡ дәресе булып та тора.

Конкурста айырым кешеләр, ғаиләләр, балалар баҡсалары, мәктәптәр, урта махсус һәм юғары уҡыу йорттары, балаларға өҫтәмә белем биреүсе учреждениелар коллективтары; республиканың һәм Рәсәй төбәктәренең мәҙәниәт учреждениелары, предприятиелары һәм ойошмалары коллективтары; сәнғәт белгестәре, этнографтар, башҡорт милли костюмы өлкәһендә эшләгән ғилми хеҙмәткәрҙәр ҡатнаша ала.

Конкурстың номинациялары: "Селтәр", "Һаҡал", "Дәүәт", "Алмиҙеү", "Муйынса" - барыһы ла үҙҙәре таралған төбәккә хас традицияларҙа эшләнгән түшкә тағып йөрөтөлә торған биҙәнеү әйберҙәре; түшкә таға торған биҙәнеү әйберҙәренең заманса варианттары; "Ҡашмау", "Ҡыҙҙарҙың баш кейемдәре", "Таҡыя", "Ҡушъяулыҡ", "Ҡалпаҡ", "Түбәтәй", "Гәләбәш", "Ҡолаҡсын" - төбәккә хас традицияларҙа эшләнгән баш кейемдәре; баш кейемдәренең заманса варианттары; "Сәсмәүер" - балаларҙың, ҡыҙҙарҙың, йәш һәм өлкән ҡатындарҙың толомға тағыла торған биҙәүестәре; "Сәсҡап" - сәстәр өсөн ҡап; "Сулпылар" - ҡыҙҙарҙың толомға таға торған биҙәүесе; уларҙың заманса варианттары; "Янсыҡ" - этнографик янсыҡтар; "Янсыҡ" - стилләштерелгән янсыҡтар; "Моҡсай" - етендән, тиренән, кейеҙҙән яһалған этнографик сумка; "Моҡсай" - стилләштерелгән, шулай уҡ етендән, тиренән, кейеҙҙән тегелгән һәм бәйләнгән сумкалар; "Беләҙегем, йөҙөгөм" - милли ювелир изделиелары.

Конкурстың милли костюмдар номинацияһындағы балалар, үҫмерҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар, ир-егеттәрҙең этнографик һәм заманлаштырылған кейемдәренән дефиле күрһәтелергә тейеш. Эскиздар конкурсы номинацияһында стилләштерелгән сәхнә һәм көндәлек кейем айырым ҡарала. Оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашыусыларға кейеҙ баҫыу, түшкә тағыла торған биҙәнеү әйберҙәре һәм сәскә тағыла торған биҙәнеү әйберҙәре яһау өсөн материал бирелә. "Янсыҡ" яһауҙа сигеү оҫталары ярыша (материал бирелә).

Күргәҙмәләр һәм бәйгеләр Сибай сәнғәт колледжы алдында иртәнге 9-ҙа асыла (Таусылар проспекты, 14). Конкурс һөҙөмтәләре буйынса жюри һәр номинацияла Гран-при, лауреаттар һәм дипломанттар билдәләй. Фестивалдә ҡатнашыу өсөн ғаризалар һәм эштәрҙең эскиздары 28 майға тиклем түбәндәре адрес буйынса ҡабул ителә: **Сибай ҡалаһы, Таусылар урамы, 14, Сибай сәнғәт колледжы**. Электрон адрес: **regstar88@mail.ru** Һорауҙар буйынса **8-960-383-46-09** номерына шылтыратырға.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ҠЫУАНДЫРМАНЫ

**Яңы сыҡҡан китаптарҙы һатып алып уҡырға яратам. "Китап уҡымайҙар" тигән фекергә һәр ваҡыт ҡаршы төштөм һәм башҡорт әҙәбиәтендәге барлыҡ яңы баҫмалар менән дә танышып барырға тырышам.**

Тик яңы китаптар һәр ваҡыт ҡыуандырмай ҙа ҡуя. Бына, мәҫәлән, йәш яҙыусыларҙың **"Яңы офоҡтар" китабын** миҫалға килтерәм. Биш авторҙың әҫәрҙәренән торған йыйынтыҡ ул. **Мөнир Ҡунафиндың "Йөҙөп килгән, ти, аттар диңгеҙҙә"һенә** бер һүҙем юҡ, был повесты китабында ла яратып уҡыным. Тик был күптәнге әҫәр һәм айырым китап булып та, үҙенең йыйынтығында ла, гәзит-журналдарҙа ла баҫылды. Ни эшләп уны тағы яңы китапҡа индергәндәр икән? Авторҙың башҡа әҫәре юҡмы йәки китапты тултыра алмағандармы? Оло яҙыусылар кеүек, бер үк әҫәрҙәрен ун биш китапҡа индереү йолаһы хәҙерге йәштәргә лә күстеме әллә?

*Артабан Баныу Ҡаһармановалың "Әлли-бәлли бәүкәйе..."* тигән хикәйәһен туктай-туктай, шаңҡый-шаңҡый уҡыным. Уҡып бөтөйөм, аңлайым авторҙың әйтергә теләгәнен, төбөнә төшөнәйем, тип ныҡыштым. Тик... әҫәрҙең идея-тематикаһын да, уҡыусыға еткерә торған тәрбиәүи һабағын да тапманым. Нимә пропагандалана был әҫәрҙә? Төнгө клубтан беренсе осраткан егетте эйәртеп алып ҡайтып йоҡлау һәм эргәһендә йоҡлап ятҡан, исемен дә белмәгән егет менән төшкән фотоны интернетка һалып маҡтаныу - ул әҙәпһеҙлекте күккә күтәреү түгелме? Аңлауымса, автор рәхәтләнеп, ләззәтләнеп аҙғынлыҡты һүрәтләй ҙә, шуны хикәйә тип атай. Етмәһә, күп итеп сит телдәге кәрәкмәгән һүҙҙәр ҡуллана, улары ҡолаҡты йыртa...

*Рәйлә Сабитованың "Иркә малай"ы* алдағы әҫәрҙән айырмалы рәүештә шыма һәм уҡымлы телдә. Авторҙың теле һығылмалы, бөҙрә генә. Повесть әҫәр булараҡ камил. Әммә бында ла ҡатын-ҡыҙҙың, уның ғына түгел, гөмүмән, кешеләрҙең аҙғынлығын ниндәйҙер ҡатмарлы психологик биҙәктәр менән бизәп аҡлау ярылып ята. Героиня шундай "юғары " бейеклектән тороп, үҙенең тормошо тураһында "беренсе һөйәрем", "икенсе һөйәрем" тип һанап, мәғлүмәттәр бирә. Әҫәрҙә ир һәм ҡатындар араһында ҡапыл ғына, уйһыҙ ғына енси бәйләнештәр тоҡанып китә, яуапһыҙ ғына һүнә, икенселәрендә лә шундай уҡ уй. Һәм автор уларҙың ошолай ирекле, ҡыйыу, "донъя ваҡлығынан өҫтөн булыуҙарын" эволюцияның ниндәйҙер яңы баҫҡысы итеп күрһәтергә тырышамы шул... Мораль да, тәрбиә лә, хатта психологик үсеш процесы ла күҙәтелмәй бында, ә матур биҙәккә уралған әхлаҡһыҙлыҡ ҡына һүрәтләнә. Героиняны йәлләмәнем дә, һоҡланманым да, сөнки ул ундай кимәлгә күтәрелә алманы. Һәм ошоларҙы китапҡа баш һүҙ яҙыусы "ғаилә фәлсәфәһе" тип атай. Ҡыҙыҡ...

*Тимур Рәхмәтуллиндың "Ҡульяулығын"* уҡыу (фәһем өсөн уҡырға кәңәш итәм) мейегә бер гимнастика һымаҡ булды. Һөйләмде уҡыйһың, тик мейе уҡылғанды аңлап етмәй, тағы уҡыйһың... Унан һөйләмде үҙеңсә "тәржемә итеп" алып ҡына аңлайһың. Бына шундай күнекмәләр. Ҡыҙыҡ өсөн бер нисәһе: "Ауылдың ситендәге ҡара ҡайғыға буялған йәтеш кенә өйгә еткәс, аһ-зар тауыштарын сығарып, урам ҡапҡаһын асты"; "Ир тертләп китте, әммә күкрәгенән ысҡынып, тупһаға тәгәрәгән йөрәген урынына алып, ҡурҡыуынан стенаға һыйынған ишекте сеү илатып асты"; "Һаҡсыны иркенән тотҡан арҡан янып һүнгән йондоҙҙай өҙөлдө"; "Сайтылдашып ҡолаҡ төбөнә сәләм биреп пулялар осоп үтте" һ.б. Бындай "ҡыҙыҡтар" һөйләм һайын! Һорау тыуа: Яҙыусылар ойошмаһы, мөхәрририят, китап мөхәррире, китап нәшриәтендә был әҫәр кемдәр ҡулынан үтеп, китапҡа индерелеүгә рөхсәт алды икән? Йәш автор әҙәби әҫәрҙең нимә икәнен аңламаҫҡа ла мөмкин. "Яҙышам" икән тип уйлағандар бөгөн интернет тулы. Ә был хикәйәне тикшереүселәр ниндәй кимәлдәге "тикшереүселәр"һүң улайһа?

*Гөлнара Мостафинаның "Китһәм дә мин, йырым ҡала"* повесы ниндәйҙер дөрөҫ ағымға ҡоролған, ыңғай тойғолар ҡалдыра, әммә йомшаҡ, бик йомшаҡ әҫәр. Автор кешеләр араһындағы диалогтарға ла, мөнәсәбәттәр тәрәнлегенә, психологик моменттарға ла артыҡ иғтибар итеп тормай, ваҡиғаларҙы ашығып теҙә һала. Артыҡ бер ҡатлы, хатта үҫмерҙәр өсөн дә үтә ябай, "йыуаш" әҫәр, шул арҡала уҡый бара ялҡытып китә...

Китапты ҡулымда әйләндереп-әйләндереп ҡарайым. Ҡалын тышлы, дәүләт нәшриәтендә баҫылған. Күпме аҡса сарыф ителгән был баҫмаға! Ә уҡып ҡәнәғәтлек алыр әҫәре юҡ. Унан килеп, "халыҡ китап уҡымай" тип зарланабыҙ...

**Таңһылыу БАСИРОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

ХӘТЕРКИТАП

**"Кабаттан йәнләнгән фотоһүрәттәр" проекты гәзит уҡыусыларҙы "Беренсе Республика" фильмының геройҙары менән таныштырыуҙы дауам итә. Гениаль актер, башҡорт театры төҙөүселәрҙең береһе, Зәйни Иғҙәүләтов, Гәшиә Абыҙгилдина, Тәлғә Бикташева, Вәлиәхмәт Ғәлимов, Булат Имашевтарҙың уҡытыусыһы - уның башҡорт мәҙәниәте үҫешенә индергән өлөшөн баһалап бөтөп булмай. Проектта шәхестәрҙең тарих архивтарынан, фәнни хеҙмәттәрҙән, музейҙарҙан тупланған фотолары һәм костюмдар буйынса рәссам Әлиә Байрамғолова тарафынан кинорежиссер Булат Йософовтың "Беренсе Республика" тарихи нәфис фильмын төшөрөү майҙансығынан яһалған фотолары тәҡдим ителә.**





# ТЕАТР РЕФОРМАТОРЫ

**Мәкәрим Әҙһәм улы МӘҺӘҘИЕВ (актер Артур Ҡунаҡбаев уйнай)** - актер, режиссер, театр белгесе, уҡытыусы һәм театр реформаторы. 1922 йылдан алып Мәскәүҙә йәшәй, Театр сәнғәтенең үҙәк техникумында (һуңғараҡ - ГИТИС) белем ала, Мәскәү татар эшсе театрында сығыш яһай. 1926 йылда Өфөгә килә һәм Башҡорт дәүләт сәнғәт техникумы театр бүлегенең уҡытыу бүлеге етәксеһе һәм педагог булып эшләй башлай. Бер юлы актер һәм режиссер ҙа була, һуңғараҡ Вәлиулла Мортазин уны Башҡорт драма театрының художество етәксеһе вазифаһына тәҡдим итә. Күп актерҙарҙың уҡытыусыһы иҫәпләнә. Режиссер булараҡ, милли сәхнәгә Константин Станиславский идеяларын тормошҡа ашырыусы. Заманса театр мәҙәниәте һәм актерлыҡ оҫталығы, социалистик реализм принциптарын индереүсе, шулай уҡ репертуарҙы, театрҙың репетиция процесын үҙгәртеп ҡороусы. Мәкәрим Мәһәҙиев милли театр тарихы һәм эстетика буйынса мәҡәләләр авторы.

Сәйәси торғонлоҡ йылдарында Мәкәрим Әҙһәм улы ла шәхес культы ҡорбанына әүерелә. 1937 йылдың сентябрендә ҡулға алына һәм РСФСР Енәйәт кодексының 58-8 һәм 58-11 статьялары (террористик акттар ойоштороу һәм енәйәткә әҙерләнеү йүнәлешендә эшмәкәрлек алып барыу) буйынса хөкөм ителә. Бынан һуң Башҡорт театрының милли репертуары тулыһынса тыйыла.

Замандаштары хәтерләүенсә, "халыҡ дошмандары"н өс көн буйына театрҙа хөкөм итәләр. Залға Вәлиулла Мортазинды, Мәкәрим Мәһәҙиевты, Зәйтүнә Бикбулатованы, Бәҙәр Йософованы алып киләләр һәм коллегалары уларҙың енәйәттәре тураһында һөйләргә һәм буржуаз милләтселектә ғәйепләргә тейеш була. 1938 йылдың 10 июлендә Мәкәрим Мәһәҙиевты Мәскәүҙә аталар. Ҡәберә билдәле түгел. 1957 йылда аҡлана. 1938 йылда ялған яла буйынса уның ҡатыны - актриса Зәйтүнә Бикбулатова ла ҡулға алына.

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты,**
**проект авторы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЛАНЫ - БИШЕКТӘ, ҡатынды йәшлектә өйрәт

Буйҙаҡ утыҙға хәтле үҙе өйләнмәһә, утыҙҙан һуң ҡурҡып өйләнмәҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ир-егет тураһында уның ҡатын-ҡыҙ хаҡында нисек фекер йөрөтөүенән сығып һығымта яһап була.

**(Жилбьер Сесброн).**

Йөҙләгән таныш булмаған кешеләр менән ҡаты етәкселек иткән ир кеше йыш ҡына, өйгә һуң ҡайтып инеү менән, аяҡ кейемен тауыш-тынһыҙ ғына сисеп уҙырға тырыша.

**(Финли Питер Данн).**

Ҡартлыҡ - донъялағы иң көтөлмәгән нәмә. Унан әле генә көлгән йәш егетте лә ҡартлыҡ урап үтмәй, егет өсөн был ысынлап та көтөлмәгән булып сыға.

**(Рамон Гомес Де Ла Серна).**

Мәңгелек хәҡиҡәт, мәңгелек булыуға ҡарамаҫтан, даими хәтергә төшөрөп һәм раҫлап тороуға мохтаж.

**(Махатма Ганди).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарт ғүмер буйы бил бөгөп эшләй, әммә мандып байып китә алмай. Уның ҡарауы, ул үҙендә ғәйәт бай тормош аҡылы туплай. Бер саҡ ул ер эшкәртеп йөрөгәндә, үҫмер улы берҙәнбер аттары юғалғанын хәбәр итә: "Атай, беҙҙә бәхетһеҙлек - атыбыҙ юғалған". "Нимә быны бәхетһеҙлек тип атайһың, улым? - ти ҡарт. - Ҡарарбыҙ, ваҡыт күрһәтер".**

**Бер нисә көндән, ысынлап та, ат тағы бер ат эйәртеп ҡайтып инә. "Атай, ниндәй бәхет, атыбыҙ үҙенә иптәш эйәртеп ҡайтҡан!" - тип шатлана үҫмер. "Ниңә һин быны бәхет тип атайһың, улым? - ти тағы ҡарт. - Ҡарарбыҙ, ваҡыт күрһәтер".**

**Күпмелер ваҡыттан һуң үҫмер эйәреп ҡайтҡан атты ауыҙлыҡлап, йөрөп килергә була. Ләкин ҡырағай ат артҡы аяҡтарына баҫып, уны өҫтөнән алып ташлай. Үҫмер аяғын һындыра. "Атай, ниндәй бәхетһеҙлек, мин аяғымды һындырҙым", - ти көйөп улы. "Ниңә һин быны бәхетһеҙлек тип атайһың? - ти тағы атаһы. - Ҡарарбыҙ, ваҡыт күрһәтер". Үҫмер атаһының был фәлсәфәһенән әллә ни уртаҡлашмай ҙа, аңламай ҙа. Шуға ла өндәшмәй генә үткәреп ебәрә. Бына бер нисә көндән уларҙың ауылына батша һалдаттары килә һәм бөтөн егеттәрҙе яуға йыйып алып китеүҙәре тураһында белдерә. Ҡарттың йортона ла киләләр һәм уның улының аяғы зәғиф икәнен күреп, кире китәләр. Шунда ғына үҫмер нимә бәхет, нимә бәхетһеҙлек икәнен бер ваҡытта ла ныҡлап билдәләп булмағанын аңлай. Эйе, һәр саҡ ваҡыттың нимә насар, нимә яҡшы икәнен раҫлағанын көтөргә кәрәк. Тормош шундай: насар тип раҫлағаның ваҡыт үтеү менән яҡшыға әйләнеүе мөмкин".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририят:
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 4077
Заказ - 392